ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 февраль (шаҡай) 2016

№7 (685)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был уҡыу йортонда...**
роботтар ҙа футбол уйнай



4

**Һаман яратып ҡарайбыҙ**
"Салауат Юлаев" фильмы төшөрөлөүҙең 75 йыллығына ҡарата



7

**Йөрәгендә ҡояш йөрөтөүсе**



8-9

**Барыһы ла дөрөҫ юҫыкта бара**



11

**ТВ-программа** 14

***Әгәр ҙә һин маҡсатыңа табан китеп бараһың һәм һәр юл сатында һиңә ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәргә таш бәрергә туҡталаһың икән, ул саҡта һин маҡсатыңа барып етә алмаясаҡһың.***

***(Ф. Достоевский).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Доллар менән евроның күтәрелеүе һеҙҙең көнитмешкә йоғонто яһаймы?

*Ирек ҒӘЛЛӘМОВ, офис хеҙмәткәре:* Миңә килгәндә, былтыр, элекке йыл нисек йәшәнем, шулай йәшәйем әлегә. Доллар менән евроның күтәрелеүе йоғонто яһайҙыр инде ул, сөнки хәҙер аҙыҡ-түлек магазинына бер инеп сығыуҙа элек ике тапҡыр инеп сыҡҡандағы аҡсанды ҡалдырып сығаһың - шуныһы ныҡ һиҙелә. Тимәк, хәҙер нимәлер һатып алырҙан алда уйларға, икеләнергә тура килә. Мин был юлы ит йә банан һатып алмаһам да, үлмәҫмен, ә бына икмәк йә берәй арзаныраҡ ярма алмайынса булмай, тигәнерәк фекер йөрөтәм хәҙер магазинда. Элекке кеүек, һәр бүлек буйлап оҙаҡлап ризыҡ һайлап йөрөп булмай. Тиҙерәк иң кәрәген алаһың да сығып китеү яғын ҡарайһың. Мин, ярай ҙа, яңғыҙ йәшәйем, ә бына ғаиләле кешеләргә күпкә ҡатмарлыраҡ була бара йәшәүе, сөнки ҙур ғаиләнең ихтыяждары ла ҙурыраҡ. Балаларға улар һораған емеш-еләк, тәм-том йә булмаһа, уйынсыҡ һатып алыу урынына, доллар менән евро курсы тураһында нотоҡ һөйләп кенә ҡотолоп булмай бит. Апайым - уҡытыусы, уларҙың эш хаҡын үҙегеҙ беләһегеҙ: былтыр ул эшләгән мәктәптә бер нисә уҡытыусыны ҡыҫҡартып, ҡалғандарының эш хаҡын киҫеп, ныҡ ҡына оптималләштереү үткәреп ташланылар. Еҙнәй ниндәйҙер бер заводта эшләй, өсдүрт айлап инде эш хаҡы алғандары юҡ. Ә ике баланы аҫрарға, уҡытырға кәрәк. Уларҙың тормошона ҡарайым да, өйләнеү өсөн доллар менән евроның ергә яҡыныраҡ төшкәнен көтөп, йөрөй бирәм инде, ни эшләмәк кәрәк. Бындай мәхшәр заманында "Яңғыҙ башым - ас тамағым, тыныс ҡолағым" тип тик ятаһың. Дөйөм алғанда, доллар менән евроның бер ниндәй сиктәргә һыймайынса, бер күтәрелеп, бер төшөп "ҡыйпысыҡланыуы" Америка тарафынан Рәсәйгә ҡаршы махсус рәүештә эшләнә, тип уҡығаным бар. Уның маҡсаты иң тәүҙә Рәсәй иҡтисадын ҡаҡшатып, һумды бөлдөрөүҙә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# БАШҠОРТ КИТАПТАРЫН...

## электрон китапханала уҡырға мөмкин

**Интернет селтәрендә "Китаптар" башҡорт электрон китапханаһының төп версияһы эшләй башланы (Ҡарағыҙ: kitaptar.bashkort.org)**

Интернет-ресурсты булдырыусылар хәбәр итеүенсә, башҡорт әҙәбиәте бер урында тупланған. Китаптарҙы күсереп алырға, уҡырға, үҙеңдекен өҫтәргә һәм дуҫтар менән уртаҡлашырға мөмкин. Сайтта башҡорт һәм башҡа телдәрҙә 900-ҙән ашыу китап, дәреслек һәм журналдар йыйылған. Китаптар төрлө форматта бирелгән, компьютерҙа ғына түгел, смартфон, планшет һәм башҡа электрон сараларҙа ла асыла. 2016 йылдың 1 мартында ресурстың бета-версияһын һынау тамамлана. Өфөлә сервистың һуңғы версияһының рәсми презентацияһы уҙа, унда мендәрсә яңы китап буласаҡ.

- Беҙ китапхананы яҡшыртыуҙы дауам итәбеҙ, әммә уҡыусыларҙың ярҙамы кәрәк. Дөйөм тырышлыҡ менән китапхананы тулыландырыу мөһим. Хаталар тураһында әйтегеҙ һәм сервисты яҡшыртыу буйынса идеялар тәҡдим итегеҙ. Шәхси китапханағыҙҙа булған китаптарығыҙҙы һалырһығыҙ тип ышанабыҙ. Шулай уҡ тәү сиратта электрон вариантҡа күсерергә кәрәк булған китаптарҙы тәҡдим итә алаһығыҙ, - ти "Башҡорт проекттары" төркөмө етәксеһе Илдар Кинйәбулатов.




12+

**✓ Алға киткән илдәрҙән үрнәк алып, еребеҙгә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға, уны үҙебеҙҙең төп байлыҡ итеп иҫәпләргә тейешбеҙ. Ергә ҡарата мөнәсәбәт яҡшырһа, республиканың иҡтисади хәле лә ыңғайға көйләнәсәк.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЕРГӘ ҮҘЕБЕҘ ХУЖА БУЛАЙЫҠ!

***Ғарифулла ЯПАРОВ, Халыҡ-ара иҡтисад һәм хоҡуҡ институты филиалы директоры, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор:*** Үткән йыл Рәсәй халҡы өсөн ауыр осор булды, 2016 йыл тағы ла ҡатмарлыраҡ булыр, тип көтөлә. Ил иҡтисади көрсөк кисерә. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында бөтә Рәсәй менән капитализм юлын һайлағанда уҡ беҙ киләсәктә көрсөктәр буласағын күҙалларға тейеш инек. Сөнки капиталистик илдәр өсөн көрсөк тәбиғи хәл, ул ҡабатланып тора. Көрсөктән һуң һәр ваҡыт күтәрелеш була, капиталистик ил тағы ла юғарыраҡ кимәлгә сығырлыҡ яңы көс туплай. Беҙ әле капиталистик ил булып йәшәй башлағандан бирле тәүге тапҡыр көрсөк кисерәбеҙ. Ул оҙаҡҡа бармаҫ, башҡа алға киткән илдәрҙән үрнәк алып, дәүләт етәкселәре барыһын да көйләп ебәрер, тип ышанам.

Әммә иҡтисади көрсөк, тип, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, үҙебеҙ өсөн мөһим мәсьәләләрҙе хәл итергә форсат таба алмай ҡалмайыҡ, тим. Рәсәй тарихында аҫабалыҡ алған берҙән-бер халыҡ булараҡ, еребеҙҙе хәстәрләү тураһында ла онотмайыҡ. Сөнки бөгөн беҙ еребеҙҙе юғалтып барабыҙ, республикала булған 14 миллион гектар ерҙең 1 проценты ғына рәсми рәүештә Башҡортостан милке иҫәпләнә. Бер проценттан саҡ ҡына күберәге райондарға ҡарай. Дөйөм алғанда, 14 миллион 270 мең гектар ерҙең ике генә процентына республика хужа. Башҡортостандың гимны, гербы, Конституцияһы һәм уның үҙаллылығын билдәләгән башҡа атрибуттары бар, тик ере генә юҡ килеп сыға. Дәүләтселектең төп атрибуты - ер, шул территорияға иҡтисади-сәйәси үҙаллылыҡ закондары тарала. Шуға күрә беҙ бөтә алға киткән илдәрҙән үрнәк алып, еребеҙгә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға, уны үҙебеҙҙең төп байлыҡ итеп иҫәпләргә тейешбеҙ. Ергә ҡарата мөнәсәбәт яҡшырһа, республиканың иҡтисади хәле лә ыңғайға көйләнәсәк.

Әлбиттә, ерҙе республика милке итеп рәсмиләштереүҙе Хөкүмәт хәстәрләргә тейеш, сөнки был эш ябай халыҡтың ғына ҡулынан килмәй. Еребеҙҙе рәсми рәүештә хосусилаштырһаҡ, халыҡ өсөн арзан хаҡҡа торлаҡ йорттары төҙөү мәсьәләһе лә хәл ителәсәк. Ошондай изге ниәттәребеҙ ергә үҙебеҙ хужа булған осраҡта ғына тормошҡа ашырға мөмкин. Тимәк, хәстәрләргә кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Доллар менән евроның күтәрелеүе һеҙҙең көнитмешкә йоғонто яһаймы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Дилбәр МОРТАЗИНА, кесе эшҡыуар:*** Сипайлово баҙарының ике сауҙа нөктәһендә кондитер изделиелары һата инем: үлсәүле шоколад кәнфиттәр, карамель, печенье, сәй-шәкәр һ.б. Һуңғы ике-өс йылға тиклем эштәр көйлө генә барҙы. Ул тигәнсә булмай, санкциялар башланды, һөҙөмтәлә ҡайһы бер сит илдәрҙән: Польша, Латвия, шулай уҡ Украинаның Roshen фабрикалары продукцияһы беҙҙең кәштәләрҙә бик күренмәй башланы. Үҙебеҙҙең Рәсәй етештереүселәре кәнфиттәре лә насар түгел, әлбиттә: Һамар, Белгород, Новгород, Ульяновск, Мәскәү өлкәләре продукцияһын яратып алалар. Үкенескә күрә, тәм-томға ла хаҡтар артып ҡына тора. Һуңғы ваҡыт ошо сәбәпле байтаҡ продукция һатылмай ҡала. Рәсәй фабрикалары продукцияһы сифат яғынан эре концерндарҙан ҡалышһа ла, хаҡтары яғынан баҙар кәштәләре күпселек һатып алыусы, айырыуса урта хәлле һәм аҙ тәьмин ителгән халыҡ өсөн төп сауҙа урыны. Ә инде Мәскәүҙең "Бабаев", "Красный Октябрь", "Рот-фронт" кеүек данлыҡлы кондитер берекмәләренең тәм-томдары бик ҡиммәт, шуға ла улар эре сауҙа йорттары һәм фирма магазиндары менән генә эш итә. Бөгөнгө көндә уртаса рәсәйле өсөн бар тапҡаны икмәк менән сәй-шәкәргә генә етерлек булғанда, тәм-томдар хыялда ғына инде ул, бер һатып алыусым әйтмешләй. Әйткәндәй, ул да минең ларекты урап үтә хәҙер. Даими һатып алыусыларымдың күбеһе менән күрешкәнем юҡ һуңғы ваҡыт. Бер кибетте ябып, һатыусыһын эштән ебәрергә тура килде. Әле быныһында үҙем эшләп торам. Табыш юҡ. Артабан ни эшләргә - аптырайым. Биржа баҙарында хәлдәр тиҙ генә көйләнергә оҡшамаған, доллар менән евро ярышып һикерәләр: кемеһе үргәрәк, ҡайһыныһы текәрәк... Ахырыһы, был нөктәне лә ябып, үҙемә берәйһенә һатыусы булып ялланырға тура килмәгәйе... Тәм-том минең аңымда бала саҡтан ниндәйҙер байрам, шатлыҡ кәүҙәләнеше булып йәшәй. Айырым берәй кешенең йәки ғаиләләрҙең тормош хәле яҡшы булып, күңеле тыныс һәм күтәренке булһа, улар мотлаҡ йыш ҡына тәм-том һатып ала. Ә бөгөн минең бушап ҡалған кәнфит кибетемдә яңғыҙым моңайып ултырыуым илдә барған күңелһеҙ хәлдәрҙең бик асыҡ сағылышылыр, моғайын.

***Фәрғәт ИШКИЛДИН, хеҙмәт ветераны:*** Тәүҙәрәк мин, сит илгә ял итергә йөрөмәйем, һаҡлыҡҡа һалған аҡсам юҡ, тип илдәге хәлгә тынысыраҡ ҡарай инем, ләкин уйлана, эксперттар фекерен өйрәнә торғас, хаталаныуымды аңланым. Доллар менән евроның самаһыҙ күтәрелеүе беҙҙең көнитмешкә үҙ йоғонтоһон бик аҫтыртын һәм күптән һиҙҙерә башлағайны бит инде. "Оптималләштереү, ҡыҫҡартыу, ябыу" тигән күңелһеҙ күренештәр ҡасаныраҡ башланды һуң, хәтерләгеҙ әле? Федераль бюджеттың "итәген ҡырҡып, ең яһайҙар" түгелме әле булһа? Әле элекке ише генә лә булмаясаҡ! Рәсәй Хөкүмәте былай ҙа тартып-һуҙып ҡоршалған быйылғы федераль бюджетты тағы ла 10 процентҡа ҡыҫҡартыу яйын ҡарай, тиҙәр. Уның "ҡайсыһы" аҫтына, әлбиттә, иң беренселәрҙән булып әлеге лә баяғы пенсионерҙар, балалар, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр - бер һүҙ менән әйткәндә, халыҡтың иң яҡлауһыҙ ҡатламы эләгәсәк. Ил төбәктәре бындай сараларға ең һыҙғанып тотонған да инде: өлкәләрҙең береһендә мәктәптәрҙә балалар туҡланыуына дотацияны кәметкәндәр, икенсе бер крайҙа балалар баҡсаһында туҡланыуҙы финанслау туҡтатылған, ҡайҙалыр хеҙмәт ветерандарына коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙә - ташламалар, ә уҡытыусыларға өҫтәмә түләүҙәр юҡҡа сығарылған. Аҙыҡ-түлек, аяҡ һәм өҫ кейемдәренә, көнкүреш һәм компьютер техникаһына хаҡтар бермә-бер артып тора. Хаҡтар ҡиммәтләнеүе илдәге көрсөк күренештәрен тағы ла тәрәнәйтәсәк, эшһеҙлек артасаҡ, тип юрай ҡайһы бер күҙәтеүселәр. Позитив фекерле эксперттар иһә Рәсәй валютаһының бөлөүе ниндәйҙер объектив сәбәптәргә ҡарағанда, күберәк "психологик һәм спекулятив"факторҙар менән бәйле, тип аңлатма бирә һәм уны финанс баҙарындағы паника менән нигеҙләргә тырыша. "Баҙар ҡатнашсылары үҙҙәре лә күреп тора: түбәнәйеү өсөн бер ниндәй фундаменталь сәбәптәр юҡ, күпмегә һуҙылған хәлдә лә ул мотлаҡ отасаҡ әле", ти Рәсәй валютаһы курсы хаҡында Юғары иҡтисад мәктәбе профессоры А. Абрамов. Шулай була күрһен дә бит...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 февралдән 31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылыу иғлан ителде. Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.**




Февралдә 2016 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Өс кеше бәхетенә **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап эләгәсәк, тип вәғәҙә итәбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Әйткәндәй, гәзитебеҙгә беренсе ярты йылға яҙылып өлгөрмәгәндәр февралдең 20-нә тиклем яҙылһа, уны марттан **(4 айға -363 һум 84 тин)** алдыра башлаясаҡ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓15 февралдән "Берҙәм Рәсәй"ҙең алдан тауыш биреүендә ҡатнашыуға ғариза бирергә мөмкин. 10 апрель - документтар ҡабул итеүҙең һуңғы көнө, кандидаттарҙы теркәү 15 апрелдә тамамлана. Был хаҡта партияның төбәк бүлексәһе секретары, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев хәбәр итте. Константин Толкачев әйтеүенсә, төп шарттар - кандидаттарҙың үҙ-үҙен күрһәтеүе һәм дебаттарҙа ҡатнашыуы. Алдан тауыш биреүҙә теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Партияла ағза булып тороу-тормауы мотлаҡ түгел. Кандидаттар суд хөкөмөнә тарттырылмаҫҡа, шулай уҡ сит илдәрҙәге активтарға эйә булмаҫҡа тейеш. 1 апрелгә тиклем уларға килемдәр һәм сығымдар тураһында декларация тапшырырға кәрәк.

✓2014 йылдың 1 апреленән республикала торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау программаһы эшләй. Социаль проект Башҡортостан Хөкүмәте башланғысы буйынса уртаса килемле граждандар өсөн торлаҡ һатып алыу мөмкинлеген арттырыу маҡсатында әҙерләнгән һәм төбәк бюджеты аҡсаһы иҫәбенә берлектә финанслау шарттарында ғәмәлгә ашырыла. Программаны үҫтереү маҡсатында республика халҡына ике йыл дауамында ошо программаға инеү мөмкинлеге бирелде, 8200-ҙән ашыу кеше ошо хоҡуҡ менән файҙаланды. 2016 йылдың 14 февраленән торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау системаһына инеү шарттары үҙгәрә. Хәҙер программала Башҡортостанда даими йәшәгән һәм "Рәсәй ғаиләһе өсөн торлаҡ" программаһы буйынса эконом класлы торлаҡ һатып алыуға хоҡуҡлы кешеләр категорияһына ҡараған граждандар ҡатнаша ала.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Әнүәр Бакировтың Куба Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Эмилио Лосада Гарсиа менән осрашыуы барышында шәкәр диабеты менән ауырыған пациенттарҙы дауалау, сирҙе заманса дарыуҙар ярҙамында еңеү алымдары хаҡында һүҙ барҙы. "Беҙ табандың сей яраһын дауалау өсөн ҡулланылған уникаль препарат тураһында һүҙ алып барҙыҡ, ул пациенттарҙың аяҡтарын киҫеү осраҡтарын кәметеүгә булышлыҡ итә", - тип билдәләне Әнүәр Бакиров журналистар менән аралашҡанда. Бөгөнгә республикала шәкәр диабеты менән сирләүсе 101 меңдән ашыу пациент теркәлгән. Шуларҙың 956-һы - "диабетик табан" синдромлы. Был сир оҙаҡ дауалауҙы талап итә, шулай уҡ инвалидлыҡҡа килтерә.

**✓ Күптән түгел һәр төрлө чипсылар, татлы газлы эсемлектәр, шулай уҡ составында күпләп әлеге пальма майы һәм шәкәр булған зыянлы ризыҡтарға акциз индереү мәсьәләһе ҡаралыуы хаҡында, ниһайәт, һүҙ ҡуҙғатылды.**



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# СЫРҘА НИҢӘ СЫР ТӘМЕ ЮҠ?

**Бөгөн һаулыҡ һәм сәләмәт тормош мәсьәләләре беренсе планға сыҡҡан һайын, кешелектең бысраҡ экология тотҡононда ағыуланыуға дусар ителеп йәшәүе ҡотолғоһоҙға әйләнә бара. Күптән түгел генә әле һүҙ нигеҙҙә эсәр һыу, һулар һауа тирәһендә бара ине, хәҙер кеше организмын ағыулаусы өсөнсө "кит" - аҙыҡ-түлек сифаты хаҡында күберәк һөйләй башланылар.**



Насар экология электән дә ризыҡтарыбыҙҙы ағыулай ине, һүҙ ҙә юҡ. Ләкин был йәһәттән барыбер ниндәйҙер техник нормалар һәм контроль яйға һалынған, тип ҡарала ине. Яйға һалынмағандары хаҡында, тирә-яҡ мөхит беҙҙең ихтыярға бәйле булмаған объектив сәбәптәр арҡаһында бысратыла, тип тынысландырҙылар. Бөгөн иһә кешелекте ағыулау процесына... кешелек үҙе ең һыҙғанып тотондо! Был нимәлә күренә? Бөтөн төр тағам иткән ризыҡтарыбыҙҙа: ит-һөт, икмәктән башлап, йәшелсә-емеш һәм башҡаһында.

Ауылдан килтерелгәнен иҫәпләмәгәндә, ҡала магазиндарында һатылған ит һәм балыҡ, сәнәғәт етештереүе продукцияһы булараҡ, һәр төрлө эшкәртеүҙәр аша үтә. Мал һәм ҡош-ҡорт сирләмәһен өсөн уларға прививкалар яһала, антибиотик өҫтәлмәләр, тиҙ үҫтереүсе гормондар ҡушып ашатыла. Икмәк, йәшелсә-емештең шулай уҡ химик эшкәртеүҙәр аша үтеүен, нитраттар менән "байытылыуын" яҡшы беләбеҙ. Өҫтәүенә, ондоң сифатын да шулай уҡ аңлы рәүештә боҙоуға юл ҡуйыла икән. Һаҡлау ҡағиҙәләрен тупаҫ боҙоу арҡаһында күгәреп, янып эштән сыҡҡан иген культураларын уйлап та тормай тирмәнгә һалып ебәреү бер ни түгел икән намыҫһыҙ етештереүсегә. Әйткәндәй, он, шәкәр һатып алғанда, ҡарап, ентекле тикшереп алырға кәңәш итә белгестәр, сөнки уның составында ҡайһы саҡ сит ҡатнашмалар (аҡбур, алебастр, крахмал һ.б.), шулай уҡ төҫ һәм тәм биреүсе өҫтәмәләр булыуы асыҡлана.

Һөт ризыҡтарының да тәме, составы бик ныҡ үҙгәрештәргә дусар ителде. Уларға хәҙер арзанлы сеймал - пальма майын күпләп ҡушыуҙары мәғлүм булды. Ул һөттә лә, май-ҡаймаҡта ла, сырҙа ла бар. Әйткәндәй, беҙҙең аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә ошо пальма майы ҡушылмаған берәй ризыҡ ҡалдымы икән? Шуның өсөн дә бит майҙан - май, сырҙан сыр тәме сыҡмай. Мәҫәлән, беҙҙең Бәләбәй май-сыр комбинаты әллә күпме төрлө сорт сыр етештерә етештереүен, ләкин улар бер-береһенән исемдәре менән генә айырыла. Ҡайһы береһенә бал да ҡушып ҡарайҙар, ахыры, тик сырҙа барыбер сыр тәме юҡ. Швейцария сырын, мәҫәлән, бер генә тапҡыр ауыҙ итеп ҡараған кеше үҙебеҙҙең сырҙарға әйләнеп тә ҡарамаясаҡ.

Пальма майын хәҙер мул итеп кондитер ризыҡтарға ла ҡушалар икән. Ана шуға ла бала саҡта ашап туйғыһыҙ печеньелар юҡ та инде хәҙер. Ә бит был продукция төрҙәре менән магазин кәштәләре һығылып ята, тик уларҙы һатып алыусы бик һирәк, сөнки тәмле түгел. Тышҡы күренешенә ҡыҙығып, хәлүә лә һатып алып ҡарайһың, тик барыбер иҫкертеп, уны ташларға тура килә. Ашамағас, исемен әйткәндә лә ауыҙҙа хәлүә тәме килеп тормай, онотолдо ул ризыҡ та. Былар бөтәһе лә әлеге яһалма ҡушымталар, өҫтәмәләр, консерванттар ҡушып әҙерләү арҡаһында килеп сыға.

Ә бит ҡайһы бер етештереүселәр продукция составына ингән зыянлы ингредиенттарҙы йәшереп ҡалдырыу яйын ҡарай. Уның ҡарауы, бындай ризыҡтар хәҙер хөкүмәт даирәһендә йәшермәйенсә, үҙ асылы менән атап йөрөтөлә башлаған, булһа кәрәк. Күптән түгел һәр төрлө чипсылар, татлы газлы эсемлектәр, шулай уҡ составында күпләп әлеге пальма майы һәм шәкәр булған зыянлы ризыҡтарға акциз индереү мәсьәләһе ҡаралыуы хаҡында, ниһайәт, һүҙ ҡуҙғатылды. Был сараны ҡулланыуҙа айырыуса Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ныҡышмалылыҡ күрһәтә. "Бер нисә йыл инде бына ошо идеяны яҡлап сыҡҡаныбыҙға. Беҙҙең башланғыс был", - тип белдерҙе яңыраҡ министр Вероника Скворцова. Һәйбәт башланғыс, һүҙ ҙә юҡ, тик бына мәсьәләнең икенсе яғын уйланымы икән һаулыҡ һаҡсылары?

Мәктәптән ҡайтып килгән балаларға иғтибар иткәнегеҙ бармы, йәмәғәт? Һәр береһенең тип әйтерлек ҡулында - газлы һыу шешәһе менән әлеге чипсы. Уларҙа был "ризыҡҡа" бәйлелек барлыҡҡа килгәнлеген аңлауы ауыр түгел. Хәҙер балалар уны ҡиммәт хаҡҡа ла барыбер һатып алып ашаясаҡ. Министрлыҡты әйтәм, таяҡтың бер башын күтәргәс, икенсе яғын да уйларға кәрәк ине: ниңә әле аҙыҡ-түлек етештереүселәр менән кәңәшләшеп-килешеп, балалар өсөн махсус рәүештә зыянлыларын алыштырырҙай файҙалы продукция етештерә башламаҫҡа? Ә ниңә пальма майын аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә ҡулланыуҙы, ғөмүмән, ҡәтғи тыймаҫҡа? Зыяны Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан рәсми рәүештә танылған бит инде...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Белгестәр әлегә тиклем пальма майының зыяны һәм файҙаһы хаҡында бәхәсләшә, ләкин шуныһы раҫ: донъя баҙарында ул иң арзан май булараҡ билдәле. Уның "популярлығы" фәҡәт шунда ғына. Ә аҙыҡ сәнәғәтенә шул ғына кәрәк тә: арзан сеймал ярҙамында етештерелгәнде унлата ҡиммәткә һатыу. Пальма майы - көслө канцероген, тип таный күпселек белгестәр. Уны ҡулланыу ҡандағы холестеринды күтәрә, ә был, аңлауығыҙса, йөрәк-ҡан тамырҙары сиренә, атеросклерозға сәбәпсе була.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИШАРА



# ҮҘ ОЯҺЫНДА...

## Амур ҙа юлбарыҫ

**Үткән йылдың ноябренән алып бөтөн ил халҡы ҡыҙыҡһынып Приморье тәбиғәт паркында бергә һыйышып көн күргән Амур менән Тимурҙың ҡылыҡтарын күҙәтә.**

Кәзә тәкәһенең тәүҙә исеме лә булмай. 22 ноябрь уны сираттағы ҡорбан рәүешендә тереләй килеш юлбарыҫ йәшәгән вольерға индереп ебәрәләр. Артабан ни булғаны үҙегеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Тик шуныһы аңлашылмай: тояҡлыларға яратып һунар итеүсе тайга хужабикәһе ни өсөн кәзә тәкәһен тотоп ашамай һуң? Юлбарыҫ һынлы йыртҡыс янында ла ҡалтырап төшмәгән, киреһенсә, баһаһын белеп, потенциаль дошманы менән үҙен тиң тотҡан тәкә һалҡын ҡанлылығы (әллә - бошмаҫлығы?), батырлығы арҡаһында ғына иҫән ҡала алды ла инде. Ул ғына ла түгел, үҙенең тейелгеһеҙлеген раҫлап, шәхси биләмәһен булдырыуға өлгәште. Шуға ла сафари-парк хеҙмәткәрҙәре, яратып, Тимур тигән исем ҡушты уға. Шулай ҙа күптәр өсөн сер булып ҡала бындай дуҫлыҡ. Нимәгә арҡаланды кәзә тәкәһе? Мөгөҙҙәренәме? Улай тиһәң, ана нисек елкәһенән матҡып, еңел генә алып быраҡтырҙы Амур Тимурҙы. Артыҡ ҡыланғаны, һөҙөшөргә маташҡаны өсөн. Бынан алдараҡ та бит кәзә башы менән юлбарыҫты ышығынан ҡыуып сығарғайны ул. Был юлы бындай мәнһеҙлекте ғәфү итмәне Амур, хаттин ашҡанды ене һөймәй шул көслөләр. Тик барыбер, арыу ғына ойпалап ташлаһа ла, үлтермәне. Шәфҡәтлелек күрһәттеме, тамағы туҡ инеме, әллә янындағы ел-ямғырҙа арҡа терәр берҙән-бер йән эйәһен йәлләнеме... Ә, бәлки, тағы ла япа-яңғыҙы тороп ҡалыуҙы өнәмәгәндер? Һәр хәлдә, элекке дуҫтар рәшәткә аша ғына күҙәтә ала хәҙер бер-береһен. Ыҙғыштан һуң улар айырым йәшәй. Тик Тимурҙа Амур ҡайғыһы юҡ, ул "кәләш" күҙләй, тиҙәр. Дөрөҫ, баҫылып, башҡаланып, үҙ донъяһын ҡороуы хәйерле, ни тиһәң дә.

...Ысынында, Европаны баҫып алған мигранттар тәртибен дә хәтерләтеп ҡуя бит вольерҙағы хәл. Ситтәр биләмәһенә баҫып килеп инеп, артабан төкөшөргә йәтешләнеп, мөгөҙҙәрендә тарбайта башлаһаң, елкәндән алып ырғытыуҙары бик ихтимал һәм бик мәслихәт тигәнгә лә яҡшы ғына ишаралай. Тик мигранттар был хәҡиҡәтте ниңәлер һанлап етмәй. Улар менән артабан ни булыры ғына билдәһеҙ әлегә...

**Фәтиха МӨХӘМӘТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Быйылдан башлап республиканың ҡала һәм районларында йәшәүселәр урындағы телестудия тапшырыуҙарын ҡарай ала. Һәр йома киске сәғәт 5 тула 15 минуттан алып 6-сы яртыға тиклем Башҡортостан юлдаш телеканалында Баймаҡ, Хәйбулла, Әлшәй, Саҡмағош һәм башҡа районларҙағы студияларҙың тапшырыуҙары күрһәтелә. Башҡортостан юлдаш телевидениеһы менән бөтәһе 10 телеканал хеҙмәттәшлек итә.

✓ Өфөлә ауыл хужалығы продукцияһы йәрминкәләре уҙғарыла. Баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Ухтомский, 19 ("Көньяҡ" баҙары), Боровая, 14, 3-сө корпус ("Юлдаш" сауҙа комплексы), Эшсе хәбәрселәр, 20 ("Уңыш" сауҙа комплексы), Ҡулса, 65 ("Меркурий" сауҙа-ҡунаҡхана комплексы), Баҡса, 2 ("Орджоникидзе" сауҙа-күңел асыу комплексы) урамдарындағы фермер майҙансыҡтарында ауыл хужалығы продукцияһы һатыласаҡ.

✓ Башҡортостанстат ағымдағы йылдың 1 февраленән 8-нә тиклем социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлектең ҡайһы бер төрҙәренә хаҡтарҙың үҙгәреүе тураһында мәғлүмәттәр килтерҙе. Аҡ күсәнле кәбеҫтә (24,19 һум) 2,6 процентҡа, туңдырылған балыҡ (132,37) - 2, стерилләнгән һөттөң бер литры (52,65) - 1,7, шәкәр ҡомо (50,95) һәм алма (84,59) 1,5 процентҡа ҡиммәтләнгән. Бойҙай онона (29,89) һәм арыш ононан, бойҙай һәм арыш оно ҡатнашмаһынан бешерелгән икмәккә (41,07) хаҡтар үҙгәрмәгән. Башлы һуған (23,02) - 1,3, беренсе, икенсе сортлы бойҙай ононан бешерелгән икмәк, булка изделиелары - 1,2, кишер (26,02) 1 процентҡа арзанайҙы.

✓ Беренсел торлаҡ баҙарында ипотека ставкаһын 12 процентҡа тиклем субсидиялау программаһын 2016 йылдың аҙағынаса оҙайтырға ниәтләйҙәр. 10 февралдә "2015 йылда күсемһеҙ милек баҙары йомғаҡтары" эшҡыуарлыҡ форумында Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Михаил Мень ошо хаҡта хәбәр итте. Махсус ипотека кредитлауы программаһы көрсөккә ҡаршы сараларҙың береһе булараҡ, уҙған йылдың тәүге айҙарында әҙерләнде һәм үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы.

✓ Өфөнөң Калинин районында "Халыҡтар берҙәмлеге һәм дуҫлығы" паркы барлыҡҡа киләсәк. Халыҡтар дуҫлығы йортонда милли-мәҙәни берекмә етәкселәре менән уҙған кәңәшмәлә инвалидтарҙың район йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Ришат Аллағужин парктың проектын тәҡдим итте.

**"Башинформ"дан.**

✓ **Нурсолтандың смартфон-телефон аша идара ителә торған роботы бәләкәй генә тупты ҡыуаланы. Был ярышта Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылынан килгән "Тимербатыр" командаһының алдына сығыусы булманы.**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# ҠАЛА ҮҪЕРГӘ ТЕЙЕШ!

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендә үткән сираттағы ултырышта айырым төҙөлөш нөктәләре проблемаһы күтәрелде. Муниципалитет башлығы Ирек Ялалов был мәсьәлә буйынса фекерен түбәндәгесә белдерҙе:**

- Социаль көсөргәнешлек тыуҙырмаҫ өсөн, бистәләрҙе сиктәргә бүлеү һәм планлаштырыу проектын әҙерләгәндә үк ниндәйҙер социаль объекттың (поликлиника, балалар баҡсаһы, мәктәп) торлаҡ йорттарға терәлеп ултырыуына юл ҡуймауҙы күҙалларға кәрәк. Йәмәғәтселек фекере иҫәпкә алынырға тейеш һәм төҙөлөш эштәрендә формаль ҡараш булырға тейеш түгел.

Мин ҡала халҡының, бөгөн уҙғарылған йәмәғәт тыңлауҙары формаһы, йәкмәткеһе һ.б. буйынса камил түгел, тигән фекере менән килешәм. Теге йәки был объектты төҙөү, планлаштырыу проекты буйынса тыңлауҙар үткәрелгәндә яҡын-тирә йорттарҙан бер генә кешенең ҡатнашыуы дөрөҫ түгел. Тыңлауҙарҙы ҡала Советы уҙғара, был турала рәсми сайтта мәғлүмәт булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ әлегә һүлпән. Шуға күрә, шундай норма индерергә тейешбеҙ - әгәр йәмәғәт тыңлауҙары үткәрелә икән, яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙең ҡатнашыуы мотлаҡ.

Миҙалдың икенсе яғы ла бар: әлеге ваҡытта ҡалала 600 урында төҙөлөш бара. Күпселек майҙандарҙа эш башлау йәмәғәтселектә кире ҡараш тыуҙырҙы. Әммә уларҙы туҡтатыу ҙа мөмкин түгел, сөнки был балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә урындар етешмәүгә, инвесторҙарҙы, яңы эш урындарын, торлаҡ майҙандарҙы юғалтыуға килтерер ине. Ҡала үҫергә тейеш. Яуаплы кешеләрҙең һәм төҙөлөштә алып барыусыларҙың бурысы - халыҡ һаны миллион булған ҡаланың һәм төҙөлөш планлаштырылған айырым территорияла йәшәүселәрҙең ихтыяжы араһында баланс һаҡлау.

АФАРИН!

**Өфөләге Республика башҡорт лицей-интернатында футбол ярыштары уҙҙы. Унда республиканың төрлө ҡалаларынан, районларынан, шулай уҡ Ырымбур өлкәһенән 166 спортсы-уҡыусы ҡатнашты. Бәй, тышта буран уйнап торғанда, ниндәй футбол ти ул, тиһегеҙме? Һүҙебеҙгә аныҡлыҡ индерергә ашығабыҙ: ябай футбол түгел, ә роботтар футболы тураһында һүҙ бара бында. 7 февраль көндө РБЛИ-ҙа уҡыусы балалар араһында үҙҙәре эшләгән роботтарҙы көс һынаштырыу буйынса "Роболига-2016" Республика асыҡ фестивале үткәрелде. Балаларҙа роботтар төҙөүсе инженер һөнәренә, программалауға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған сараны БР Мәғариф министрлығы, Республика башҡорт лицей-интернаты һәм "Эврика" мәғлүмәт үҙәге ойошторҙо.**

# БЫЛ УҠЫУ ЙОРТОНДА...

## роботтар ҙа футбол уйнай

"Роболига-2016" маҡсаттарының тағы береһе - республиканың төрлө район-ҡалаларындағы робото-техниктарҙы бергә туплау икәнен беҙгә фестивалдең баш судьяһы, РБЛИ-ҙың информатика уҡытыусыһы Азамат Нур улы Йәркәев та белгертте. "Йәнә, был фестиваль уҡыусыларҙың төбәк һәм федераль кимәлдә үтәсәк конкурстарға әҙерләнеүе өсөн дә ҙур роль уйнаусы майҙансыҡ", - тине әңгәмәсебеҙ. Ул шулай уҡ фестивалдең гәмәли әһәмиәтен дә билдәләне. Роботтарҙы уҙаллы хәрәкәт иттерергә өйрәнгән балалар тәү сиратта программалар төҙөүҙең, ул программаларҙың ғөмүми нигеҙен, ҡалыбын үҙләштерә икән.



- Лицей уҡыусыларын 7-се синыфтан роботтар төҙөү менән таныштырабыҙ. Хатта улар был фәндә мотлаҡ уҡытылырға тейешле программа сифатында өйрәнә. Кем ҡыҙыҡһынып китә - артабан түңәрәктә шөғөлләнә, фестиваль-чемпионаттарҙа ҡатнаша. Был йәһәттән беҙҙә бар мөмкинлектәр ҙә булдырылған. "Лего" тип исемләнгән һүтепйыйып була торған брендлы уйынсыҡ нигеҙендәге өс тиҫтәгә яҡын ҡыйбатлы роботтарҙы теләгән сүрәткә әйләндереп ҡорорға, "мейе"һенә үҙең теләгән мәғлүмәт "ултыртырға" мөмкинлек бар. Дәрестә икешәр балаға бер робот тура килә. Беҙҙең уҡыусылар төҙөгән роботтарҙың күпселеге уҙаллы хәрәкәт итә, эш эшләй. Роботтар төҙөү фәне лә шуға ынтыла. Әммә шулай уҡ кеше ярҙамында хәрәкәткә килтерелә торған роботтарыбыҙ ҙа юҡ түгел. Шул уҡ "футболсы" роботтарыбыҙ әлегә кешегә буйһона. Ә бөтөн донъя фестивалдәрендә уҙаллы "футболсы" роботтар ҡатнаша. Уларҙы беҙҙең мәл кешеләргә ҡаршы уйнатып та ҡарамаҫтар тимә! Төрлө футуристик фильмдарҙа, мәҫәлән, "Терминатор"ҙа, 2017 йылда кешелекте яһалма аҡыллы машиналар баҫып алыуын һүрәтләйҙәр. Минән ҡайһы саҡта "Терминатор"ҙың саң ҡағыуына ҡолаҡ һалырғамы?" тип тә һорайҙар. Донъялағы роботтар төҙөү технологиялары менән ҡыҙыҡһынып барыусы булараҡ, шуны әйтә алам: әлегә кешелек кеше аңы менән дәғүәләшерҙәй яһалма аң барлыҡҡа килтереүҙән алыҫ. Ләкин япондар беренсе аңлы робот төҙөү өстөндә эш алып барыуҙары тураһында белдерә, тимәк, әлеге хәлдә бөтөнләй булмаҫ тип тә әйтеү ярамайҙыр, - тип һүҙен йомғаҡлай Азамат Йәркәев.

Ә беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, лицейсы-роботсылар - Нурсолтан Кәримов һәм Таһир Исмәғилев менән әңгәмәләшәбеҙ. Улар икеһе лә 7-се синыфта уҡый. Икеһе лә ятаҡта йәшәй. Таһир, Өфө егете булһа ла, ятаҡта йәшәп белем эстәй. Синыфташтары менән иркен аралашыу, лицей мөхитенә нығыраҡ ылығыу өсөн ошо аҙымды һайлаған - уҡыусы сағынан уҡ "студент" һурпаһы эсергә булған егетебеҙ. Нурсолтан - Хәйбулла районы Һамар ауылынан икән. Ул бөгөн үҙенең футболсы роботы менән фестивалдә көс һынашты. Нурсолтандың смартфон-телефон аша идара ителә торған роботы бәләкәй генә тупты ҡыуаланы. Был ярышта Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылынан килгән "Тимербатыр" командаһының алдына сығыусы булманы. Таһирҙың роботы иһә, лабиринтты үтеү ярышында ҡатнашты. Таныш булмаған мөхиткә килтереп ҡуйылған аҡыллы машиналар үҙҙәренең ультра-тауышлы "колаҡтары", ҡағылыуға яуап биреүсе "һәрмәүестәре" ярҙамында әлеге лабиринттан сығыу юлын эҙләне.

Әңгәмәселәрем Таһир менән Нурсолтанға үҙебеҙҙе борсоған төрлө һорауҙар бирҙек, уларҙан ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ яуаптар ишетә алдыҡ.

- Һеҙгә лицейҙа уҡыу оҡшаймы? Тамаҡ, йоҡо туямы, дөйөм ятаҡта тәртип нисек ҡуйылған? - тип һорауыма, иң беренсе Таһир яуап бирҙе:

- Оҡшамай ни, әлбиттә, оҡшай! Талаптар ҙа юғары, шул уҡ ваҡытта, уҡыуы мауыҡтырғыс та. Мин быға тиклем бай ҡаланың бер мәктәбендә белем алған кеше булараҡ, бындағы айырманың шаҡтай булыуын тәүге көндән үк күҙгә элдем. Уҡытыусылар ныҡ көслө, шөғөлләнәм тиһәң, теләһә ҡайһы түңәрәккә, өҫтәмә белем биреү дәрестәренә йөрөй алаһың...

- Эйе, бында уҡыусыларҙың буш ваҡыты юҡ тиерлек. График шул тиклем бай - беҙ дәрестән сығабыҙ ҙа, өҫтәмә дәрескә инеп ултырабыҙ, унан сыҡҡас, уҙаллы шөғөлләнеү ваҡыты етә. Нимәһе ҡыйын - йоҡо туймай. Ләкин был тиҙлеккә лә өйрәнеп барыла. Лицейҙа тәүәл фәндәргә етди иғтибар бирелгәне һиҙелеп тора. Беҙҙән бик шәп инженерҙар, программасылар әҙерләмәкселәр. Аҙнаның бер көнөндә физиканы инглиз телендә өйрәнәбеҙ. Беҙҙең лицей инглиз телен ныҡлап өйрәтеүгә лә махсуслашҡан бит, - тине Нурсолтан.

Егеттәргә тип әҙерләгән тағы бер һорауымды бирмәй булдыра алманым: -- Уҡып бөткәс, ниндәй һөнәр һайлаясаҡһығыҙ?

Таһир инженер булырға ла, роботтар эшләп, кешеләрҙең хеҙмәтен еңеләйтергә лә теләүен әйтте, ә Нурсолтан иһә:

- Йә табип-хирург, йә сәйәсмән булаcaҡмын! Хирург эшендә, инженерияларҙы ғына һымаҡ уҡ, яңылыш аҙымдарға урын ҡалырға тейеш түгел. Мине шул да ылыҡтыра. Үҙемде үтә тәүәл кешемен, тип әйтмәйем, әммә шуға ынтылып йәшәйем, - тине.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Роботтарҙы ауыҙлыҡлай алған уҡыусы егеттәр республикала йәҙҙән артыҡ икән дәбаһа, тип, ҡыуанып ҡайттыҡ әлеге осрашыуҙан. Күңелгә май булып ятҡан Таһир менән Нурсолтандың аҡыллы фекерҙәре киләсәккә булған өмөттө тағы ла яҡтыртыбыраҡ ебәрҙе. Ә инде киләсәгебеҙҙең роботтар, киң мәғлүмәт технологиялары менән тығыҙ бәйләнгән булыуы көн кеүек асыҡ. Бөгөнгө талап: Нурсолтан, Таһир, фестивалдә ҡатнашҡан башҡа уҡыусылар һымаҡ, үҙ инженерҙарыбыҙҙы, программасыларыбыҙҙы әҙерләп өлгөрөргә бурыслыбыҙ. Был бурыстың тос өлөшөн Республика башҡорт лицей-интернаты үҙ иңенә алған да инде.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓18 февралдә Башҡорт опера һәм балет театры өфөләрҙе танылған башҡорт композиторы Ләйлә Исмәғилеваның "Арҡайым" балетына саҡыра. Милли репертуарҙың сағыу әҫәре театр афишаһында даими урын биләй. Сюжеттың нигеҙендә изге Арҡайым тураһында философик хикәйә ята.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, 2015 йылдың ғинуарынан декабргә тиклем төбәктән ситкә күсеүселәрҙең һаны 56,9 мең кеше тәшкил иткән. 51 мең кеше элекке йәшәгән урынын республикаға алмаштырған. 100 мендән ашыуы иһә республика эсендә күсенгән. Һөҙөмтәлә төбәктә халыҡтың миграция иҫәбенә кәмеүе 5927 кеше тәшкил иткән. 2014 йылдағы ошо уҡ осор - 4441 кеше. Ошо йылдың 1 ғинуарына республика халҡының һаны яҡынса 4 071 181 кеше тәшкил иткән. Былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 806 кешегә кәмегән (0,2 процентҡа).

✓2016 йылда үтәсәк Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыуға арналған "Иҫәп алыу дөрөҫлөгө" викторинаһының беренсе турына йомғаҡ яһалды. 3 февралдән 23 мартҡа тиклем "Иҫәп алыу дөрөҫлөгө" викторинаһының икенсе этабы уҙғарыла. Һәр шаршамбы Мәскәү ваҡыты буйынса сәғәт 10-да Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу сайтындағы "Викторина" бүлегендә өс һорау баҫылаcаҡ. Улар шаршамбы һайын киске сәғәт 7-се 25 минутта "Рәсәй радиоһы"нда "Иҫәп алыу дөрөҫлөгө" программаһы эфирында ла яңғыраясаҡ.

✓"Өфө трикотажы" икенсе йыл рәттән "Мәктәп формаһы" бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яулай. Сараны Рәсәй Фән һәм мәғариф министрлығы ҡатнашлығында Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы ойошторҙо. Өфө компанияһы конкурс еңеүсеһе дипломы менән бүләкләнде, шулай уҡ быйыл март айында Мәскәүҙә мәктәп формаһын күрһәтеү мөмкинлеге бирелде. Компания махсус приз - билдәле селтәрҙең иң яҡшы 30 магазинында "Мәктәп йәрминкәләре"нә форма килтереүгә килешеү төҙөү мөмкинлеген алды.

✓Өфө мәктәптәрендә 1-4 класс уҡыусылары өсөн карантин 14 февралгә тиклем оҙайтылды. 15 февралдә уҡыу башлана, тип хәбәр иттеләр ҡала мәғариф идаралығында. Урта һәм өлкән класс уҡыусылары 11 февралдә уҡый башланы. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 1-11 класс уҡыусылары 29 ғинуарҙан пландан тыш каникулда.

✓ *Коммерция структураларынан кредит алыуҙың ауыр һөҙөмтәләргә килтереү ихтималлығы хаҡында дәүләт власы органдары халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға бурыслы.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АС ТОРҺАҢ ДА...

## бурысың булмаһын



**Рәсәй парламенты ашығыс рәүештә бурыстарҙы ҡайтарыу буйынса коллектор эшмәкәрлеген көйләүсе закон проектын ҡабул итергә йыйына. Был мәсьәләне Дәүләт Думаһының пленар ултырышында Иҡтисад сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Анатолий Аксаков күтәреп сыҡты. "Был мәсьәлә көн һайын көнүҙәк, хатта фажиғәле хәлдәргә сәбәпсе булып тора", - тине ул.**

Бынан алдараҡ Федерация Советы Рәйесе Валентина Матвиенко ла коллекторҙар тарафынан ошо өлкәлә йышайып киткән самаһыҙлыҡ факттарын ҡаты ғына тәнҡитләгәйне. Ул иһә тейешле закон ҡабул иткәнгә тиклем коллектор агентлыҡтары эшен тулыһынса туҡтатырға тәҡдим иткәйне. Бының менән беҙ граждандарҙы коллектор агентлығы исеме аҫтында эш итеүсе аңлайышһыҙ ойошмаларҙағы шикле кешеләр менән аралашыуҙан аралар инек", - тине Палата башлығы.

Коллектор агентлығы темаһы ошо арала Ульяновскиҙа булған ҡот осҡос хәл айҡанлы тағы ҡалҡып сыҡты. Унда коллектор бурысының өйөнә тәҙрә аша яндырғыс шыйыҡса ташлаған. Һөҙөмтәлә бурысы булған ир генә түгел, ошо ваҡыт тәҙрә янындағы караватта йоҡлап ятҡан ике йәшлек ир бала ла тәне янып, ҡазалана. 4 меңлек бурысы өсөн бына шундай язаға тарттырыла был кеше.

Икенсе бер ерҙә микрокредит буйынса 30 меңлек бурысы берәүҙең өйөнә өс бәһләүән егет килеп инеп, өйҙәгеләрҙе туҡмап, быларҙың кредитҡа алған техникаһын тартып алып сығып китә. Ә күпме кеше бурысын түләй алмайынса, үҙ-үҙенә ҡул һалырға мәжбүр! Ҡайҙалыр бер ҡасабамы, ауылдамы, 1 миллион бурысы эшҡыуар тәүҙә ҡатыны менән кескәй ҡыҙын атып үлтерә лә аҙаҡ үҙен ата. Бындай хәлдәргә аңлатма биреп, юрист Николай Чернышев: "Ысынында иһә, әлеге агентлыҡтар һәм фирмаларҙың финанс хеҙмәттәре өлкәһенә бер ниндәй ҡағылышы юҡ. Улар шәхси предприятие йә булмаһа ООО булараҡ та бер ерҙә лә теркәлмәгән, - ти. - Тимәк, улар "тыҙға яҙмаған" эштәр менән шөғөлләнә, ә был закон тарафынан язаға тарттырылырға тейеш, зыян күреүселәргә бары тик ярҙам һорап, полицияға мөрәжәғәт итергә кәрәк".

Әлеге ваҡытта ғәмәлдә булған "Кулланыу кредиты (займ) тураһында" 2014 йылдың 1 июленән ғәмәлдә булған законда ҡайтарылмаған бурыстарҙы ҡайтарыу буйынса саралаҙың нормалары хаҡында юлдар бар, ләкин ул банктар менән килешеү нигеҙендә эшләүсе коллекторҙарға ғына ҡағыла. Ә улар мөмкин тиклем закон нигеҙҙәрендә эш итергә тырыша. Микрокредит ойошмаларына яллаһып эшләүсе коллекторҙар өсөн бер ниндәй сикләүҙәр ҙә юҡ, шуға, күренеүенсә, улар бурысты ҡайтарыу өсөн кеше үлтерергә лә әҙер.

Парламентарийҙар фекеренсә, иң тәүҙә коллекторҙар хаҡындағы закон проектына кредит килешеүҙәре буйынса бурыстарҙы һатыу процесын көйләү (йәки уны бөтөнләйгә тыйыу) мәсьәләһен ҡарарға кәрәк. Был, тимәк, граждандарҙың бурысын ҡайтарыу эшен фәҡәт банк лицензияһы булған финанс ойошмаларына ғына тапшырыу кәрәклеген күҙҙә тота, сөнки коллекторҙар конторалары ның күпселегенең бындай лицензияһы юҡ. Икенсенән, закон проектында коллектор агентлыҡтарын аккредитациялау механизмдары күрһәтелергә тейеш. Өсөнсө шарт - бурыстарҙы талап итеү хоҡуҡтарын башҡа-рыуҙы икенсе кеше йә ойошмаға тапшырыуҙа заемсының ризалығы. Һүҙ заемсының шәхси мәғлүмәттәре хаҡында бара. Бындай мәғлүмәттәр менән фәҡәт профессиональ ойошмалар ғына эш итергә тейеш.

Кешенең финанс яҡтан грамотаһыҙ булыуынан файҙаланыуға ла юл ҡуйырға ярамай. Коммерция структураларынан кредит алыуҙың ауыр һөҙөмтәләргә килтереү ихтималлығы хаҡында дәүләт власы органдары халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға бурыслы. Банк һәм финанс ойошмалары үҙҙәре лә кредит алыусының уны ҡайтара алыу-алмау мөмкинлектәрен самалап эш итергә тейешле.

**Фәйрүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

АФАРИН!

# РӘХМӘТЛЕ БУЛА БЕЛӘБЕҘ!

**Белорет почтамтында былтырғы йыл һөҙөмтәләренә арналған йыйылыш булып уҙҙы. Унда ошо почтамтҡа ҡараған Әбйәлил, Бөрйән, Белорет райондары һәм Белорет, Межгорье ҡалаһының почта бүлексәһе начальниктары, хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты.**



Сара барышында гәзиткә күпләп яҙҙырған Белорет районының Бирҙеғол, Шығай, Үткәл ауылы почтальондары - Клара Килдина, Көнһылыу Йомағужина, Дилә Әбүталипова, Әбйәлил районының Целинный почта бүлексәһе почтальоны Илүзә Йыһаншина, шулай уҡ Әбйәлил районының Амангилде, Аскар, Байым, Ишкол, Бөрйән районының Иҫке Собханғол почта бүлексәләре һәм Белорет почтамты "Киске Өфө" гәзитенең бүләктәренә һәм Рәхмәт хаттарына лайыҡ булды.

АБАЙ БУЛ!

# ТӨТӨНГӘ ТОНСОҒОУ...

## үлемгә килтермәһен

**Янғынға ҡаршы һәм ҡотҡарыу хеҙмәттәренең халыҡ-ара ассоциацияһы мәғлүмәттәре буйынса, йыл һайын Рәсәйҙә 170 мең самаһы янғын сығып, уларҙа 12 мең тирәһе кешенең ғүмере өҙөлә. Статистика күрһәтеүенсә, кеше ғүмерҙәрен өҙгән янғындарҙың күпселеге киске йәки төнгө ваҡытҡа тура килә, йәғни кеше йоҡлаған саҡ була.**

Янғындың иң хәүефле факторы булып төтөн тора. Янғын осраҡтарын анализлағанда, кешеләрҙең әйберҙәрҙең йылыныуы йәки төтәүе һөҙөмтәһендә бүленеп сыҡҡан газдарҙан ағыуланыуы асыҡлана. Улар температура күтәрелеп, ялҡын таралғанға тиклем үҙенең ҡара эшен эшләп өлгөрә.

Бөгөн йорттарҙың эсен биҙәү йәки тышын көпләү өсөн полимер материалдар киң ҡулланыла. Улар янғанда ағыулы матдәләр бүлеп сығара һәм 20 секунд эсендә кеше иҫен юйып, 2-4 минутта үлергә лә мөмкин. Шуға күрә, янғынды төтөн сыға башлау менән иҫкәртеп, уны шунда уҡ һүндереү сараһын күрергә, уға таралырға юл ҡуймаҫҡа кәрәк.



Торлаҡ йорттарҙа һәм фатирҙарҙа хәүефте иҫкәртеү ҡоролмаһы булып янғын алдынан сыҡҡан төтөндә автоном иҫкәртеүсе (АДПИ) тора. Уны ҡуйыу норматив документтар талабы буйынса билдәләнә. Ҡоролманың ҡоролошо һәм эш принцибы бик ябай: АДПИ туҡланыу сығанағынан (батарея), төтөн детекторынан һәм тауыш сиренаһынан ғибәрәт. Бинала төтөн еҫе сығыу менән АДПИ ҡеүәтле сирена тауышы сығарып, йоҡлап ятыусыны ғына уятып ҡалмай, тирә-йүндәгеләрҙең дә иғтибарын йәлеп итә. Был ҡоролманы, белгескә мөрәжәғәт итмәйенсә, һәр кем үҙе лә ҡуя ала. АДПИ-ны һатып алғанда, конструкция, уның эш принцибы тураһында инструкция, техник ҡылыҡһырлама, ҡулланыу ҡағыҙәләре, урынлаштырыу һәм ҡулланыу буйынса күрһәтмәләр бирелә. Был ҡоролмаларҙы торлаҡ йорттарҙа йәки фатирҙарҙа, әгәр бүлмә майҙаны уның күҙәтеү майҙанынан ҙур булмаһа, бүлмә һайын берәрҙе ҡуйырға кәңәш ителә. Әммә уны аш-һыу, йыуыныу бүлмәһенә, бәҙрәфкә ҡуйырға кәңәш ителмәй. Бер АДПИ-ның хаҡы баш ҡаланың махсуслаштырылған магазиндарында 210 һумдан башлана. Йәғни, артыҡ сығымдар талап итмәй, уның ҡарауы, күңелең тыныс була. Әлбиттә, янғын сығыуын 100 процентҡа иҫкәртеү мөмкин түгел, шулай ҙа уны ваҡытында тойоп, эҙемтәләрен кәметеү мөмкин. Әйтеп китеүебеҙсә, сирена тауышы хатта йоҡлап ятҡандарҙы ла уятып, тиҙ арала ут сығанағын үҙаллы һүндерергә, яҡындарығыҙҙы ваҡытында эвакуацияларға ярҙам итәсәк.

**Ольга КОЛБИНА, Өфө ҡалаһы Ленин районы буйынса янғынға ҡаршы хеҙмәт инженеры.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындар сиренән

❖ 20 грамм ҡылысъяпраҡ (сабельник) тамыры йәки үләнен термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашаҙан 1 сәғәт алда сирек стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡылысъяпраҡ тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыу ҡайнап ултырған һауытта 15 минут тоторға, бүлмә температураһында һыуытырға, һөҙөргә. Төнәтмә ҡайнағанда кәмей, шуға ла ул баштағы күләмдә булһын өсөн ҡайнар һыу өҫтәргә. Көнөнә 3-5 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Цистит

❖ 15-әр грамм ҡырҡбыуын үләне (хвощ полевой), ҡаҙ үләне тамыры (корневища лапчатки гусиной), 20 грамм юл япрағы (подорожник) үләнен алып бергә ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм йоҡлар алдынан йылы көйөнә 1 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

❖ 1 стакан һолоға 1 литр һыу ҡойоп, ҡайнап ултырған һыулы һауытта ярты-һы ҡайнап бөткәнсе тоторға. Һөҙөргә, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

❖ 2 балғалаҡ меңъяпраҡ (тысячелистник) үләненә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда 50-шәр грамм эсергә.

❖ Киҫкен цистит ваҡытында: 1 өлөш ҡыҙыл көртмәле (брусника) үләненә 3 өлөш ҡыҙыл мышар емеше ҡушырға.1 ҡалаҡ үләнгә 200 мг ҡайнар һыу ҡойорға, 3-4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 100 мл төнәтмәгә 1 балғалаҡ бал ҡушып эсергә.

### Аҙ ҡанлылыҡтан

❖ 2 йомортҡа һарыһын бер стакан шәкәр менән яҡшылап болғатырға һәм 30 грамм ваҡланған шоколад өҫтәргә (шоколад составында мотлаҡ рәүештә какао күп булырға тейеш). Бер аҙ тотҡандан һуң ҡатнашманы икмәккә һөртөп ашарға һәм аҙағынан йылы һөт эсеп ҡуйырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Һайлаусылары уны үтә ябай, баҫалҡы, һәр саҡ ярҙамға әҙер торған шәхес итеп белә. Ә бына депутаттарының тәүәккәл, кәрәк саҡта тураһын ярып, үҙ фекерен яҡлай алған, үҙ һүҙле була белеүен күптәр күҙ алдына ла килтермәйҙәр.



## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КҮГӘРСЕН

**Күгәрсенде лә башҡорттар мифологик изге ҡош тип ҡабул итә. Ул кешенең яҙмышына ыңғай йоғонто яһай ала тигән ышаныуҙар бөгөн дә һаҡланған.**

"Күгәрсен - изге ҡош" тиҙәр башҡорттар. Әгәр ҙә өйләнмәгән ир-егеттең төшөнә күгәрсен инһә, ул мотлаҡ изге ҡыҙға өйләнәсәк.

Күгәрсенде изге ҡоштар рәтенә ҡуйыу Европа, Азия, Африка, Океания һәм Америка халыҡтарына ла хас күренеш. Күгәрсен ојлаған йорт - бәхетле йорт, тиҙәр. Болғарҙар бындай йортта тормош бер ҡасан да һүнмәйәсәк, быуындар араһында тере бәйләнеш һаҡланасаҡ, тип ышанған. Бәшнәктәрҙә күгәрсен Хоҙай ҡошо иҫәпләнә, ул ҡаҙан менән Мөхәммәт бәйғәмбәргә йыуыныу өсөн һыу ташыған. Муйынындағы ҡара һыҙат ҡаҙанға бәйләнгән бауҙан тороп ҡалған, имеш.

Пермь крайы Барҙа районында йәшәгән ғәйнә башҡорттары әйтеүенсә, мал эйәһе мәрхәмәтле булһын өсөн уға ҡорбан килтерергә йәки күгәрсенде ашатырға кәрәк. Тимәк, мал эйәһе күгәрсенгә әйләнә ала, тип ышанғандар. Түңгәүерҙәр фәрештәләр кешеләргә күгәрсен булып күренә, тиҙәр.

Төрлө халыҡтарҙың мифологияһында күгәрсен донъяны, ғаләмде булдырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт фольклорында Нух бәйғәмбәргә сикһеҙ һыу киңлегендә ҡоро ер табырға күгәрсен ярҙам итә. Свердловск өлкәһендә киң таралған "Туфан ҡалҡыу" мифында һүрәтләнеүенсә, туфан һыу бер аҙ ҡайта башлағас та, Нух ҡоро ер эҙләргә ҡушып күгәрсенде осороп ебәрә. Ҙур араларҙы осоп үтеп, кеше һәм йәнлектәр йәшәрлек ҡоро ер табып, күгәрсен суҡышында бер тамсы эсәр һыу, тырнаҡтарына бер ая батҡаҡ эләктереп кәмәгә әйләнеп килә. Бының өсөн ул Хоҙайҙың мәрхәмәтенә һәм рәхмәтенә өлгәшә.

Мифологик сюжеттарҙа күгәрсен кешеләр өсөн матди һәм рухи байлыҡтар табыусы мәҙәни герой булараҡ та һүрәтләнә. 1996 йылда Салауат районы Мөсәт ауылында йәшәгән мырҙаларҙан яҙып алынған "Нух бәйғәмбәр менән Алпамыша" әкиәтендә күгәрсен кәмәгә суҡышына бойҙай башағы ҡабып ҡайта. Бының өсөн Нух бәйғәмбәр уны изге ҡоштар рәтенә индерә һәм шулай тип өндәшә: "Һин, күгәрсен, гел кеше эргәһендә йәшә. Бойҙай һинең ризығың булһын".

Әлшәй районында йәшәгән яйыҡ-ҫыбы-мең һәм Пермь крайы Барҙа районы ғәйнә башҡорттары һөйләүе буйынса, борон заманда Хоҙай илселәре яуыз кешеләргә тап булған. Илселәр мәмерйәгә йәшеренгән. Шул мәлдә ике күгәрсен осоп килеп, мәмерйәнең ауыҙына оя ҡороп, йомортҡа һалған. Үрмәксе ау үргән. Дошмандар мәмерйә ауыҙына килгән дә, ундағы үрмәксе ауын һәм күгәрсен ояһын күреп, бында кеше юҡ, тип уйлап артабан киткән.

Хәйбулла районында йәшәүсе информатор А. Ҡунаҡасова әйтеүенсә, ҡайҙалыр, ҡасандыр ике фараон үҙ-ара дошманлашҡан. Яу мәлендә улар бер яҡтан даръя һәм икенсе яҡтан ҡая менән ҡаймаланған тығыҙ урынға барып сыға. Ҡаяла йомортҡа һалып ултырған күгәрсенде, ау үргән үрмәксене күргәс, улар аҡылға килә һәм дуҫлашалар.

Әзербайжан халҡында алатуба (урман күгәрсене) изгеләштерелә, ул Мөхәммәт бәйғәмбәргә яуыз кешеләрҙән ҡасырға ярҙам итә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

## ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Ҡышҡы эңерҙә алыҫ райондарҙың береһенән баш ҡалаға машинала бәүелә-бәүелә ҡайтып килеүебеҙ. 700 саҡрымдан ашыу юл үттек бит, арыттырған бер аҙ. Яланғасланып ҡалған урмандар араһынан күҙгә салынған ауылдарҙы, тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе күҙәтә-күҙәтә, һәр кем үҙ донъяһына сумған.**

# ДЕПУТАТТЫҢ ЭШЕНӘ...

## ҡыҫҡаса байҡау



*Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы Силәбе өлкәһе ағинәйҙәре менән.*

Бары район халҡы менән осрашыу тәьҫораттарынан арына алмаған Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы ғына һаман да эреле-ваҡлы мәсьәләләрҙе сисеү өҫтөндә.

- Фәриға апай, иҫәнмеһегеҙ? Һеҙҙе ветерандар госпиталенә һалыу хаҡында һөйләшкәйнек, хәтерегеҙҙәме?

- Олег Иванович, хәйерле көн! Медик-эксперт комиссияһын үтеү өсөн бөтә документтарығыҙҙы ла әҙерләп бөттөгөҙмө? Ҡаршылыҡтар юҡмы?

- Анжела, "Йәштәргә - сәләмәтлек" проектына арналған түңәрәк өҫтәлде оҙаҡҡа һуҙмай үткәрергә кәрәк. Вуз, поликлиника етәкселәре исеменә хат әҙерләй торoғоҙ. Иртәгә тәғәйенләнгән халыҡты ҡабул итеүгә нисә кеше яҙылды икән, ниндәй мәсьәләләр буйынса?

Ике сәғәттән ашыу Дәүләт Думаһы депутатының хеҙмәт лабораторияһы менән таныша-таныша, һәр телефон шылтырауының, һәр үтенестең "тарихын" төпсөнәбеҙ. Күпме кеше яҙмышы, һөйөнөс-көйөнөстәр үтә бер йөрәк аша! Нисек барыһының да исем-шәрифен хәтерҙә тотмаҡ, һорауҙарын ваҡытында хәл итеп, ҡәнәғәтләнерлек яуап бирмәк кәрәк?

- Хәҙерге технологиялар ярҙамға килә, - тип, Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы алдындағы ноутбукка ымланы. - Өйгә ҡайтып етмәҫтән, юлда уҡ күп кенә ойошторою мәсьәләләрен хәл итергә, ваҡытты тәләфләмәҫкә күнеккәнмен. Бөтә мәғлүмәт ошо кеҫкәй генә кеҫә телефонында инде...

Уның шулай өҙлөкһөҙ "эш өҫтөндә булыуы" өйҙәгеләрҙең һарыуын ҡайната торғандыр, моғайын. Хәйер, хәләл ефетенең ғүмер буйы яуаплы вазифаларҙа, көнө-төнө тигәндәй командировкаларҙа, йыйылыштарҙа "юғалып" тороуына ғәҙәтләнгән Хәсән Хәмзә улының йылдар буйына һыналған сабырлығын бындай "ваҡ-төйәктәр" генә һындыра алмайҙыр. "Бөгөн моңһоу ғына ҡапҡа төбөндә оҙатып ҡалғайны. Яманһыулағандай... Олоғайған һайын бер-берендең ҡәҙерен нығыраҡ белә башлайһың булһа кәрәк", - тип ҡуйҙы Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы тормош иптәше хаҡында һүҙ сыҡҡас. "Тыл"дың ныҡлығы ҡатын-ҡыҙ, айырыуса яуаплы вазифа йөкмәгән аҫыл зат өсөн икеләтә бәхеттер. Үҙенде ярты һүҙҙән аңлаған, икеләнгәндә кәңәш иткән кешең булыуы тау-таш аҡтарырға ла көс-ҡеүәт бирә торғандыр.

Һайлаусылары уны үтә ябай, баҫалҡы, һәр саҡ ярҙамға әҙер торған шәхес итеп белә. Ә бына депутаттарының тәүәккәл, кәрәк саҡта тураһын ярып, үҙ фекерен яҡлай алған, нығыш, ҡайһы саҡта хатта үҙ һүҙле була белеүен күптәр күҙ алдына ла килтермәйҙер. Кеше мәнфәғәтен яҡлар, республика тормошона сағыу бит өҫтәрлек етәксе, сәйәсмән булыр өсөн бындай сифаттар ҙа бик кәрәк. Ул сифаттар уға тап һайлаусылары ихтыяжын хәл итергә ярҙам итә лә инде. Ә депутатҡа ҡабул итеүгә яҙылыусылар исемлеге һәр ваҡытта ла һыу буйындай оҙон, ә ҡуҙғатылған мәсьәләләр үтә ҡырҡыу, йыш ҡына өҫтәмә тикшереүҙе, асыҡлау, төрлө кимәлдәге етәкселәр менән кәңәшләшеүҙе, фекер уртаҡлашыуҙы талап итә.

Дәүләт Думаһы комитетында "Рәсәй Федерацияһында балалар сәләмәтлеген һаҡлау тураһында" һәм "Рәсәй Федерацияһы халҡының репродуктив сәләмәтлеген һаҡлау тураһында" федераль закондар проекттарын эшләү буйынса ике эшсе төркөмдөң етәксеһе булыу, илдең танылған, күренекле белгестәре, ғалимдары, ректорҙары ингән абруйлы төркөмгә етәкселек итеү, һис һүҙһеҙ, сәйәсмән тормошона өр-яңы сағыу бит өҫтәне. Әлбиттә, бындай оло ышанысты яулау өсөн ҙур тырышлыҡ кәрәк. Медицина "аҡһаҡал"дары менән кәңәшләшеп эшләү оҙаҡ йылдарға етерлек оҫталыҡ тәжрибәһенән тыш, ҡыйыу уй һәм тәҡдимдәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн өр-яңы мөмкинлектәр "ҡапҡа"һы ла. Эйе, башҡорт ҡыҙының эшмәкәрлеге Дәүләт Думаһы кабинеты сиктәренән күптән сығып, Европа парламент форумына саҡлым барып етте. Ошондай мәртәбәле йыйындарҙа ҡатнашыу, уның башҡарма комитетына ағза булып инеү, Италия, Эфиопия, Швеция илдәрендәге конференцияларҙа ҡатнашыу һис тә уның иғтибарын тыуған республика мәнфәғәттәренән, һайлаусылар алдындағы бурыстарҙан ситкә йүнәлтмәй.

Көсөргәнешле осорҙа, ил, тел яҙмышы хәл ителгән мәлдә, халыҡ һәр саҡ үҙенең шәхестәренә, алдынғы ҡарашлы зыялыларына таянған. Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы ла халҡын үҙенең таянысынан яҙҙырмай. Депутат вазифаһында күп кешенең мәрхәмәтлек ярҙамына мохтаж булыуын күрә йөрөргә тура килә уға. "Мираҫ" фондын барлыҡҡа килтереүе лә тап ошоға бәйле. Ошо фонды ярҙамында ул бөгөн дәүләт тарафынан бағылмаған проекттар өҫтөндә лә әүҙем эшләй. Мәҫәлән, 2015 йылда Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хеҙмәткәрҙәре Румынияға барып, 19 ғына йәшендә Румыния ерендә вафат булған Советтар Союзы Геройы Хәсән Әхтәмовҡа арналған "Алмағас төҫө" фильмын төшөрөп ҡайтты. Юл хаҡын ҡаплауҙы "Мираҫ" тулыһынса үҙ өҫтөнә алды. Телевидение менән киләһе проекты - "Мин башҡорт телен өйрәнәм" тапшырыуы ла тамашасылар араһында киң популярлыҡ яуланы.

Һәм тағы. Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы 2012 йылда Урал аръяғы райондарында балалар һәм үҫмерҙәр араһында шашка спорт төрөн популярлаштырыу буйынса проект булдырыуға өлгәште. 3 йыл эсендә бик күп спорт саралары, "түңәрәк өҫтәлдәр" үткәрелде, байтаҡ райондарҙа шашка буйынса секциялар үҙ эшен башланы, методик ҡулланмалар баҫып сығарылды. Депутат шулай уҡ Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары төбәк-ара ассоциацияһы менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Башҡорт йәштәре өсөн даими рәүештә Дәүләт Думаһында экскурсиялар, илебеҙҙең билдәле шәхестәре менән осрашыуҙар үткәрә, баш ҡаланың тарихи-мәҙәни урындарына, театрҙарына йөрөүҙе ойоштора. Тағы бер маҡтауға лайыҡ эше: Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегендә лә әүҙем ҡатнаша.

Депутатҡа халыҡты нужа йөрөтә. Әммә ул да бит әкиәттәге тылсым эйәһе түгел, йылдар буйына хәл итеү өсөн ҡыл да ҡыбырлатылмаған мәсьәләләрҙең айышына төшөнөү, төйөндәрҙе сисеү өсөн ваҡыт кәрәк. Шулай ҙа һәр ҡағыҙҙәнең дә иҫкәрмәһе булғандай, ҡабул итеүҙәрҙә лә һөйөнөслө мәлдәр булып тора. Мәләүез районындағы осрашыуҙарҙың береһендә күҙҙең яуын алып торған гөлләмә тотоп килеп ингән ханымдың бер төркөм ата-әсәләр исеменән депутатҡа ул һәм ҡыҙҙарын Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе һәм башҡа ҡала вуздарына уҡырға урынлаштырыуҙа һәм профессиональ йүнәлеш биреүҙәге ярҙамы өсөн ихлас рәхмәт һүҙен еткергәне хәтерҙә. Ысынлап та, бына бер нисә йыл инде депутаттың юллауы буйынса республика абитуриенттары өсөн Мәскәү, Санкт-Петербург, Ырымбур, Пермь, Силәбе, Ижевскиҙың медицина вуздарына квоталар бирелә. Йәш белгестәрҙе эшкә урынлаштырыуҙа, фатир менән тәьмин итеүҙә ярҙам ҡулы һуҙыу, һис һүҙһеҙ, эҙһеҙ ҡалмаясаҡ. Маҡсатлы ҡабул итеү һөҙөмтәһендә үҙ яғына эшкә ҡайтҡан йәштәр бөгөн медицина ярҙамына зар-интизар булып йәшәгән ауыл халҡын күп мәшәҡәттәрҙән, юл йөрөү аҙаптарынан, сират көтөүҙәрҙән арындырыр, табип һөнәренең абруйын күтәрер, тип иҫәпләй депутат.

**Динә АРЫҪЛАНОВА.**

✓ *Яҙыусы Степан Злобиндың Салауат Юлаев образына ҡарата булған мөнәсәбәте, йөрәге аша үткәрелгән сикһеҙ һөкланыуы, режиссер Яков Протазановтың баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте был фильмдың уңышын тәьмин итә лә инде.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ҺАМАН ЯРАТЫП ҠАРАЙБЫҘ

## "Салауат Юлаев" фильмы төшөрөлөүҙең 75 йыллығына ҡарата

**СССР кинематографында 30-сы йылдарҙа төрлө тарихи, милли геройҙарға айырым иғтибар бүленә башлай һәм бер нисә фильм экранлаштырыла. 1941 йылда билдәле режиссер Яков Протазановтың Степан Злобин сценарийы буйынса төшөрөлгән "Салауат Юлаев" кинофильмы киң экрандарға сыға.**



Салауат Юлаев тураһында фильм төшөрөү идеяһы ла 30-сы йылдарҙа барлыҡҡа килә. 1937 йылда Башҡортостанда үткән партия Өлкә комитетының октябрь пленумындағы (тарихта уны "канлы пленум" тип йөрөтәләр, сөнки ошо саранан һуң бик күп башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәре ҡулға алына һәм юҡ ителә) сығышында Жданов: "Күптән түгел булған үткәндәрҙе халыҡ хәтеренән юйыу өсөн рус һәм башҡорт халҡын берләштергән милли герой табырға кәрәк, мәҫәлән, Салауат Юлаев", - тигән фекер әйтә. Башҡортостан Өлкә комитетының 1938 йылдың 10 июлендәге ултырышында: "БАССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары советының 1938 йылдың 3 майындағы "Салауат" тарихи драмаһын төшөрөү буйынса хөкүмәт комиссияһы булдырыу тураһындағы ҡарарын раҫларға", тиелә. Был комиссия составына Усманов, Бикбаев, Гужвенко, Ғәлимов Сәләм һәм Кузыев индерелә. Тарихи фильмды төшөрөү БАССР ойошторолоуҙың 20 йыллығын билдәләү осорона, йәғни 1939 йылға тамамланырға тейеш була.

Фильмдың сценарийын Степан Злобин ҡатыны Галина Спевак менән бергә яҙа. Сценарий тарихсы Әбүбәкер Усманов менән яҙыусы Баязит Бикбаевҡа уҡырға бирелә һәм улар 1939 йылдың сентябрендә үҙ фекерҙәрен яҙып тапшыра. Тап Ә. Усмановтың сценарийҙың ҡайһы бер өлөштәре менән риза булмауы "Салауат Юлаев" фильмын экранға сығарыуҙы 1941 йылға тиклем тотҡарлай ҙа инде. Салауаттың тәбәккә килгән заводсыларҙың йәберләүен татыған эшсе итеп күрһәтелеүе дөрөҫлөккә тап килмәй, тиҙәр Ә. Усманов менән Б. Бикбаев. Шулай уҡ Салауаттың ҡатыны Әминәне фильмда ирен ҡулға алыуға булышлыҡ итеүсе һатлыҡ йән итеп күрһәтеүгә лә ҡаршы фекерҙәрен белдерәләр. Башҡа геройҙарҙың образдарын да (Е. Пугачев, Юлай Аҙналин) ысынбарлыҡҡа тура килтереү кәрәклеген, башҡорт һүҙҙәрен мәғәнәле һәм урынлы ҡулланыуҙы талап иткән теләктәр ҙә әйтелә.

Фильмдың директоры М. Леонов Халыҡ Комиссарҙары советына һәм Өлкә комитетҡа 1940 йылдың 26 майында "записка" яҙа. Июль айының тәүге яртыһында төшөрөләсәк өлөштәргә күпләп халыҡ һәм аттар йәлеп итеүҙе ойоштороуға ярҙам һорай ул. Ике көн - 400, өс көн 250 һыбайлы кәрәк буласағын билдәләй. Уның был хатын иҫәпкә алып, Өлкә комитеттан һәм Халыҡ Комиссарҙары советынан Свердловск ҡалаһындағы төбәк хәрби советына телеграмма ебәрелә. Унда "Салауат фильмын төшөрөүгә Әлкәлә урынлашҡан хәрби частың ярҙамы талап ителә. Июль башында билдәләнгән көндәрҙә 500 һыбайлы һәм 500 йәйәүле кәрәк буласаҡ. Урындағы етәкселеккә күрһәтмә биреүегеҙҙе һорайбыҙ", - тип хәбәр ителә.

1940 йылдың йәйендә кинону төшөрә башлайҙар. Быға ҡағылышлы документтар Милли архивтың Өлкә комитеты фондында тышына "Докладные записки, обзоры, отчеты о состоянии политпросветработы в республике, переписка с Управлением кинофикации СНК БАССР" тип яҙылған 1940 йылғы папкала һаҡланған. Өлкә комитеттың пропаганда һәм агитация буйынса сәркәтибе Кузыев 7 июндә Маҡар (хәҙерге Ишембай) район комитеты сәркәтибе Әхмәтовҡа районға барасаҡ кино төшөрөүселәр бригадаһына ярҙам итеүҙе һорап, телеграмма һуға. Унда ул транспорт, аттар һәм йәшәү урыны менән тәьмин итергә күрһәтмә бирә, кәрәк булһа, ауыл халҡын йәлеп итеүҙе ойошторорға булышлыҡ күрһәтегеҙ, тип тә өҫтәй. Шулай итеп, тарихи кинофильмдың күмәк кеше ҡатнашҡан өлөштәрен Маҡар районында төшөрөргә ҡарар ителә.

Фильмдағы төп ролдәргә Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары Мөбәрәков, Минһажев, Зәбәйеров, Һыртланов һәм башҡалар алына. Шулай уҡ БашТАСС, Мәскәүҙән киноартистар Крючков, Болдуман, Блинников, Вахтангов исемендәге театр артистары Никитина һәм Федотова, Пыжова килеүе көтөлә, тип еткерә. Хәбәрнамәһен БашТАСС: "Салауат Юлаев" - тәүге башҡорт фильмы. Шуға күрә фильмды уңышлы төшөрөүгә булышлыҡ итеү бар республика халҡының намыҫында", - тип яҙа. Артабан, документтарҙан күренеүенсә, Башҡортостанда планлаштырылған эштәр тамамланып, фильм монтажлангас, актерҙар бер нисә айҙан Мәскәүгә барып, тауыштарын яҙҙыра.

1941 йылда экранға сыҡҡан фильм Башҡортостанда ғына түгел, ил кимәлендә ҙур уңышҡа өлгәшә. Салауат Юлаев ролен тап Арыҫлан Мөбәрәков башҡарыуы, яҙыусы Степан Злобиндың Салауат Юлаев образына ҡарата булған мөнәсәбәте, йөрәге аша үткәрелгән сикһеҙ һоҡланыуы (ул күп йылдар С. Юлаевтың тормошон, ижадын өйрәнә, башҡорт телен үҙләштерә), режиссер Яков Протазановтың баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте был фильмдың уңышын тәьмин итә лә инде.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

# МОРАҠ - ӨФӨ АРАҺЫ...

## йәйәү генә үтмәле

**Үткән быуаттың 30-сы йылдар уртаһында Күгәрсен районы етәкселеге тарафынан Мораҡтан Өфөгә велосипед һәм атлы спорт сәфәрҙәре ойошторола. Был саралар Армия сафына алыныу йәшенә яҡынлашҡан йәштәр тарафынан тормошҡа ашырыла.**



KYGƏRSEN—ƏFƏ

VELOSIPEDTAR MENƏN 330 KILOMETR

Kygərsen rajonьnьŋ texnikaqa eјə bulqan 9 doprizьvnigь Bajgildin iptəş komandahь aɁtьnda Kygərsendən 26 ijyndə 6 səqəttə velosiped menən sьqьp. hava loroso nasar, jamqьr ьь aldьnan doprizьvniktar arahьnda 32 nadan, 116 ad uqьjjaða belevse bulha, ular sьor vaqьtьnda naðanlьqtarьn həm ad belemlelektəren betərdələr. Doprizьvniktərdьn 50 protsentь Başqortostan kyləmendə berenselekte alьv esən kerəşələr. Ular вы пьştar menən genə qalmajьnsa, yððəre alqan belemde пьqьtьrqa həm kolxoz, sovxozdarða massovьj aqartьv,

1935 йылдың 26 июнендә иртәнге сәғәт 6-ла район үҙәгенән юлға сыҡҡан туғыҙ кешелек төркөм 330 километр араны үтеп, 29 июндә Өфөгә килеп етә. Хәҙерге "Башҡортостан" гәзитенең хәбәрсеһе М.Ғилманов насар һауа шарттарына, осраған төрлө ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, оҙон юл үтеп, маҡсаттарына өлгәшкән велосипедсылар менән Күгәрсен районында хәрби хеҙмәткә әҙерлек эштәре тураһында әңгәмәләшә һәм баҫтырып сығара.

Икенсе йылына иһә Күгәрсен районы йәштәре ошондай уҡ юлды һыбай үтә. Был спорт саралары хәрби хеҙмәткә алынырға тейешле егеттәрҙең һаулыҡ торошоноң шәпләген дәлилләү өсөн атҡарыла.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Беҙҙең менән килгән башҡорттар таң һарыһынан әсе тауыштар сығарып, ҡыҫҡырыша һәм таш туҡылдата башланы. Яныбыҙҙа бер генә башҡортто күрмәһәк тә, ошо ғәҙәти булмаған туҡылдау йоҡо аралаш беҙҙе бер ни тиклем ҡурҡыуға һалды: уларҙың ҡайһылары тау аҫтындағы йылға ярында, икенселәре тау буйлап һыбай сабышып йөрөп, үҙҙәренең вокаль һәм инструменталь музыкаһын дауам итте.

Әммә тиҙҙән беҙҙең ҡурҡыуыбыҙ көлкө һәм үҙенә күрә ләззәт табыу менән алышынды. Башҡорттарҙың шау-шыуына, ғәҙәттә, ҡая таштарҙа оя ҡорған ыласындар сәбәпсе булып сыҡты. Тәбиғәттәре буйынса йыртҡыс ҡоштарҙы тотоуға үтә әүәҫ булған башҡорттар һәр саҡта ла йәш ыласын балаларын ояларынан алып ҡайтып, өйҙәрендә бик тырышып тәрбиәләй: ә оло шау-шыу күтәреүҙәре ыласындар оя ҡорған урынды табыу өсөн башҡарыла; ошондай тауыш сығыуы уларҙы ҡурҡыта һәм ояларынан осоп китергә мәжбүр итә.

Беҙҙең ҡош тотоусыларыбыҙ иртүк өс ҡош ояһын тикшереп, оло ҡыуаныс менән уларҙан табыштарын алырға әҙерләнде. Был табыш уларға ҙур ауырлыҡ менән эләгә, сөнки ыласындар ояларын ҡаяларҙа ҡора, һәм ояға тиклем өҫтән утыҙ һәм унан да күберәк сажин аҫҡа төшөргә кәрәк була. Беҙҙең ыласын аулаусы эшмәкәрҙәр бөтә булған арҡандарын йыйып, бергә ҡушып бәйләгәс, уның осона тағып ҡуйылған таяҡ тап ыласын ояһы тапҡырына еткәнсе тауҙан түбәнгә төшөрҙө, ә арҡан буйлап төшөүсе башҡорт оянан ыласын балаларын алғас, уны тотолған ҡош балалары менән тау итәгенә тиклем төшөрөргә тура килде, ә был барлығы етмеш сажин самаһы булды. Ошо ҡыйыулыҡ талап иткән, әммә башҡорттоң күңеленә йәтеш эште атҡарғанда уларҙың аяҡ-ҡулдары һыныу осраҡтары һирәк түгел, ҡайһы саҡта осоп төшеп үлеүселәр ҙә була.

Ыласын тотоп ҡыуанған башҡорттар беҙҙе шул уҡ тауҙағы мәмерйәгә алып китте. Уның ауыҙы тау итәгенән ун ике сажин тирәһендә булып, уға тиклем ошонда яткан оло-оло таш ҡабандарға баҫып менеп була. Ул дүрт мөйөшлө фигура рәүешендә; бейеклеге - һигеҙ, киңлеге ун сажин самаһы, көньяҡ-көнсығыш яҡҡа ҡаршы урынлашҡан. Мәмерйәгә кергән урында дүрт мөйөшлө ҙур таш ҡабандар ята; ҡайһылары өҫтә аҫылынып тора, был мәмерйәгә инеп йөрөү өсөн хәүефле. Мәмерйә тишегенән уның ишек алды тип атап булырҙай өлөшө башлана. Уның киңлеге - алты, оҙонлоғо ун һигеҙ сажинлап булыр; үрге яғы тарлауыҡ менән тамамлана, икенсе осо күренмәй: ҡараманҡа бейеклеге егерме сажин тирәһе булыр. Уның осона табан ун яҡта аяғөҫтә торған кеше бейеклегендәге тәпәш палата бар. Уның формаһы төҙәк түгел, бар ерҙә лә тар ғына ярыҡтар күренә.

**(Дауамы бар).**

*✓ Һикһәненсе йылдар аҙағында Рәшит Шәкүр хаҡында: "Энә күҙәүенә ҡарап, сәғәттәр буйына телмәр һөйләй ала", - тигән һүҙ йөрөнө. Уның бындай һәләте киң эрудициялы, энциклопедик белемгә эйә булыуы хаҡында һөйләй.*



# ЙӨРӘГЕНДӘ ҠОЯШ

**Милләтебеҙҙең күренекле улы Рәшит Закир улы Шәкүревтың исем-дәрәжәләрен һанай башлаһаң, бик оҙонға һуҙылыр ине. Шуға күрә уларҙың ҡайһы берҙәрен әйтеп үтеү менән генә сикләнәйек: шағир, топонимика белгесе, Салауат Юлаев ордены кавалеры, филология фәндәре докторы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре... Яҙыусы Рәшит Солтангәрәев үҙенең бер мәҡәләһендә: "Рәшит Шәкүрҙең рәсми вазифаһы - "Башҡорт энциклопедияһы", - тигәйне. Эйе, күп һанлы әҙәби-мәҙәни-ғилми-энциклопедик китаптар сығарған Рәшит Шәкүрҙең рәсми булмаған, тик халыҡ телендә генә йөрөгән башҡа исемдәре лә бар. Улар, һәр хәлдә, исем үк булмаһа ла, айырым һүҙбәйләнештәр, хатта ниндәйҙер сетерекле һәм ҡыҙыҡлы ваҡиғаларға бәйле лаҡаптар рәүешендә лә йөрөй. Бына улары инде күптәргә таныш та түгелдер. Икенсенән, беҙ хөрмәтле замандашыбыҙҙың дөйөм күҙгә күренмәгән ана шул яҡтары аша шәхесенең тағы ла байтаҡ күркәм яҡтарын аса алабыҙ. Тик шул йүнәлештә уның хаҡында һүҙ алып барайыҡ. Уларҙы уҡыусы оло шәхес хаҡындағы дөйөм ҙур һүҙҙең айырым штрихтары итеп кенә ҡабул итһен. Бәйәнемдә Рәшит Шәкүр хаҡында "Ағиҙел" журналында төрлө йылдарҙа баҫылған мәҡәләләрҙән өҙөктәр файҙаландым.**

## Ул алдаша белмәй

1971 йылдың йәйге бер көнөндә Мәскәүҙә төрлө юғары уҡыу йорттарында, аспирантураларҙа уҡыған башҡорт йәштәре үҙҙәре белем алған башҡа йәштәр менән бергә илебеҙҙең баш ҡалаһынан алыҫ түгел урынына, Десна йылғаһы буйына ял итергә сыға. Йәштәр йылға буйында футбол һәм башҡа уйындар менән мәж килеп, төндә усаҡ янында күңел асып, иртәгеһенә тағы ла көнө буйына ял итеп, кискә генә ҡайтырға сыға. Уларға автобус туҡталышына тиклем урман аша 4-5 саҡрым ара үтергә тура килә. Йәштәр юлдың уртаһына еткәс, мажараға осрай. Баҡтиһәң, егеттәр менән бергә ҡайтып килгән ҡыҙҙар араһында иң сибәре булған Светлана самоволкаға сығып, бер аҙ төшөрөп алған ефрейтор һәм бер һалдат менән әңгәмә ҡороп ебәргән икән. Әңгәмәһе әңгәмә, кем менән кем һөйләшмәй, һалдаттар бер заман Светлананы һәм уның әхирәтен шарылдатып урман эсенә табан һөйрәкләй башламаһындармы.

Әрмелә сержант булып хеҙмәт итеүсе егеттәрҙең береһе ситуацияны аңлап, һалдаттарҙы бойороҡло тауышы менән урынына ҡуя һәм ҡыҙҙарҙы етәкләп, артабан автобусҡа табан атлайҙар. Әммә ҡулдарынан ҡыҙҙарҙы тартып алып киткәндән һуң "һемәйеп ҡалған" теге ике һалдат, башҡа хеҙмәттәштәрен эйәртеп, 20-25 һалдат студенттарҙы уратып ала. Шул саҡ егеттәр ҡойманан таҡталар һурып алып, һуғышырға әҙерләнә. Һалдаттар иң тәүҙә теге сержант егетте уратып алып, береһе һалдат ҡайышы менән һелтәнеп битен ҡаната. Артабанғы ваҡиғалар шулай дауам итә:

"... Шәкүр алпамыша кеүек ғәйрәтләнеп, йүгерекләп йөрөп, үҙенән бәләкәйерәк һалдаттарҙы йыға һуға ла, аратирә көслө тауышы менән: "На помощь! На помощь!"- тип һөрәнләй. Тәбәнәгерәк, әммә етеҙ кәүҙәле Рафаэль Ағишев, ҡулына күҫәк тотоп, яҡынлаған һалдаттарҙы төрткөләп-киҙәнеп ҡыуа. Рәфис тә, юғары бокс техникаһын ҡулланып, һөжүм итеүселәрҙе кире ҡағып йөрөй. Һуғышырға ынтылған, әммә күҙлеге осоп китеп, шуны эҙләп ваҡыт уҙғарҙан Фәүҡәт Ҡыҙрасов менән Миҙхәт Мәмбәтов ҡыҙҙарҙы бер урынға йыйнап, ҡарауыллап йөрөй. Урал Ураҡсин, дипломат булараҡ, һалдаттар менән һөйләшеп килешергә тырыша...

Битемдәге яраны һөртә-һөртә, ғәфү үтенеп, Светлана башын минең күкрәккә һалды ла, илап ебәрҙе. Автобустағы халыҡты ла, беҙҙе лә хайран ҡалдырып, Фәйзрахман Ярышев иҫ китмәле тауыш менән яңғыратып йырлап ебәрҙе... Рәшит Шәкүр уйсан тауыш менән миңә өндәште: "Хәлил, һиңә рәхмәт! Һин булмаһаң, хурлыҡҡа ҡала инек..." Форсаты булһа, ул миңә орден уҡ булмаһа ла, берәй миҙал биреп ҡуйыр ине. Ышанмаһағыҙ, Шәкүрҙең үҙенән һорағыҙ, ул алдаша белмәй..."

Иҡтисад фәндәре докторы, философия фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының философия институтында эшләүсе Хәлил Барлыбаевтың "Яҙмыш - һикәлтәле юл" ("Ағиҙел", 2013, 6-сы һан) тигән яҙмаларынан алынды был мажаралы ваҡиға. Ул саҡта, 1969-1972 йылдарҙа, Рәшит Шәкүр СССР Фәндәр Академияһында аспирантурала уҡый. "Алпамыша кеүек ғәйрәтләнеп" тәртипһеҙ һалдаттарҙы егеттәр ысулы менән тәртипкә ултыртып йөрөүсе Рәшит Шәкүрҙе күҙ алдына килтерһәң, рәхәтләнеп көлгө килә. Ә бит ул шунсама һалдаттар уратыуында уға ла, башҡа егет-ҡыҙҙарға ла көлкө булмағандыр. Бында тормошҡа гуманистик ҡарашлы Рәшит ағайҙың ярҙам һорап ҡысҡырыуын шулай ғына аңларға булалыр: ул был мәғәнәһеҙ ҡабырға һанашыуҙы тиҙерәк туҡтатырлыҡ көстәрҙе ярҙамға саҡырған.

Хәлил Әбүбәкер улы Рәшит Шәкүрҙе "алдаша белмәй" тигән. Әммә "алдаша белмәй" тигәнде логика буйынса "хәҡиҡәткә тоғро" тип әйтергә лә була бит әле. Ул сағында барыһы ла үҙ урынына ултыра. Йыйы сыҡҡанда Рәшит ағайҙан был хаҡта һорашҡас, ул шулайыраҡ яуап бирҙе: "Принципиаль, етди мәсьәләләр хаҡында һүҙ барғанда, алдашмайым, үҙемә һәм башҡаларға нисек кенә ҡыйын булһа ла, хәҡиҡәтте әйтергә тура килә. Ә мәрәкә һүҙ һөйләшеп көлөшкәндә, кеше күңелен уйлап, алдаштырғылап та ебәрәһең инде ул... "

## Энә күҙәүенә ҡарап...

Үткән быуаттың һикһәненсе йылдар аҙағында Рәшит Шәкүр хаҡында: "Энә күҙәүенә ҡарап, сәғәттәр буйына телмәр һөйләй ала", - тигән һүҙ йөрөнө. Уның бындай һәләте, иң беренсе нәүбәттә, киң эрудициялы, энциклопедик белемгә эйә булыуы хаҡында һөйләй. Беҙ ғалимдың һәм шағирҙың бындай ҡыҙыҡлы сығыштарын баш ҡалабыҙҙың Нефтселәр мәҙәниәт һарайындағы "Аҡ тирмә" клубында тыңлай торғайныҡ. Тап шул йылдарҙа (1989-1991) Рәшит Шәкүр "Урал" башҡорт халыҡ үҙәген етәкләне. Сығыштары оҙон-оҙаҡҡа һуҙылып китһә лә, тәрән йөкмәткеле, фәһемле, йөрәктәрҙе тетрәтерлек булды.

Икенсенән, Нефтселәр мәҙәниәт һарайы кеүек мендән ашыу кеше һыймалы залға йыйылып, башҡорттар XX быуаттың ҡайһы йылында һуңғы тапҡыр үҙ телендә аралаша алды икән? Тик үҙ телендә ҙур залға йыйылған халыҡ алдында әйтә торған һүҙҙәр күңелдәргә тулып ташҡайны, тамаҡ төптәренә һыҡығайны, күбеһе көйөк, юшҡын булып бәғерҙәргә ултырғайны, йөрәктәрҙе ярғайны. Тап шундай мәлдә, һикһәненсе йылдар аҙағында, туҡһанынсы йылдар башында, заман бик күп аҫыл заттарыбыҙ менән бер рәттән Рәшит Шәкүрҙе лә һайланы һәм халыҡ алдына, майҙанға сығарҙы. Әлбиттә, бындай "халыҡ йыйынына" хоҡуҡты беҙгә үҙгәрештәр заманы алып килде. Әммә ундай үҙгәрештәр ҙә бит юҡтан ғына бар булманы, әйтергә кәрәк, уларҙың тәүге яралғылары 60-сы йылдарҙа уҡ башланғайны. Нәҡ шул 60-сы йылдарҙа Рәшит Шәкүр Башҡорт дәүләт университетының "Шоңҡар" әҙәби түңәрәге етәксеһе булараҡ, башҡортса шиғыр кисәһе



### РӘШИТ АҒАЙ - ОПТИМИСТ

*Уның оптимизмы күп мәғлүмәткә эйә булыуҙан килә торғандыр. Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда шундай юлдар бар: "Мин үҙем, боронғоларҙы белгәнлектән, уңышһыҙлыҡҡа осраған сәғәттәрҙә һис бер ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем..." Быларҙан шундай һығымта яһарға мөмкиндер: халҡының үткәнен, уның тарихи ҡаһарманлығын яҡшы белгән кеше пессимист була алмай.*

✔ *Рәшит Шәкүрҙең Вәлидиҙәргә хас йылмайыуы ла тап шунан килә. Ул халыҡтың йөрәгендә ҡояш йөрөтөүсе оло бер шәхесе. Юҡҡа ғына уның 1970 йылда баҫылып сыҡҡан тәүге шиғырҙар китабы "Йөрәгемдә - ҡояш" тип аталмағандыр.*

# ЙӨРӨТӨҮСЕ

үткәреү өсөн деканат, ректорат алдында хоҡуҡ даулап йөрөүселәрҙең береһе була. Беҙ бында утыҙ йыл эсендә шәхестең үҫешеп етеү динамикаһын күрәбеҙ. Мин бында Рәшит Шәкүр "Шоңҡар" әҙәби ижад түңәрәгенә туған телебеҙҙә кисә үткәреү хоҡуғын яулаған, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәген ойоштороп, халыҡты йыйған, тип әйтмәйем. Ике осраҡта ла ул ойоштороусыларҙың береһе генә булған, әммә юлбашсы вазифаһын башҡарған.

Рәшит Шәкүрҙең "энә күҙәүенә ҡарап, сәғәттәр буйына телмәр һөйләй алыуы" юғарыла килтергән дәлилдәрҙән тыш, булмышындағы бер сифатына ла бәйлелер. Мәҫәлән, шул уҡ Рәшит Солтангәрәев, тик үҙенә хас кинәйәһе менән уны "һүҙмаҡайлау, ауыр ҡуҙғалыу" тип атаған: "...Ә һүҙмаҡайлау, ауыр ҡуҙғалыу тигәндән, бында дөрөҫлөк тә барҙыр. Берҙән, был булмыштан килһә, икенсенән, эшкә яуаплы, талапсан ҡарауҙандыр. Шәкүр һәр һүҙгә шул тиклем иғтибарлы, яуаплы ҡарай.

Беҙ, редакция хеҙмәткәрҙәре, уның был сифатына һоҡлана ла, унан өйрәнә лә, йән дә көйөп ҡуя торғайны. Ниҙер яҙғанда тейешле һүҙен табып урынына ҡуймайынса, ары китмәҫ. Әйтерһең, ошо һүҙ урынына ҡуйылмаһа, ерҙең әйләнеше туҡтай, аҫты-өҫкә килә. Шағир, ғалим шуны һеңдергән: ташҡа баҫылған һүҙ мәңгегә ҡала. Уны дәүерҙең теләһә ҡайһы ваҡытында эҙләп табып, шуны файҙаланып була икәнен аңлай ине. Был да тарих алдындағы яуаплылыҡтан килә..." ("Ағиҙел", "Дала рухы йәшәй ҡалала", 1997, 1-се һан).

"Энә күҙәүенә ҡарау" - ул үҙ эшенә, ул ниндәй генә эш булмаһын, тәфсирле, етди мөнәсәбәтте, айырыуса иғтибарҙы талап итә торған сифат. Ул, әлбиттә, нәҡ тел ғилеме, топонимика менән шөғөлләнгән кеше өсөн кәрәкле сифат. Шағир һәм ғалим Рәшит Шәкүрҙең энә күҙәүе аша үткәргән хеҙмәттәренең бер нисәһе:

- балалар һәм өлкәндәр өсөн тиҫтәләгән шиғыр, йыр китаптары;
- уның редакцияһында "Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия";
- ул алты томлыҡ "Башҡорт әҙәбиәте тарихы" авторҙарының береһе;
- уның туранан-тура ҡатнашлығында сығарылған республиканың топонимик һүҙлеге;
- бөйөк башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Аҡмулла тураһында монографиялары;
- тыуған яҡ тарихына, топонимияға бәйле күп һанлы публицистик китаптары, һүҙлектәре;
- милләтебеҙҙең арҙаҡлы шәхестәре, күренекле улдары хаҡында китаптар, сығыштар, мәҡәләләр һ.б.

## Ҡая кеүек торорға...

1812 йылғы Ватан һуғышы башланыуға 200 йыл тулыуға арналған байрам саралары Мәскәүҙә үтте. 2012 йылдың йәйендә беҙ, бер төркөм башҡорт яҙыусылары, илебеҙҙең баш ҡалаһына барып, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһында үткән сарала ҡатнаштыҡ. Переделкино ижад йортонда йәшәнек. Рәшит ағай Шәкүр менән мин бер бүлмәгә эләктек. Мин шунда үҙемә шундай һығымта яһаным: ысын мәғәнәһендәге интеллигент кеше йәмәғәтселек урынында ла, сәй эскәндә лә, йоҡларға ятҡан бүлмәһендә лә - бар урында ла интеллигент булып ҡала икән. Әлбиттә, Рәшит ағай кеүек намыҫлы кешегә үҙе хаҡындағы маҡтау һүҙҙәрен ишетеүе еңел түгел: әммә беҙ бер-беребеҙгә тере сағыбыҙҙа матур һүҙҙәребеҙҙе әйтеп ҡалырға тейешбеҙҙер. Ундай шәхестәребеҙҙең тере сағында ҡәҙерҙәрен белер өсөн...

Шул тиклем теүәл, ғәжәйеп бөхтә кеше Рәшит ағай. Ул үҙен уратып алған кешеләрҙе генә түгел, үҙ-үҙен дә, хатта йоҡлар йоҡоһон да ихтирам итә, көн һайын теүәл бер ваҡытта, сәғәтендә-минутында йоҡларға ята һәм йоҡлап та китә. Бер үк ваҡытта йоҡоһонан уяна. Бер бүлмәлә йоҡлаған өс көн һәм өс төн эсендә уның яғынан миңә ҡамасаулаған, уны һәм мине уңайһыҙ хәлдә тойорға мәжбүр иткән бер тауыш та, ишара ла, хатта ым да булманы.

Рәшит ағайҙың тағы бер һоҡланғыс сифаты: ул түҙеп торғоһоҙ ауыр хәлдәрҙә лә, ҡатмарлы ситуацияларҙа ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, башҡаларға ла ыңғай йоғонто яһарлыҡ ҡөҙрәткә эйә. Бер һүҙ менән әйткәндә - оптимист. Әлбиттә, оптимизмды мәғлүмәт етмәүгә тиңләгән логистар ҙа бар. Улар "ас тамағым, тыныс ҡолағым" тигән принцип буйынса йәшәй. Ә Рәшит ағайҙың оптимизмы, минеңсә, киреһенсә, күп мәғлүмәткә эйә булыуҙан килә торғандыр. Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда шундай юлдар бар: "Мин үҙем, боронғоларҙы белгәнлектән, уңышһыҙлыҡҡа осраған сәғәттәрҙә һис бер ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем..." Быларҙан шундай һығымта яһарға мөмкиндер: халҡының үткәнен, уның тарихи ҡаһарманлығын яҡшы белгән кеше пессимист була алмай.

Мәскәү янындағы экстремаль ситуацияла ҡаушап ҡалмаған Рәшит ағайҙың артабанғы тормошонда ла хатта йәш саҡтағынан да ауырыраҡ хәлдәрҙә тороп ҡалғаны хаҡында беләбеҙ. Шуныһы, һәр осраҡта ла уны хәҡиҡәткә һәм үҙ принциптарына тоғролоғо ҡотҡарып ҡалған. Рәшит Солтангәрәевтың юғарыла телгә алынған мәҡәләһенән тағы бер өҙөктө килтерәйек: "...Баҫылды мөһөрҙәре, иң элек Рәшит Шәкүргә баҫылды. Шуның арҡаһында уға байтаҡ ыҙалар сигергә, ун йылдан ашыу китабын сығара алмай йөрөргә тура килде. Хатта бер ваҡыт уның эше партия өлкә комитетының бюроһына тиклем барып етте. Бюроның ни икәнен өлкән быуын кешеләре яҡшы белә: йә күтәрәләр, йә бөтөрәләр. Бына Рәшит Шәкүрҙе лә килтереп баҫтыралар ошо бүлмәгә. Республиканың ул саҡтағы етәксеһе З. Нуриев егетте бөтөнләй бөтөрөргә түгел, ә ҡурҡытып, рухын баҫып ҡына ҡайтарырға уйлағандыр. Хаким ҡурҡыныс тауыш менән: "Ты что, Шакуров, анархист что ли?" - тип екерә. Йығыл да кит. Әммә егет йығылмай, тыныс һәм ҡаты итеп: "Нет, Зыя Нуриевич, я - коммунист", - тип яуаплай һәм хакимды бер аҙға телһеҙ ҡалдыра. "Әрепләшеп торорға нисек ҡурҡманың?" - тип һораныҡ беҙ аҙаҡ. "Ундай ваҡытта ҡая кеүек торорға кәрәк. Шунда ғына еңеп сығып була", - тине иптәшебеҙ..."

## Вәлидиҙәргә хас йылмайыу...

Рәшит Шәкүр үҙе хыялланған идеаль донъяның тарихта тороп ҡалыуы тураһында белдергәйне. Донъяның бөйөк аҡыл эйәһе Лев Толстой күргән Кәрәлек буйындағы Геродотлыҡ аңҡыған башҡорттарҙың йәшәгән заманы, шул заманда йәшәгән халыҡтың хөр рухы, тормошҡа һәм тәбиғәткә мөнәсәбәте - хыялланған донъяһы бына шулар. Лев Толстойҙың биографияһынан, бигерәк тә уның "Тәүбәгә килеү" ("Исповедь") тигән автобиографик яҙмаларынан күренеүенсә, йәш ваҡытында урыҫ армияһында хеҙмәт иткән, башҡа офицерҙар ни эшләһә, шуны эшләгән, хәмер һемергән, кешеләр үлтергән, ҡатын-ҡыҙҙы көсләгән әҙип ғүмеренең бер осоронда ҡылғандары өсөн выждан ғазабы кисерә, сиркәүҙән һәм барлыҡ яҙмаларынан баш тартып, хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыр сиккә барып еткәндә буласаҡ ҡайныһы уға башҡорттар араһына барырға кәңәш итә. Әйтергә кәрәк, тап башҡорттар араһында булғанда Толстой кире тормошҡа ҡайта, йәшәүенең мәғәнәһе, маҡсаты барлыҡҡа килә һәм дуҫы, шағир Фетҡа яҙған хатында "башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡыуы" хаҡында әйтә. Күп йәһәттән урыҫ әҙәбиәте, урыҫ ҡына ла түгел, донъя әҙәбиәте, Геродотлыҡ аңҡыған башҡорттарға ла бурыслы. Ни өсөн тигәндә, башҡорттар араһында булғандан һуң йәшәүенең икенсе бер мәғәнәһен ижадта тапҡан бөйөк аҡыл эйәһе Кәрәлек буйынан ҡайтҡас "Һуғыш һәм солох" романын яҙырға ултыра.

Ҡасандыр шундай донъяның барлығын белеүе, тойоуы Рәшит ағайҙы, хатта ауыр саҡтарында ла, йылмайып йәшәтәлер. Тарихи ваҡиғалар хаҡында һөйләгәндә һәр ваҡыт ғалим үткәндәребеҙгә ҡарата һоҡланыулы мөнәсәбәтен йәшерә алмай, хатта һыҙланыуға дусар итеүсе сәхифәләрҙе аҡтарғанда ла гуманист булып ҡала белә. Был, моғайын да, үҙ халҡындың йәшәү көсөн, рухи потенциалын тәрән белеүҙән, тойоуҙан киләлер. Әҙиптең тарихҡа, донъяға ҡарата һоҡланыулы мөнәсәбәте лә шул тойғоға бәйле.

Рәшит Шәкүрҙең Вәлидиҙәргә хас йылмайыуы ла тап шунан килә. Ул халыҡтың йөрәгендә ҡояш йөрөтөүсе оло бер шәхесе. Юҡҡа ғына Рәшит Шәкүрҙең 1970 йылда баҫылып сыҡҡан тәүге шиғырҙар китабы "Йөрәгемдә - ҡояш" тип аталмағандыр. Хәйер, был китап хаҡында халҡыбыҙ шағиры Рауил Бикбаевтан да шәберәк итеп әйтеп булмайҙыр: "Минеңсә, был исем китаптың йөкмәткеһенә лә, шағир Рәшит Шәкүрҙең тәбиғәтенә, уның рухи донъяһына ла бик тап килә. Ҡайһы берәүҙәр өсөн был хәл - йөрәгендә ҡояш яндырып йәшәү - йәшлек ашҡыныуы ғына булып ҡалырға ла мөмкин. Ләкин Рәшиткә "Йөрәгемдә - ҡояш" тигән кисереш ниндәйҙер яңғырауыҡ һүҙ йәки ваҡытлы тойғо ғына түгел, уның көндәге хәле, ижад менән талпынып йәшәүе" ("Ағиҙел", "Тормош ҡатламдарын аҡтарып" 1987 йыл, 1-се һан).

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

***Яҙыусы Йыһат Солтановтың Рәшит Шәкүрҙең 75 йәшлек юбилейы айҡанлы ҡотлауынан:*** *"...был уҙаман барса тирә-яғына, кешеләрҙең күңеленә сағыу шиғриәт нуры, мәғрифәт нуры, ғилем нуры сәсер өсөн килгәндәй.*

*Үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында уҡ студенттарҙың әҙәби "Шоңҡар" түңәрәгендә иле өсөн, теле өсөн фиҙаҡәрлек өлгөһө булып янды ул. Артабан "Совет Башҡортостаны" гәзитендә башҡортоноң донъяла тиңһеҙ оҙон көйҙәре тарихын балҡытып, һүнеп барған күңелдәрҙе дөрләтте.*

*Асмандағы бик алыҫтағы емелдәгән аҡ йондоҙобоҙ Аҡмулланы баҙырлатып арабыҙға ҡайтарҙы.*

*Тукһанынсы йылдар боларышында инәй - улын, атай ҡыҙын белмәгәндәй ҡыланғанда "Урал" башҡорт үҙәгенә аҡ ҡиблалы юл һыҙып, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының нур ҡайсылы кендек инәһе булды.*

*Милләтебеҙҙең шөңгәр рухи хазиналар сығанағын - "Башҡорт энциклопедияһы"н изге юлға юҫыҡлатып шәмдәлләне. Хаҡлыҡ яҡлап, ғәҙеллек һаҡлап оранлайһы һәр ваҡытта, һәр урында алтындай саф Рәшит Шәкүр һүҙе бизмән табағын балҡышлы баҫып төшә, яҡтылығы күңелдәргә тарала.*

*Янып-ярһып уҙған көйрәү тормош юлын берәгәй күҙаллаһаҡ, мин уны рухиәт ғәләменең ҡараңғыһын алмас аҡбур осо менән сытырҙатып сыйып барған уҡ-йондоҙға - кометаға оҡшатам.*

*Серле ғаләм төпкөлөндә туп-тура юл ярыусы уға аҙаш уҡ йондоҙ - Галлей кометаһы бар. Бәғзеләр унан ҡурҡа, ә күбәүҙәр уға һоҡланып ҡарай. Йыһандың был йор есеме тайпылышһыҙ осошоноң нәҡ 75 йыллығында Ер шарына ҡул һуҙым яҡынайып, бәндәләрҙең күҙҙәрен сағылдыртҡыс, хайран ҡалдырғыс атҡылар сәсеп балҡый. Ошо Галлей һымаҡ уҡ, Рәшит Шәкүр кометаһы ла туҡтауһыҙ-ғорур елә, ул да үҙенең тура юллы сәфәренең 75-легенә етте, йомарт нурҙарын һипте.*

*Уҙаман! Саялығың мәңгемәңге һүрелмәһен, юҫығың яңылышмаһын! Йәшәһен яҡтылыҡ! Былҡып барһын баҙырауыҡ уҡ-йондоҙ - Рәшит Шәкүр кометаһы!"*

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Былтыр йыл аҙағында "Республика Башкортостан" гәзите үткәргән "Йыл кешеһе" конкурсының йомғаҡлау сараһында ҡатнашҡанда "Киске Өфө"лә лә шундайыраҡ рубрика булдырыу уйы башыбыҙға килгәйне. Шул уйҙы ғәмәлгә ашырыу маҡсатында баҫмабыҙҙа "Заман башҡорто" тигән рубрика асып, милләтебеҙҙең күптәргә таныш аҫыл ул һәм ҡыҙҙары, уларҙың йәшәйеш һәм хеҙмәт өлгөһө тураһында тағы бер ҡат һөйләргә булдыҡ. Ә йыл аҙағында әйтелә торған йомғаҡлау һүҙе иһә, моғайын, осрашыу-кисә кеүек бер сараға әйләнер, тип уйланыла. "Заман башҡорто" рубрикаһын арҙаҡлы шәхесебеҙ Рәшит Шәкүр тураһында һөйләүҙән башлауыбыҙ аңлашылалыр: башҡорт донъяһындағы һынылыш - асылыбыҙға, туған телебеҙгә, рухи тамырҙарыбыҙға йөҙ бороу тап Рәшит ағайҙан, уның быуынындағы башҡа шәхестәрҙән башлана бит. Шәйләһәгеҙ, был фекер мәҡәләлә ҡыҙыл еп булып һуҙылып килә лә инде. Әйткәндәй, рубриканы Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай алып барасаҡ.**

**Гәзит уҡыусыларға шундай үтенес тә бар: "Заман башҡорто" тип, ошо рубрикала һөйләүгә кемдәр лайыҡ, тип уйлайһығыҙ? Хаттар һәм тәҡдимдәр көтәбеҙ.**

✓ ***Көтөлгән ваҡытҡа ҡайҙандыр ебәрелде тигән йөрәк килеп етмәне. Табип бик борсолған ҡиәфәттә "донорҙы һуңғы сиктә яраҡһыҙ тип тапҡандар" тип хәбәр итте. Үҙенең йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды шул мәл Сергейҙың.***






Бәпесен дә ятраҡайны бит ул. Яратҡайны. Ҡорһағында йөрөткәнендә "Мәңге ҡабул итә алмам, теге әҙәмдең балаһы" тип екһенеп уйланы, шул зарынан һыҙылып, хәсрәтләнеп йөрөнө. Ә инде йәнен ярып сыҡҡас, Богдан Радионовичтың тиҙерәк биләүләп алып килеп һалыуын көттө, нишләптер күргеһе килде. "Бер ҡарармында ҡуйырмын" тигәйне, алдан да табипҡа шуны аңғартып ҡуйғайны. Тик врач ҡулында тегеләй-былай әйләндерелгән сабыйҙың ялыныс илауын тыңлап ята торғас йәне һурылып сыҡҡандай булды. Түҙеме бөттө һәм "Бирә һалығыҙ" тип ынтылды. Яратты шул, ҡарап, һөйөп туя алманы. Тик ниңәлер был бәхете лә оҙаҡҡа барманы. Ниңә генә шулай булды һуң?! Уйламағанда! Көтмәгәндә! Һау кеүек ине лә. Бер ере лә ауыртҡан кеүек түгел ине. Мыжыманы, юҡҡа борсоманы әсәһен. Шул көн иртәнсәк санитар төшөп прививка яһап киткәйне, уныһы ла укол түгел, ә ауыҙына ике тамсы тамыҙыуҙан ғибәрәт ине. Унан туйғансы имеп алып йоҡоға талды ... һәм шунан уянманы ла ҡуйҙы. Әсә бәләкәсе ятҡан арала әллә күпме кер йыуҙы, иркенләп сәйләп алды, унан үҙе лә серем итте. Инде һаман да уянмаған сабыйын иркәләп кенә күтәреп алғайны, тегеһенең тынын һиҙмәне. Бер аҙ һелкеткәндәй итте. Унан ҡобараһы осоп сикәләрен тотҡоланы, унда ла ҡыбырламағас, ашығып төргәктәрен сисеп ташланы ла, аңына барып еткән ҡурҡыныстан аҡылын юйып тыпырсынып сарылдап ебәрҙе. Үҙәк төбөнән сыҡҡан ауазы ике ҡатлы бинаны ғына түгел, эргә-тирәләге урман-тауҙарҙы, хатта йыһанды ла иңрәткәндер. Кемдәрҙер инеп үҙен тотто, кемдәрҙер баланы алды... Ике көндән генә һушына килде ҡатын. Богдан Радионович сабыйҙың йөрәге насар булған, үҙ аллы оҙаҡ эшләй алмаған, тип аңлатты һуңынан күҙ йәштәренән даръя ағыҙған әсәгә. Шул мәлдәрендә янынан китмәне, уколдар ҡаҙап, йылы сәйҙәр эсереп, башынан һыйпап ҡына торҙо. Әллә ниндәй шифалы һүҙҙәр таба белде, һарғайып ҡына үлеп китергә бирмәне табип. Әле бынау Булат килеп шул кешене хаҡында нимәлер тип ышандырып маташа. Ни булған уға? Шундай юҡбар һөйләп иғтибарын йәлеп итергә уйлаймы? Улай тиһәң, аҡылһыҙ егеткә оҡшамаған да.

* * *

Өмөттәре аҡланманы Сергейҙың. Һуңғы сиккәсә ошо ҡараңғылыҡта ҡапыл ғына күк көмбәҙе асылып китер ҙә, яҡты өмөт саҡҡыһы юлын яҡтыртып ебәрер тип көткәйне. Тик улай булманы. Табиптар "донорһыҙ күп булһа ике ай" тип, һуңғы ярты йылда донъяларын ялмап алған ҡараңғылыҡты бөтөнләй бушлыҡҡа әйләндерҙе. "Нисек?! Нисек ике ай?!" тип кардиохирургия бүлеге мөдиренең яғаһынан алһа ла, хәлдең сараһыҙлығын бөтөн күҙәнәктәре менән тоя һәм ошо хаяһыҙлыҡтан да ярһый ине ул. Был мәл бөтөн тормошо, донъялағы барлығы һәм донъяһы үҙе лә бер ни хаҡһыҙ булып ҡалды. Әрнеүе үҙәгенә үтеп ҡарғаны был аллаһыҙ бушлыҡты. Булһа ул алла ишетергә тейеш ине бит, шул ҡәҙәр ялынып-ялбарыуҙарын да ишетмәгәс... юҡтыр...

Көтөлмәгәйне бәлә. Аңғармаҫтан, аҫтыртын килде. Килде лә йығаһынан, тәгәрәтәһенән һуҡты. Күҙ алмаһылай булған, иркәләп-һөйөп кенә үҫтереп килгән дүрт йәшлек ҡыҙҙарына бер көн килеп башҡа һыймаҫлыҡ диагноз ҡуйҙылар: йөрәк. Имеш шул кескәй генә бала йөрәгенең ике клапаны эшлектән сыҡҡан. Имеш ҡалған икәүһе лә ауырлыҡ менән генә лерпелдәп тора. Ышанманы быға Сергей. Район табибының ғына хәбәрен эшкә һанаманы. Ул бит әле ул-былға алданып барыр ауыл ҡарты түгел, ә район эске эштәр бүлегенең баш тәфтишсеһе, кәм тигәндә лә аңлы, белемле кеше. Ҡатынын да юҡҡа паника ҡуптарма тип кенә тыйҙы ла, шул көндө үк ҡыҙын өлкә клиникаһына алып китте. Шундай ышандырғайны бит ул Любаһын, "беҙҙәге наҙандар нимә белә" тип кенә ебәргәйне. Аҙаҡ аҡланыр ҙа, йыуатыр ҙа һүҙ тапманы.

Ғаилә бөтә көсөн шул сиргә ҡаршы көрәшкә һалды. Любаһы эшен ташлап һәр минутын балаһына бағышланы. Сергей дауалау этаптарын үтеүгә машина яңыртам тип йыйғандарын да, машинаһының үҙен дә тотондо. Унан ҡала хәйриә ойошмалары ярҙамдарын тапты, танышлыҡтарын, мөмкинлектәрен файҙаланып төрлө табиптарға, клиникаларға сыҡты. Дауаланыу курстары өлкәлә лә, баш ҡалала ла үтелде, тик ыңғай һөҙөмтәләр генә булманы. Сырайында ауырыуҙың төҫө лә булмаған, уйнап-көлөп йөрөгән сабыйҙарына ҡарап эстән янып ҡарайҙы ата-әсә. Любаһы йәшереп илап, Сергей төн йоҡоларынан яҙып ҡартайҙы һуңғы бер нисә айҙа. Дауаланыу һөҙөмтә бирмәҫен аңлағас, операцияға яҙылып донор көтә башланылар. "Срочниктар" теҙмәһенә индерҙеләр ярай ҙа, әйтелгән хаҡтан сикәләрендәге ҡан тамырҙары шартларҙай булып бүртеп сыҡһа ла, Сергей тешен ҡыҫып ҡағыҙҙарға имзаһын һалды. Сауҙалашып торор саҡмы ла, балаң ғүмерен аҡса менән үлсәп буламы?! Унан ҡайтып һис икеләнеүһеҙ фатирыҙарын һатыуға ҡуйҙы ла, иң кәрәкле генә әйберҙәрен алып әсәһенә күсте. Ҡыҙы менән ҡатыны клиникала йәшәй тигәндәй.

Бер-ике ай эсендә донор мәсьәләһе хәл ителергә тейеш тинеләр. Хәҙер инде Сергей һәр иртәһен табипҡа шылтыратып хәл белешеүҙән башлай ҙа, икеөс көн араһында уның ишек төбөн тапай. Бик аңлай уны табип. Шылтыратыуҙарына ипле генә яуап бирә, ҡул биреп күрешеп ҡаршы ала, яурынынан ҡағып, йөҙөнә төбәлеп һөйләшә, тынысландыра, өмөтләндерә. Һауа етмәй һуҡлыҡҡанда тәрән итеп тын алып ебәргәндәй була уның менән осрашҡанда Сергей. Хирургтың хәстәрлегенән күңеле тулып китә, хатта сабырлығы һынып һыңҡылдап илап та ебәрҙе бер. Уның алдында оят түгел кеүек. Ул бит аңлай, ул белә.

Фатир һатылып, аҡсаһы ҡулға алынғас, инде донор табылып, операцияға әҙерләнгән арала ғына нимәлер яҙлыҡты, нимәлер яңылыш китте был ҡыл шикелле генә итеп һуҙылып тарттырылған юлда. Көтөлгән ваҡытҡа ҡайҙандыр ебәрелде тигән йөрәк килеп етмәне. Табип бик борсолған ҡиәфәттә "донорҙы һуңғы сиктә яраҡһыҙ тип тапҡандар" тип хәбәр итте. Үҙенең йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды шул мәл Сергейҙың. Йә ысынлап өҙөлөп кенә төшмәне. Исмаһам, ҡатынына быйндайҙы еткермәҫ ине. Икәүләшеп аптырау сигендә ултырып ҡалдылар. Был тиклем дә ярҙамһыҙ һәм сараһыҙ итеп тойғаны юҡ ине үҙен ир кеше. Әле килеп балаһын, ҡатынын түгел, үҙен дә яҡлар хәлһеҙ булып һуҙылып төштө лә ятты. Түңкәрелеп кенә китһә икән ошо мәлдә бөтөн донъяһы. Юҡ шул, донъяһы ла шул уҡ, бәләһе лә. Барыһына ҡул һелтәп үлеп кенә лә булмай. Үлә алмай шул ул, балаһын бындай хәлдә ҡалдырып китә алмай. Аҡсаларын йомарлап сумкаһына тултырып алды ла донорҙы үҙе эҙләп сығып китте Сергей. Бөтөн булған клиникаларға ярҙам һорап мөрәжәғәт итте, сил өлкә, сит ил дауаханаларына ла, шәхси ойошмаларға ла мәғлүмәттәр ебәрҙе. Күптәренә үҙе барып инде, табиптарҙы күреп һөйләште, ниндәй хаҡҡа ла ризалығын белдерҙе. Асырғанып ярҙам һораны барыһынан да, үтенде, инәлде, ысҡынып китеп ҡысҡырҙы, талап итте. Шулай ҡаңғыра торғас, бер клиниканан баланы алып килергә мөмкин тигән йыуаныслы саҡырыу алғайнылар ... өлгөрмәй генә ҡалдылар. Иртәгә юлға сығабыҙ тигән төндә ҡыҙҙары йоҡоһонда йән биреп ҡуйҙы. Шул ҡәҙәр шаңҡыны ата менән әсә, Любаһы үҙе шунда иҫен юйып йығылһа, Сергей ҡапыл эсе бушап, барына ла битараф булғандай торошҡа инде лә ҡуйҙы. Шул халәтендә балаһын нисек ерләгәндәрен дә хәтерләп етә алмай. Иланы микән, кемдәр килде-китте - белмәй ҙә хатта. Бер аҙ иҫенә килеп, уйлау һәләте ҡайтҡас, аңында барыһын да баштан алып әйләндерҙе лә үҙ-үҙен ғәфү итә алманы. Алданыраҡ ниндәйҙер юлдар тапмағанына, ҡыҙыуыраҡ тотонмағанына, сирҙе лә иртәрәк асыҡлай алмағанына ғәйепле тойҙо үҙен. Ул бит атай кеше, ул белергә, аңларға, балаһын һаҡлап ҡалыу өсөн йән аямай айҡашырға тейеш булған. Берҙән-бере, ҡыҙсығы уны ғәфү итмәҫ. Һаҡлай алмағаны өсөн атаһын кисермәҫ. Ошондай уйҙарҙан сәсе ағарҙы ирҙең. Күпмелер ваҡыттан эшкә сыҡҡан майорҙы хеҙмәттәштәре танымай торҙо. Төп-төҙ баҫып йөрөгән ғорур ҡарашлы, имәндәй хәрби урынына яурындары төшкән сал башлы ҡарт килеп ингәндәй булды. Ҡайғы бөккәйне, бөтөргәйне ирҙе.

Бер нисә ай үткәс, һаман да шул хәсрәттәре солғанышында йөрөгән Сергей ниндәйҙер йыуатыу һүҙҙәре эҙләпме, әллә шул аптыранған көндәнме, теге клиниканың номерын йыйҙы. Телефонды ул белгән хирург түгел, ә башҡа кеше алды.

- Богдан Радионовичты ишетергә теләгәйнем, - тине ул яҡын кешеһен һорағандай итеп.

- Һеҙ кем?

- Был Сергей Колесников ине, мин һеҙҙә донор көткәйнем... ҡыҙыма... Диана Колесниковаға.

- Эйе-эйе, списокта бар инегеҙ, хәтерләйем. Шунан, хәлдәрегеҙ нисек?

- Нисек тип... шул инде.

- Ҡайҙа үтте операция, кем яһаны?

- Һеҙ белмәйһегеҙҙер инде... операция булманы бит, донор килмәне... Ҡыҙымдың булмағанына дүртенсе ай.

Теге яҡтағы бер килке тынып торҙо.

- Нисек килмәне?..

- Әллә инде... килмәне, - Сергейға кем менәндер был хаҡта һөйләшеү еңеллек биргәндәй булды.

- Туҡтағыҙ, трубканы һалмай тороғоҙ, мин хәҙер үк база мәғлүмәттәрен асып ҡарайым. Тәәк, тә-әк, бына... "срочниктар" теҙмәһе... Колесникова... Колесникова Диана Сергеевна, дүрт йәш тә өс ай тиелгән, шулаймы?

Сергейҙың йәне һыҙылып китте. Күптән ҡыҙының исемен улай ҡысҡырып әйткәндәре юҡ.

- Эй-йе...

- Беҙҙәге мәғлүмәттәр буйынса һеҙ заказды алғанһығыҙ.

- ...

- Алло! Ишетәһегеҙме?

- Һеҙ кем ул, ниндәй врач?

- Фамилиям Савичев.

- Мин хәҙер һеҙгә киләм!

- Һуң инде, индермәҫтәр. Иртәнсәк килегеҙ, уға тиклем мин Богдан Радионовичтан барыһын да асыҡлап ҡуйырмын.

Саҡ таң аттырҙы Сергей. Любаһы ла булмағас, ауыҙ асып һүҙ һөйләшер кешеһе юҡ. Ҡыҙҙарын юғалтҡас, ҡатынының был ҡалала ҡалғыһы килмәне, тыуған яғына ҡайтырға булды. Ҡаршы төшмәне уға Сергей, әүрәтер, йыуатыр әмәл тапманы. Яратышып өйләнешкән инеләр, балалары араларындағы бар йылы тойғоларҙы ла үҙе менән ҡуша алып киткәндәй булып ҡалды. Уртаҡ хистәре лә ҡалмағандай. Ҡатыны китте, ире тотманы.

Сиратта тороусыларҙы күрмәҫтән хирургтың кабинет ишеген ҡайыра тартып асып килеп инде ул. Табип ҡаршыһында ултырған ауырыу тертләп китте. Тик ул ризаһыҙлығын белдерергә ауыҙын асып өлгөрмәне, Сергей врачтың алдына ла килеп баҫты.

- Богдан Радионович, аңлатығыҙ!

Табип тынып ҡалды. Ҡаршыһындағы клиентынан кеселекле ғәфү үтенде лә, Сергейға ултырыға иҙәп урын күрһәтте.

- Беренсенән, һаумыһығыҙ. Хәтерем яңылышмаһа Колесников бит әле?

- Эйе, Богдан Радионович, мин кисә Савичев фамилиялы врач менән һөйләшкәйнем, саҡыртығыҙ әле уны.

- Һеҙҙең теләкте үтәй алмайым шул, үкенескә ҡаршы, ундай табип беҙҙә эшләмәй.

- Эшләмәй? Һуң мин...

- Ул кисә эштән бушатыуҙы һорап ғариза ҡалдырған, мин ҡул ҡуйҙым, юҡ ул бында.

- Кисә?.. Кисә киске унда мин уға шылтыраттым бит һуң.

- Теләһәгеҙ, ғаризаһын күрһәтә алам, кисә көндөҙгө икеләдокументтарын алып киткән. Һорауығыҙ шул ғына инеме?!

- Һорауым... Ул миңә, беҙгә тейешле донор булған тигәйне, - Сергей әйтергә теләгәнен нисек аңлатырға белмәне, буталды.

- Ҡәҙерлем, тәжрибәһеҙ йәш табиптың һеҙгә нимәләр һөйләп башығыҙҙы бутағанын белмәйем, әммә тағы ла бер тапҡыр ҡабатлайым: һеҙҙең өсөн хәлебеҙҙән килгәндең барыһын да эшләнек. Аңлайым, бындай ваҡытта күп нәмәләр шулай буталырға, онотолорға мөмкин. Теләһәгеҙ дауаланыу курсы яҙып бирәм.

**(Дауамы бар).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# БАРЫҺЫ ЛА ДӨРӨҪ ЮҪЫҠТА БАРА

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ижади миҙгелен Мөҙәрис Багаевтың "Аҡса булһа бер муҡса" комедияһы менән асты. Йәмғиәттәге, кешеләр тормошондағы күп етди бороолоштар, бәхеттәр һәм бәхетһеҙлектәр сәбәпсеһе булған аҡса темаһы ниндәй заманда ла актуаллеген юғалтмайҙыр, моғайын. Әлеге комедияла ла шул уҡ тема яҡтыртыла. Байлыҡ менән намыҫ бизмәндең ике яғында ятҡанда ҡайһыныһы ауырыраҡ тарта икән? Ошо һәм башҡа мөһим төшөнсәләр хаҡында Мөҙәрис БАГАЕВтың үҙе менән һөйләштек.**



Мөҙәрис Багаев (һулдан икенсе) артистар менән.

**➔ Бөгөн сәхнәлә көлкө күп, шулай бит? Эстрадала ла, пьесаларҙа ла, телетапшырыуҙарҙа ла юмор ҙур урын биләй. Һеҙҙенсә, был нимәнән килә?**

- Әлеге көндә республикабыҙ театрҙары сәхнәләрендә тиҫтәгә яҡын әҫәрем ҡуйылып килә. Уларҙың барыһы ла комедия түгел, әлбиттә. Әйткәндә, минә был өлкәлә эшләү бик оҡшай һәм языумдың сәбәбе лә - кешеләрҙең күңелен күтәреү. Тормош бит ул былай ҙа енел түгел, кәйефте ҡыра торған мәлдәр етерлек, шунлыҡтан, тамашасы театрға килеп, рәхәтләнеп көлөп, бер аҙ ғына булһа ла мәшәҡәттәренән онотолоп ултырып ҡайтһын, тип уйлайым.

Сәхнәлә юмор электән бар. Тик бығаса улар билдәле классиктарҙыҡы ғына булһа, бөгөн урындарҙа, заман авторҙары барлыҡҡа килде. Был, минеңсә, йәмғиәттең күп нәмәгә юмор аша ҡарарға өйрәнеүенән, сатираны ҡабул итә белә башлауынан, көлкө аша тәңкитләргә һәм тәрбиәләргә мөмкин икәнен аңлауҙан килә. Беҙ бит комедия ҡарағанда көлөп кенә ултырмайбыҙ, э сәхнәләге күренештәр аша үҙебеҙҙең етешһеҙлектәрҙе лә таныйбыҙ һәм ниндәйҙер кимәлдә ғәйеп тә тоябыҙ. Был бит үҙенә күрә бер тәрбиә, неско фәлсәфә.

Үрҙә телгә алынған комедия хаҡында һөйләшкәндә, унда бит аҡса темаһы ғына яҡтыртылмай. Эйе, аҡса темаһы үҙәктә, әммә уның менән ҡуша үрелеп барған башҡа темалар ҙа етерлек. Мәҫәлән, мөхәббәт кенә лә әллә нисә төрҙә. Унда был тойғоноң ғазаплыһы ла, еңелелпеһе лә, һатлыһы ла, сафы ла, бер ҡатлыһы ла, тоғролоҡҡа ҡорolganы ла урын тапҡан. Беҙ ундағы яҙмыштарға ҡарап, көлөп кенә ултырмайбыҙ, бер үк ваҡытта уларҙың әллә ни тәр кисерештәр аша бирелгән әске донъяларын да уҡып барабыҙ. Йәғни, комедияның бик шәп бер өҫтөнлөгө - ул бер генә йүнәлештә бармай, ул бөтә яҡтарҙы ла бер юлы сағылдырып килә ала.

Комедияның уңышлы булыуының тағы ла бер факторы - артистар оҫталығы. Әҫәрҙе ижад иткәндә бер көлөп алған булһам, уйнауsыларҙы ҡараған һайын тәүге күргән кеүек көләм. Комедия жанрын уйнау буйынса беҙҙең театрҙар артистарына еткәндәр юҡтыр. Ә Милли йәштәр театры артистарының һәләте, режиссер Азат Йыһаншиндың уларҙың талантын тағы ла сағыуыраҡ итеп яҡтыртып ебәреүе тураһында әйтеп тә тораһы түгел!

**➔ Һеҙ әҙәбиәткә һуңлап килгән ижадсы. Күп кенә жанрҙарҙа көс һынап ҡарағанһығыҙ. Бөгөн, үҙ ыҙанымды таптым, сәхнә әҫәрҙәрендә туҡталам, тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Мин һөнәрем буйынса ауыл хужалығы белгесе, асылда, әҙәбиәткә бер ҡатнашлығым да юҡ кеүек. Әммә шул уҡ ваҡытта бер ҙә әҙәбиәтһеҙ йәшәмәнем. Китап уҡыу ҡанымда. Студент саҡтан мәҡәләләр яҙҙым, унан оҙаҡ йылдар редакцияла ла эшләнем. Мәҡәлә яҙыу, ижади кешегә, үҙеңде ваҡлап тотоноу менән бер ул. Һин белемеңде, аҡылыңды, идеяларыңды ваҡлайһың, таратаһың. Улар иһә уҡыла ла онотола. Мин быны һуңлап ҡына аңланым. Шуға ла микән, әҙәбиәткә иллегә баҫҡас ҡына килеп индем. Юморескалар ҙа, хикәйәләр ҙә, повестар ҙа яҙҙым, балалар өсөн дә ижад иттем, әммә күңелгә яҡынырағы, шулай ҙа, сәхнә әҫәрҙәре булып сығалыр. Тик мин әлегә, бынан ары ошо жанрҙа ғына эшләйәсәкмен, тип тә әйтә алмайым. Сөнки эшмәкәрлегем илһам килеүгә бәйле. Яҙырға кәрәк, тигән принцип менән эшләмәйем, йөрәкһетеп, эстән урғылып сығып килгәндә генә ултырам. Бер тында яҙыла икән - тәҡдим итәм, этелеп-төртөлөп килһә - уҡыусыны ыҙалатмайым. Ниндәйҙер оло әҫәр ҡалдырыуҙы ла маҡсат итеп ҡуймайым, күберәк китаптар баҫтырыу ҙа төп бурыс түгел, бары уҡыусы, тамашасы һөйөүе тигән төшөнсәгә генә таянам. Был төшөнсә бер ваҡытта ла алдамай һәм яңылыштырмай.

**➔ Яҙыусы һәм драматург булыуҙан тыш, һеҙ умартасы ла икән...**

- Ҡортсолоҡ ата-бабамдан килгән һөнәр. Бәләкәй саҡта олатайым ауылдың етем-еһеренә бал таратырға ебәрә торғайны. Үҙем дә бер ваҡытта ла ауылымдан тамырҙарымды өҙмәнем. Ир кеше өсөн ер, йорт, хужалыҡтың бөтөнлөк билгеһе икәнлеген төшөнөп үҫтем. Улдарымды ла ошо юҫыҡта тәрбиәләнем. Мәле етеү менән умарталарыма тотонам һәм йәйҙе шул мәшәҡәттәр менән үткәрәм. Дүрт стена эсендә тәҙрәнән ҡарап ултырып яҙышыу ғәҙәтем юҡ. Саф һауала йөрөйөм, ҡулым эштә, янымда һәр ваҡыт кешеләр була. Ҡағыҙға төшөрөлгән образдарым да, сюжеттарым да аралашыу процесында белгән, күргән йәки башҡа килгәндәр. Шунлыҡтан, яҙмаларымда йәмғиәткә ят булған, ул ҡабул итә алмаған бер нәмә лә юҡтыр, тип иҫәпләйем.

Умартасылыҡ, тигәндән... Беҙ был йәшәйеш мәғәнәһен саҡ ҡына йәштәнерәк аңламағанбыҙ шул. Бәлки, беҙҙең быуын милләттең һаулығы юлындағы бер баҫҡысы ла булғандыр. Ул үҙ миссияһын ғына үтәгәндер. Бөгөн бит йәштәр аңлы, белемле, динле һәм, иң мөһиме, маҡсатлы. Улар беҙҙең быуын кешеләренең матур ваҡыттарын ҡыҫҡартыусы эскелектең дошман икәнлеген төшөнгән, сәләмәт тормош - ул сәләмәт балалар, сәләмәт милләт икәнлеген белә. Быны миңең ике улым да эсеү-тартыуға ҡәтғи ҡаршы, дингә ылыҡҡандар, йорттар төҙөп, ғаиләле, бала-сағалы булып йәшәп яталар. Был минең өсөн ғорурлыҡ.

Беҙҙең йәштәргә аң-белемгә ынтылырға һәм ата-баба кәсебен үҫтерергә кәрәк. Бына мин ошо йәшемдә алып барған умартасы кәсебен улар ҙа алып бара алыр ине. Килеме лә, аш-һыуы ла, юҡ-барға ваҡыт ҡалмаҫлыҡ мәшәҡәте лә етерлек. Шулай ҙа зарланырға түгел, яйлап барыһы ла ана шул дөрөҫ юҫыҡҡа бара, тип иҫәпләйем мин. Милләт тә бөтмәйәсәк, тел дә, рух та. Һәм әҙәбиәткә ғашиҡ китап уҡыусылар ҙа юҡҡа сыҡмаясаҡ. Юғиһә, һуңғы мәл шулай тип фаразлаусылар күбәйҙе. Зауыҡлы, уйлы кешеләр элек тә булды, киләсәктә лә буласаҡ. Бары өмөттө генә өҙмәҫкә кәрәк.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҒӘФҮ ИТ!

# ХӘСРӘТЕН ТАРАТТЫМЫ ИКӘН?



**Был хәлдә артыҡ ғәйебем дә юҡ шикелле, ә шулай ҙа ғәфү үтенгем килә. Теүәл ике йыл элек яҙғы елдең өшәндергес һыуығынан ҡалтыранып, туҡталышта маршрут автобусы көтәм. Ауырлы булғас, ҡат-ҡат кейем кейеп булмай, тиҙ генә хәл бөтә, тирләттерә, йөрәк ҡаға башлай. Өҫтөмә килбәтһеҙ генә, тоҡ ише куртка кейеп алғанмын. Үҙемдең әллә нишләп кәйефем шәп, туҡтауһыҙ йылмайып-көлөп торғо килә.**

Шулай, танау эсенән көйләй-көйләй баҫып торһам, тыҡырыҡтан автобус боролғаны күренде. Тәүҙә халыҡтың сыҡҡанын көттөм, шунан иплап кенә тотонғостарға үрелеп, салон эсенә индем. Унда ла кеше туп-тулы, ултырырға түгел, ҡайҙалыр тотоноорға ла урын юҡ. Тын алғыһыҙ тынсыу. Ҡапыл күҙ алдарым ҡараңғыланып китте хатта. Албырғап ҡарап тора инем, бер орсоҡ буйы ғына йәш ҡатындың, бер йәшлек самаһы балаһын күтәреп, кеше йырып ашығып сығып килгәнен шәйләнем. Туҡталышын күрмәй тороп ҡалғанмы, әллә күмәк халыҡты йырып, ваҡытында сыға алмай ҡалғанмы, белмәҫһен. Ҡулындағы балаһы шарылдап илай, ниҙер таптыра. Ни шыларға, ни салондан кире сығырға белмәй, аптырап ҡалдым. Дөрөҫөрәге, ҡапыл ғына ни эшләргә белмәй тора инем, ҡатын мине ҡулындағы балаһы менән ҡуша дөрөп, автобустан тышҡа этәрҙе һәм мин баҫҡыстан ергә ҡолап төштөм. Төштөм, тип, сепрәк-сапраҡ тултырылған тоҡ кеүек ергә ауҙым, иллә мәгәр бер еремә лә зыян килмәне, ауыртыныу ҙа һиҙмәнем. Бер нәмәгә генә аптыраным: мине торған ерҙән ышырырлыҡ көс ҡайҙан табылды икән шундай кескәй генә кәүҙәлә? Етмәһә: "Тора шунда, аңшайып..." - тип, мине сар-сор килеп әрләгән була. Үҙе әрһеҙ генә кейенеп алған, тубырсыҡ кеүек балағынаһы һаман илап бер була. Ауа-түнә аяҡҡа баҫҡан килеш, теге ҡатындың күҙҙәренә иғтибар иттем дә, аһ иттем. Күпме һыҙланыу, хәсрәт бар ине ул күҙҙәрҙә, әйтеп тә аңлатырлыҡ түгел. Тормошҡа булған бар асыуын, һыҙланыуын минә күсергән булғандыр инде, күрәһең. Кемдер булһа ла уның ҡыйынлыҡтарына яуап бирергә тейеш бит...

Алғы ултырғыстарҙың береһендә ойоп ултырған егет ҡапыл уянғандай булды ла, һикереп тороп, автобус салонына кире инеп барған миңә урын бирҙе. Автобус водителе мығыр-мығыр килеп, теге ҡатынды һүгә, йәнәһе, ваҡытында сыҡ, йоҡлап ултырма... Шунда, курткамды ҡаҡҡылап, инде тынысланып ултырған ерҙән тәҙрәгә күҙ һалдым: баяғы орсоҡ буйы ҡатын, һаман да мыжыған балаһын йыуата алмағас, нимәләр тип тамаҡ төбө менән екерҙе. Екерҙе лә, үҙе тамаҡ ярып сеңләй башлаған сабыйын ҡосаҡлап, үкһеп-үкһеп иларға тотондо. Ала-сола март ҡарына теҙләнеп, балаһын ҡосаҡ килеш үкһегән ҡатынды автобус пассажирҙары күрмәмешкә һалышты, водитель генә: "Больная", - тип ҡысҡырып, ишектәрен япты ла, яй ғына ҡуҙғалып китте.

Нишләптер, ике йыл самаһы элек булған был ваҡиға һаман баштан сыҡмай. Ниңә шул тиклем сабырһыҙланды, сәбәләнде, ярһыны икән был бәләкәй генә ҡарасман ҡатынҡай? Ниндәй хәсрәт төштө икән бисараҡайҙың башына? Ҡап-ҡара күҙҙәренә инеп урынлашҡан был һағыш, һыҙланыуын таратырлыҡ, йыуатырлыҡ, ярҙам итерлек кеше осраныы икән уға?

...Күптән инде үҙемдең балам тыуып, тәүҙә имгәкләп, шунан тәпәй баҫып атлап, хатта, шөкөр, йүгереп китте. Үҙемдә баяғы ҡатын урынына ҡуям да, уны йәлләп ҡуям. Еңел тормоштан дөйөм ҡала маршрутында бала менән тығылып йөрөмәйҙер бит инде. Нишләп кенә ҡатын артынан барманым, уның хәлен һорашманым икән? Бәлки, уға ярҙам дә кәрәк булғандыр. Һәр хәлдә, бөгөн мин унан ғәфү үтенер инем, уның һәм уның балаһы менән барыһы ла яҡшы икәнен белһәм, күңелем тынысланыр ине, тим дә...

**Айһылыу ҒӘЛЛӘМОВА.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Уҡыусыларыбыҙ хәтерләһә, бынан бер нисә йыл элек гәзитебеҙҙә "Ғәфү ит!" тигән рубрика асҡайныҡ ул. Кеше тигәнеңдең иң һөйһөнмәгәне - ғәфү үтенеү икәнен белгәнгә күрә булдырғайныҡ ул рубриканы. Кемдәргәләр үҙ күңелендә йөроткән ғәйеплелек тойғоһонан арыныу мөмкинлеге биреү ине ниәтебеҙ. Ғәфү үтенеүсенең үҙ исем-шәрифен атауы ла мотлаҡ түгел ине. Тик ул рубрика оҙаҡ йәшәмәне. Сөнки ғәфү үтенеүселәр күп булманы. Әлеге хат менән беҙ рубриканы яңыртмаҡсы булдыҡ. Яҙығыҙ беҙгә, көтәбеҙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫШЫН НИСЕК ТУҠЛАНЫРҒА?

■ Ҡышын да туҡланыу рационында һөт ризыҡтары, йәшелсә-емештәр етерлек булырға тейеш, ти белгестәр. Итте аҙнаһына ике тапҡыр ашарға, ҡалған көндәрҙә балыҡ, сыр, ҡуҙаҡлылар, сәтләүектәр, йомортҡа, эремсек ҡулланырға. Ризыҡ ныҡ эсе булмаһын, был ваҡытта организм уны һыуытыу өсөн артыҡ энергия сарыф итә. Һалҡын миҙгелдә һыу эсеүҙе кәрәкле тип тапмай күптәр. Диетологтар бының хата ҡараш булыуын белдерә, һалҡын һауа шулай уҡ тирене киптерә, бындай күнелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн һыу эсергә кәрәк. Ҡышын кеше тирләп бармаһа ла, тышта тын алғанда һыу күпләп сығыуға әйләнә. Кәһүәгә ҡарағанда үлән сәйҙәре, морс, компот яҡшыраҡ. Йоҡлар алдынан сәй эсергә була. Емеш-еләктәргә килгәндә, бананға ҡарағанда әфлисун, мандарин файҙалыраҡ, уларҙа С витамины бар.

■ "Time" журналы яҙыуынса, бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Мәҫәлән, һеҙ компьютерҙа ултыраһығыҙ, әммә эргәгеҙҙә ятҡан тағы бер нисә гаджетҡа ла иғтибар бүлеп өлгөрәһегеҙ. Тикшеренеүҙәрҙә 10 меңдән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡоролма менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле, күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу процесы әҙәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡоролмалар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын. Ул күҙҙең селтәрле ҡабығына зыян итә. Күҙҙәр арымаһын өсөн белгестәр 20-20-20 ҡағиҙәһен күҙәтергә тәҡдим итә. Һәр 20 минут һайын күҙҙәргә 20 минутлыҡ ял бирергә һәм 20 фут (6 метр тирәһе) алыҫлыҡта урынлашҡан предметҡа ҡарарға.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош ныҡауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Өфөнөң 3-сө балалар стоматологияһы поликлиникаһы ортодонтика бүлеге мөдире Зарема ШӘЙҘУЛЛИНА менән кескәйҙәрҙең теш ауырыуҙары тураһындағы һөйләшеүебеҙ... ғаиләләге тәрбиә мәсьәләләренә лә барып ялғанды.**

# ЫҢЙЫ-МӘРЙЕН ТЕШТӘРЕҢ...



**➔ Балаларҙы табипҡа, бигерәк тә теш врачына алып барыу үҙе бер проблема булып тора. Булмаһа, һүҙҙе шунан башлайыҡ: ата-әсәләр баланы теш табибына алып килгәнгә тиклем нимә эшләргә тейеш?**

- Әлбиттә, тәү сиратта уны алдан әҙерләү кәрәк. Бының өсөн өй шарттарында бергәләп табип-пациент уйыны уйнау яҡшы. Мәҫәлән, креслоға йәки ултырғысҡа ултырып, баланың ауыҙын асырып, тикшереп, шунан бала ата-әсәһенең тештәрен ҡараған булып, уйнап алырға мөмкин. Юҡһа, ҡайһы бер балалар килә лә, бүлмәгә инмәҫтән уҡ ҡурҡып илай башлай. Шуның өсөн беҙ, әгәр инде ашығыс дауалау талап ителмәһә, беренсе ҡабул иткәндә танышабыҙ ғына, процедураларҙы икенсе тапҡырға ҡалдырырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, ортодонтика кабинетында тештең күсермәһен алабыҙ. Бының өсөн теш пластилины, төрлө төм бирелгән һағыҙҙар бар. Протездарҙы балаларға 3,5 йәштән яһай башлайбыҙ. Был йәштә улар бигерәк бәләкәй, әммә уларҙың ауыҙына ла ҡоралмалар тығырға, тик кенә ултыртырға кәрәк. Шуға ла күп нәмә ата-әсәнән, уларҙың балаға нисек итеп аңлатыу эше алып барыуынан тора. Сөнки бала саҡта улар ата-әсә ҡушҡанын эшләй.

**➔ Ҡайһы бер ата-әсәләр балаларына, беҙ һине теш тылсымсыһына алып барабыҙ, һин тыңлаусан, аҡыллы булһаң, ул һиңә бүләк йәки аҡса бирәсәк, тип алдаштыра. Бындай алымға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Баланы дәртләндереү, әлбиттә, яҡшы, әммә уны алдарға ярамай. Әгәр теште дауалау кәрәк икән, ул ата-әсә әйткәнсә, ауыртыуһыҙ йәки ниндәйҙер уңайһыҙлыҡһыҙ үтмәйәсәк. Балаға, тешендә ҡорт бар, шуны алабыҙ, тип алдап та булмай, сөнки уға ҡортто алып күрһәтеү мөмкин түгел. Шуға ла беҙ, бына, тешендә тишек бар, ул боҙола башлаған, әгәр уны хәҙер дауаламаһаҡ, кариес тешеңде тағы ла нығыраҡ ашаясаҡ, тип аңлатабыҙ. Ҡайһы берҙә ата-әсәләр балаларынан алда үҙҙәре инеп, ниндәйҙер уйынсыҡ йәки бүләк ҡалдырып сыға, әлбиттә, беҙ уларҙың уйынын дауам итәбеҙ. Әммә был ҡулланырға мөмкин булған ысулдарҙың береһе генә. Һис шикһеҙ, бала табипҡа күренгәндән һуң ҡыуаныс тойғоһо кисерергә тейеш. Әммә был тойғо алдаҡҡа ҡоролмаһын ине. Сөнки баланы бер тапҡыр алдап була, икенсе тапҡыр уның алданмауы ла ихтимал.

**➔ Заман үҙгәрәме, әллә кеше үҙеме, әммә йылдар үтеү менән ауырыуҙар мутациялана, элек ярағандар дарыуҙар хәҙер инде һөҙөмтә бирмәүе лә ихтимал. Ә бына теш ауырыуҙары үҙгәрәме, әллә улар элек нисек булған, шулай ҡала киләме?**

- Хәҙерге ваҡытта теш-яңаҡ патологиялары йыш осрай. Быны тештәребеҙгә сәйнәү көсөргәнеше аҙ булыуы менән аңлатырға мөмкин. Туҡланыу рационы еңел аҙыҡтарға күсте, бөтөн аҙыҡ-түлек тигәндәй эшкәртелгән, шуға беҙҙең яңаҡ кәрәгенсә эшләмәй һәм үҫешмәй. Беҙ һәр саҡ баланың һөт тештәре үҫешенә йүнәлеш тотабыҙ һәм улар сығыу менән балаға алма, кишер кеүек ҡаты әйберҙәр бирергә кәрәк. Күп кенә ата-әсә, ул бәләкәй әле, сәйнәй алмай, ауыҙы тала, тип, ризыҡты блендер аша үткәреп йәки иҙеп бирергә тырыша. Шуға күрә, бик йыш тап тешләнеш (прикус) менән проблемалар тыуа ла инде. Сөнки көсөргәнеш, баҫым юҡ. Шуның өсөн баланы мотлаҡ ҡаты әйбер сәйнәтергә өйрәтеү зарур. Теш-яңаҡ аномалиялары һаны ла арта. Бик йыш тап ошо мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт итәләр. Ҡайһы берҙә өс йәштә үк тештәрҙе протезлайбыҙ, ҡайһы берҙә алғы тештәрҙе алырға тура килә. Бала балалар баҡсаһына йөрөй, тиңдәштәре араһында комплекс барлыҡҡа килә. Шуға күрә тештәр урынына протез ҡуябыҙ. Иң мөһиме, бала йылмайыуҙан, һөйләшеүҙән ҡурҡмай.

**➔ Протез аҫтында ла теш үҫә бит...**

- Шуға күрә балалар даими рәүештә күҙәтеү аҫтында булырға тейеш. Ике-өс айға бер тикшереп торабыҙ. Әгәр бала ҡапыл үҫеп китһә, йылына бер тапҡыр протезды алмаштырабыҙ. Әммә бында төп яуаплылыҡ ата-әсәгә төшә, сөнки табиптар һәр саҡ балалар менән була алмай, ә ата-әсә уларҙың эргәһендә. Протездарҙы балалар ни тиклем оҙағыраҡ сисмәйенсә йөрөтә, шул тиклем яҡшыраҡ. Ауыҙ ҡыуышлығындағы барлыҡ ағзаларға стимуляция булһын өсөн протезды сисмәй ашарға кәрәк. Бында тағы шуны әйтеп китергә кәрәк, бала протез, пластинка кейһә, уның һөйләшеүе лә ауырлаша. Шуға балалар баҡсаһында тәрбиәселәргә, мәктәптә уҡытыусыларға был хаҡта әйтергә һәм улар ҙа баланың хәленә инергә тейеш.

Хәҙер ортодонтик дауалауҙа яңы алымдар, яңы материалдар ҡулланыла. Беҙ ҙә уларҙы файҙаланабыҙ һәм ата-әсәләргә тәҡдим итәбеҙ. Әгәр бала уңайһыҙлыҡ тоймай икән, уларҙың тәьҫире пластинкаларҙан, протездарҙан кәм түгел. Шуға күрә, ата-әсә балаһын теш табибына ни тиклем иртәрәк килтерә, ярҙамды ла иртәрәк ала һәм оҙайлы ваҡыт балаһын аппарат кейеп йөрөүҙән арындыра.

Брекеттарҙы 13 йәштән ҡулланырға тәҡдим ителәр. Сөнки тештәр патологияһын бала саҡта төҙәтеү күпкә еңелерәк. Дауалауҙың һөҙөмтәһе лә тотороҡлораҡ буласаҡ. Сөнки аҫҡы яңаҡ, физиология буйынса, ологайғанда 6 миллиметрға тарая. Ә бит тештәр шул килеш ҡала. Брекеттарҙы мотлаҡ 1,5-2 йыл кейеп йөрөргә кәрәк. Шуға ла балаларҙың йәшенә, яуаплылығына ҡарап, нимә эшләргә икәнен хәл итәбеҙ. Ҡыҙҙар, әлбиттә, матурлыҡ төшөнсәһенә яуаплы ҡарай, ҡушҡанды тейешенсә үтәй, ә малайҙар менән хәл башҡасараҡ. Мәҫәлән, йыл ярымдан һуң әсәләре килеп, улым йыл ярым пластинка менән йөрөнө, һөҙөмтә юҡ, тигән осраҡтар ҙа бар. Ләкин аппарат күберәген малайҙарҙың йә кеҫәһендә, йә рюкзагында йөрөй икән, бында кем ғәйепле. Беҙ, белгестәр, күпме ваҡыттан һуң үҙгәрештәр буласағын белеп торабыҙ, динамиканы күҙәтәбеҙ.

**➔ Балаларҙа ниндәй теш ауырыуҙары осрай?**

- Иң киң таралғаны - кариес. Әммә ололарҙа булған кариес менән балаларҙыҡы ныҡ айырыла. Был сир бик тиҙ тарала, ә бала саҡта тештең анатомик формаһы икенсе төрлөрәк - тештәр бәләкәй, пульпа менән ҙурыраҡ майҙан уратып алынған, шуға проблемалы тешке ике миллиметр быраулай башлаһаң, шунда уҡ аҙған, таралған кариес булыуы мөмкин. Оло кеше тешендә кариес булһа ла оҙаҡ йылдар йөрөй ала, ә балаларҙа ул тиҙ генә аҙып китә. Шулай уҡ балаларҙың теш ауырыуҙары миҙгелгә лә бәйле. Улар күберәк тышта йөрөй, йышыраҡ ауырый. Өҙләгеүҙәр тешкә йоғонто яһап, породонтит булыуы ихтимал.

**➔ Әйтеп китеүегеҙсә, тештәрҙең төп функцияһы - ул сәйнәү. Ә был функцияның боҙолоуы ниндәй эҙемтәләргә килтереүе мөмкин?**

- Ризыҡты йүнләп сәйнәмәйенсә, шул килеш йотһаҡ, ул ашҡаҙанға эшкәртелмәйенсә, киҫәк-киҫәк булып төшөп итә, ашҡаҙан уны артабан эшкәртеү өсөн күп энергия һәм көс сарыф итә. Шулай уҡ был гастритҡа алып килеүе лә ихтимал. Эшкәртелеп бөтмәгән аҙыҡ эсәктәргә эләгеп, уларҙың да эшмәкәрлеген сафтан сығарасаҡ. Шуға күрә аҙыҡты йотҡанға тиклем яйлап, ашыҡмай ғына сәйнәргә кәрәк. Әгәр тешләнеш патологияһы булғанда, телмәр боҙола. Ғөмүмән, беҙ башҡа белгестәр менән дә бер төптән, комплекслы эшләйбеҙ. Мәҫәлән, телмәр боҙолғанын ишетһәк, баланы логопедҡа йүнәлтәбеҙ, әгәр тын алыуы ауыр икән - лор-табипҡа ебәрәбеҙ, сөнки тын алышының дөрөҫ булмауы ла яңаҡ формалашыуға йоғонто яһай. Ошондай проблемаларҙы бөтөрмәй тороп, эшебеҙҙең һөҙөмтәһе булмаясаҡ.

**➔ Тешләнеш патологияһы нилектән барлыҡҡа килә?**

- Баланы күкрәктән айырғас, әсәйҙәр, ғәҙәттә, уларға имеҙлек, имеҙлек кейҙерелгән шешә менән һөт бирә. Бындай ысулдар баланы алдаштырһа ла, тора-бара насар ғәҙәткә әйләнеп китеүе бар. Мәҫәлән, балаға дүрт йәш, ә ул һаман да имеҙлектән айырылмай. Тап ошо имеҙлек баланың ауыҙы эсендә даими баҫым тыуҙырып, тешләнеште боҙоуға килтерә. Икенсенән, баланың нисек йоҡлауына ла етди иғтибар бирергә кәрәк. Ул гел бер яғында ғына йәки яңағы аҫтына ҡулын һалып йоҡлай икән, уны был ғәҙәттәренән арындырыу сараһын күрегеҙ. Шулай уҡ баланы тәпәш мендәргә һалығыҙ. Ата-әсә уның ауыҙ эсендәге үҙгәрештәрен күрмәүе лә мөмкин, әммә белгестәр күҙенә тайпылыштар шунда уҡ салына.

**➔ Балалар өсөн дә теш пасталары, теш щеткалары сығарыла. Уларҙың ниндәйҙәрен һайлау отошлораҡ?**

- Иң ышаныслылары - аптекала һатылғандары, тиер инем. Сөнки улар мотлаҡ сертификация үтә, ә инде ниндәйҙер кибеттә, магазинда һатылғанының ҡайҙа, ҡасан сыҡҡаны, составы да билдәһеҙ. Балалар өсөн теш пасталары алғанда, уларҙың йәш буйынса тәғәйенләнешен дә ҡарарға кәрәк. Иң кескәйҙәр өсөн алты айҙан өс йәшкә тиклем маркировка була. Сөнки бала өс йәшкә тиклем йүнләп төкөрә алмай, һәм теш пастаһының составы, бала уны йотҡан хәлдә лә, организмы өсөн зыянлы булмаҫҡа тейеш. Ололарға тәғәйенләнгән пасталар менән 12 йәштән ҡуллана башларға мөмкин. Теш щеткаларын һайлағанда ла уларҙың маркировкаһына иғтибар итергә кәрәк. Шулай уҡ баланың физик мөмкинлектәре сикле икән, бындай категория өсөн махсус щеткалар эшләнә, уларға шундайҙарҙы алырға кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**"...Ташлама, әсәй, ташлама, мине изге доғаңдан", тип йырлай йырсы. Шул һағышлы йырҙы ишеткән һайын әсәйем мәрхүмә: "Ә-ә-әй, балаларым, ташлау ғына ҡайҙа инде, һәр намаҙҙа Аллаһы Тәғәләгә доғаларымды ҡылып торам, һәммәләрегеҙ өсөн", - ти торғайны. Байтаҡ ваҡыттарҙан алып йырлана килгән был йырҙың һүҙҙәре, бер яҡтан, ҡәҙерле әсәйемде хәтерләтһә, икенсе яҡтан, балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем, туғандарым, яҡындарым һәм милләттәштәрем хаҡында ла һәр төрлө уйҙар тәрәнлегенә төшөп китергә мәжбүр итә.**

# ӘСӘЙҘЕҢ ДОҒАЛАРЫ...



Беҙ инде пенсия йәшендәге оло быуын кешеләре, үҙебеҙҙе "совет балалары", тип тә атап өйрәнгәнбеҙ. Беҙҙең заманда дин тотҡан инәйҙәр, олатайҙар хаҡында, йәғни, иҫке замандың уҡыуы бер аҙ тейгән кешеләр тураһында уҡытыусыларыбыҙ "юҡ нәмә менән булашып йөрөгән наҙан, замандан артта ҡалған быуын" тиҙәр ине, ошо һүҙҙәрҙе ҡаныбыҙға һеңдереп үҫтерҙеләр. Заманында үҙебеҙ ысын күңелдән яратып йөрөгән пионер, комсомол кеүек бөтөнләйгә динде инҡар иткән ойошмалар беҙҙең тәрбиәселәребеҙ булды. Һәммәләребеҙ ҙә шуның аша үттек. Динебеҙгә ниндәй генә бысраҡ яғып маташманылар ул саҡта! Уны хатта әҙәм балаһының аңын томалаусы опиумға тиңләштереүҙән дә тартынманылар. Ә шулай ҙа йөрәктәрендә иман йөрөткән туғандарыбыҙ, яҡташтарыбыҙ һәр саҡ беҙҙең арала булды. Ниндәй генә осор булыуына ҡарамаҫтан, ҡайҙалыр эшкә, уҡыуға, йә әрме сафына оҙатҡандамы, йә булмаһа, берәй ауырлыҡ килгәндә, сирләп киткән мәлдәребеҙҙә атай-әсәйҙәр бер Аллаһы Тәғәләгә беҙҙең өсөн доға ҡылырҙар ине...

Ваҡыт тик бер урында ғына тормай шул. Һанаулы ғына йылдар үтеү менән әҙәм балалары ҡартая, әжәлдәре етеп, ахирәткә лә китеп бара. Был - фани донъя тормошо өсөн нормаль күренеш. Беҙҙе изге доғаларынан һис бер ваҡытта ташламаған олатайҙарыбыҙ, өләсәйҙәребеҙ әллә ҡасан уҡ гүр эйәләре булды инде. Күптәребеҙҙең ата-әсәйҙәре лә баҡыйлыҡта. Әммә быны менән тормош туҡталып ҡалмай, әлбиттә, алға барыуыбыҙҙы дауам итәбеҙ. Оло ғына йәштәргә яҡынлашып киләбеҙ, артыбыҙса балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ үҫеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Хәҙер инде үҙебеҙҙең дә ҡәҙерле бала-сағаларыбыҙ өсөн Раббыбыҙға доғалар ҡылыуҙың ни тиклем ныҡ кәрәклеге хаҡында уйлана башларға ваҡыт. Тик доға ҡыла белгән яҡындарыбыҙҙың күптән инде был донъяла юҡлығын тоябыҙ. Сөнки күптәребеҙ инде сал сәсле олатай һәм өләсәйҙәр булып китеүебеҙгә ҡарамаҫтан, Аллаһы Тәғәләгә нисек доға ҡылыуҙы ла, хатта уның ни икәнлеген дә белеп еткермәйбеҙ. Ул ғына ла түгел, доғалар өйрәнеүҙе ниндәйҙер башҡа кешенең, йәиһә тик муллаларҙың эше тип һанайбыҙ. Йылына бер-ике мәртәбә өйгә мулла саҡыртып, доға ҡылдырып алыу менән генә сикләнәбеҙ. Һүҙ юҡ, муллалар, имамдар - һәр төрлө ғибәҙәт ҡылыуҙы яҡшы белгән, махсус белемле кешеләр. Әммә бүтәндәр өсөн Аллаһы Тәғәләгә ялбарыу уларҙың иң төп бурысына инмәй. Уларҙың төп тәғәйенләнеше - башҡаларҙы тура юлға өндәү, тоғро дингә өйрәтеү. Ә беҙҙең эш - уларҙан өйрәнеү.

Ни өсөн бына ошо мәсьәләгә уҡыусыларҙың иғтибарын йүнәлтергә тырышам әле? Сөнки, минең ышаныуымса, ҡасандыр беҙҙең өсөн әсәйҙәр Аллаһы Тәғәләгә ҡылған "һаҡлаусы" һәм "яҡлаусы" доғаларҙы хәҙер беҙ бала-сағаларыбыҙ өсөн үҙебеҙ ҡылырға һәм быға уларҙың үҙҙәрен дә өйрәтергә тейешбеҙ. Балалары өсөн Раббыбыҙға ата-әсәләрҙең шәхсән үҙҙәре ялбарыуына бер ни ҙә етмәй! Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт өс кешенең ҡылған доғаһы айырыуса ҡабул булыусан икәне хаҡында әйткән. Беренсеһе - мосафир (үҙенең тыуған еренән ситтә, сәфәрҙә булған кеше), икенсеһе - кемдеңдер тарафынан нахаҡҡа рәнйетелгән кеше, өсөнсөһө - ата-әсә. Танышмы ул, түгелме, әммә борон-борондан беҙҙең ата-бабаларыбыҙ сәфәрҙә булған башҡа мосолман кешеләренә һәр саҡ ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән. Ауылдарҙа йәшәгән оло кешеләрҙә был гүзәл йола әле булһа ла һаҡлана. Сөнки мосафирҙы хөрмәтләп, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешергә өмөт итеп йәшәгән боронғолар. Шулай уҡ башҡаларҙы нахаҡҡа рәнйетеүҙең ниндәй хәүефле икәнен дә белгәндәр, рәнйегән кешенең бәддоғаһынан ҡурҡҡандар...

Бәйғәмбәребеҙҙең ата-әсә ҡылған доға, һис шикһеҙ, ҡабул буласағы хаҡындағы һүҙҙәрен дә ата-олатайҙарыбыҙ, инәйҙәребеҙ яҡшы белгән һәм үҙҙәре тереклектә саҡта ана шул изге бурыстарын үтәргә тырышҡан. Үкенесле, әммә бөгөн беҙҙең күптәребеҙ дин өлкәһендә тома наҙанбыҙ. Ә кемдәрҙер быны бөтөнләйгә кәрәк түгел тип һанай. Хәҙерге ваҡытта динден тыйылмауының ниндәй ҙур әһәмиәте булыуын күптәребеҙ аңлап та еткермәй. Һәр бер ауылда тиерлек мәсеттәр, махсус белемле имамдар булыуы - үҙе бер оло бәхет бит! Бына шуның өсөн Раббыбыҙға шөкөр итә-итә, ваҡыт табып, үҙебеҙ һәм балаларыбыҙ, Мәсеткә барғылап, аҙлап ҡына булһа ла дин ғилемен өйрәнһәк, быны ни тиклем ҡиммәт һәм файҙалы икәнлегенә лә инаныр инек. Белемле имамдар беҙгә иң беренсе нәүбәттә бар ғаләмде барлыҡҡа килтереүсе Аллаһ хаҡында, тик Уға ғына буйһоноу кәрәклеге тураһында аңлатыр ине. Күптәребеҙ бөтөнләйгә аҙ белгән Аллаһ илсеһе - Мөхәммәт бәйғәмбәр хаҡында ла бәйән итерҙәр ине. Һәр кешегә иң кәрәкле булған иман шарттарын, Ислам дине ҡанундарын бына шул ғилемле имамдарыбыҙҙан өйрәнер инек. Ниндәй генә һөнәр эйәһе булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, дөрөҫ ғибәҙәттәрҙе, шул иҫәптән доға ҡылыуҙы ла уларҙан өйрәнеп алһаҡ, донъяла һәм ахирәттә дин ғилеменең нигеҙҙәрен минималь кимәлдә булһа ла үҙләштергән кешеләр рәтендә булыр инек. Доға ҡылыу тик ғәрәп телендә генә була икән, тип тә уйларға ярамай. Теләктәреңде ниндәй телдә генә әйтһәң дә (башҡортсамы ул, татарсамы, урыҫса булһа ла ярай), Ер йөҙөндәге барлыҡ телдәр - Аллаһы Тәғәлә теле. Шуның өсөн дә, "мин бер ни ҙә белмәйем", тип шымып ҡына йөрөү ярамай.

Һүҙ аҙағында доғаның тағы бер бик мөһим үҙенсәлеге хаҡында ла әйтеп китеүҙе кәрәк тип таптым. Дин ғилеме менән яҡшы таныш булған ата-олатайҙарыбыҙ, үҙ балаларың өсөн кире, йәғни насар доғалар ҡылыу ярамағанлығы, ниндәй генә асыулы булған хәлдә лә балаларҙы ҡарғау тыйылғанлығы хаҡындағы Бәйғәмбәр хәҙисен дә белгәндәр. Ата-әсә ҡарғышының ифрат та хәүефле булыуы боронғо "Саҡ менән Суҡ" бәйетендә лә сағылдырыла. Унда тап бына ошо хаҡта һөйләгән ғаилә трагедияһы бәйән ителә. Әсәйем мәрхүмәнең "Әсәй, илама, ниңә илайһың? Үҙең ҡарғағас - сыҙа һин..." тип көйләй-көйләй ошо ҡыҙғаныс бәйетте һөйләгәне һаман да күҙ алдымда. Әсәләре ҡылған бәддоғанан һуң, бик тә шуҡ булған ике игеҙәк улдары бер-береһе менән мәңге күрешә алмаҫлыҡ ике ҡошҡа (береһе көндөҙгө, икенсеһе төнгө ҡош булып) әүерелеп осоп китеүе хаҡында һөйләнгән был бәйетте иҫләп, күҙҙәргә йәш эркелә. Был бәйет - балаларын һәр төрлө ҡарғыш һүҙҙәре менән әрләргә ғәҙәт иткән бәғзе ата-әсәләргә ҡарата етди ишара. Яратҡан яҙыусыбыҙ Миләүшә Ҡаһармановалың да "Саҡ менән Суҡ" тип аталған, иламайынса ғына уҡып булмай торған бер хикәйәһе бар. Был әҫәрҙә һүрәтләнгән хәҙерге заман ғаиләһендәге ҡайғылы ваҡиға ла әлеге әсә ҡарғышына бәйләнешле... Ата-әсәләр (айырыуса әсә кешеләр) берәй эш боҙғаны өсөн үҙҙәренең шаян балаларын әрләгәндә, һәр һүҙен уйлабыраҡ әйтергә тейешлекте бер ҡасан да күҙ уңынан ысҡындырмаһын ине. Был бик етди мәсьәлә. Шулай уҡ мосафирҙың һәм нахаҡҡа рәнйетелеүсенең бәддоғаһынан да һаҡланыу кәрәк. Бәйғәмбәр хәҙисенә таянып, үрҙә әйтелгән бына ошо мәғлүмәттәрҙе һис кенә лә һәр төрлө хөрәфәттәр менән бутарға ярамай. Ҡәҙерле балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең изге доғаларыбыҙҙан ташламайыҡ, хөрмәтле ата-әсәләр!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: аң проблемалары

Үҙегеҙ тураһында нимә уйлауығыҙ миңә кәрәк түгел. Үҙегеҙҙе бөйөк аҡыл эйәһе, бигерәк алйот, ныҡ ябыҡ йәиһә артыҡ һимеҙ тип иҫәпләй алаһығыҙ; активист йәки пацифист, офис хеҙмәткәре йәки етәксе, хужабикә йә эшлекле ҡатын-ҡыҙ, аралашыусан, шаулы йәки шым, оялсан, эскесе, алдаҡсы, ҡурҡаҡ, невротик, һәр саҡ кемдәндер йәки нимәнәндер ҡурҡып, депрессияла була алаһығыҙ. Көн торошон, эттәрҙе, бесәйҙәрҙе, күнекмәләрҙе, бал ҡорттарын, юлдағы тығындарҙы йәки шпинатты күрә алмайһығыҙ. Әммә атап үтелгәндәрҙең береһе лә һеҙҙе шәхес булараҡ асып бирмәй. Былар барыһы ла ғәмәлдәрегеҙҙе генә күрһәтә. Әгәр үҙегеҙҙе бары тик ғәмәлдәрегеҙ менән генә күҙаллаһағыҙ - хаталы фекерҙәһегеҙ. Үҙегеҙҙе сикләйһегеҙ һәм хатта, аҡларлыҡ сәбәптәр эҙләргә тырышып та ҡарамайынса, үҙ-үҙегеҙҙе кире ҡағаһығыҙ. Үҙ-үҙеңә ышанмаусанлыҡ аңға бәйле проблема булып тора. Үҙегеҙ хаҡындағы хәҡиҡәтте аңлау менән ни өсөн шундай булыуығыҙҙы аңлаясаҡһығыҙ һәм үҙегеҙҙе нисек бар, шулай ҡабул итергә һәм яратырға өйрәнәсәкһегеҙ.

Аңды тормошоғоҙға йоғонто яһаған барлыҡ аңлы һәм аңһыҙ зиһен тип билдәләргә мөмкин. Ул тормош кисерештәрен, тәжрибәһен, белемен, интеллектын, интуицияһын, инстинкттарын һәм тойомлау менән һиҙгән бөтөн нәмәне кәүҙәләндерә. Аңдың хәҙерге кимәле һеҙҙең күңел торошона, мөнәсәбәттәрегеҙгә, эмоциональ реакцияларға, хөрәфәттәргә, ғәҙәттәргә, теләктәргә, хәүефләнеүгә, ынтылыштарға һәм маҡсаттарға йоғонто яһай. Иң мөһиме - ул һеҙҙең шәхси әһәмиәтегеҙҙе, икенсе төрлө әйткәндә, үҙ-үҙегеҙгә мөнәсәбәтте сағылдыра.

Аң ысынбарлыҡ тураһындағы күҙаллауығыҙҙы билдәләй. Аң фотоаппаратҡа тиң. Пленкала ниндәй образдарҙы һаҡларға икәнлеген хәл итәһегеҙ һәм тап ошо күренештәр аңығыҙҙы билдәләй. Фотоаппарат башҡаларҙың кире сифаттарын һәм үҙегеҙҙең етешһеҙлектәрегеҙҙе, өмөтһөҙлөк һәм күңел төшөнкөлөгөн һаҡлауы мөмкин. Һеҙ телевизор ҡарай, гәзит уҡый йәки фажиғә, ауырыуҙар, ярлылыҡ тураһында һөйләүсе башҡа мәғлүмәт сығанағы менән танышыуығыҙ ихтимал. Быларҙың барыһы ла аңда теркәлеп бара. Һеҙ фокус алып, ошо фотоларҙы туплайһығыҙ һәм бер көн килеп уларҙы ысынбарлыҡ кеүек ҡабул итә башлайһығыҙ, сөнки һеҙҙә ошоларҙы раҫлаусы фотолар бар.

Проблема шунда - хәҡиҡәт һәм ысынбарлыҡ мотлаҡ тап килергә тейеш түгел. Әгәр аң ялған күҙаллауҙарҙы ҡабул итә икән, ҡиммәттәр, үҙең һәм башҡалар тураһындағы инаныуҙар, аңлау хаталы буласаҡ. Дөрөҫ булмаған ҡарашҡа нигеҙләнгән ғәмәлдәр һеҙгә хаҡ булып тойоласаҡ һәм һеҙ уны аҡларлыҡ тәртип моделен үҙләштерәсәкһегеҙ. Һәр ҡабул ителгән ҡарар һәм ғәмәл шул ваҡыттағы аң кимәленә нигеҙләнә.

Һеҙ һәр ваҡыт мөмкин булғандың барыһын да эшләйһегеҙ. Күпселек был раҫлауҙы тәү тапҡыр ишеткәндә аптырап ҡала. Сөнки күп йылдар һеҙгә, яҡшы була алаһығыҙ, тип тылҡыныштар һәм шуны раҫланылар. Был бик яҡшы кәңәш булғанда ла, уға эйәрер алдынан әлеге ваҡытта аңығыҙ нимәнән ғибәрәт икәнен аңлағыҙ. Һеҙ бер ваҡытта ла әлегенән яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәтә алмаясаҡһығыҙ. Сөнки әлеге ваҡыттағы аң кимәле менән сикләнгәнһегеҙ. Күп белеү яҡшы эшләү тигәнде аңлатмай әле. Бары тик әлеге ваҡыттағы аң кимәле үҙгәргәндән һуң ғына "яҡшыраҡ эшләй" аласаҡһығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 15 ФЕВРАЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Семейный альбом". Драматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.10 "Контрольная закупка".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Самара". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Культ". 1-3 серии. Остросюжетный сериал (12+).
23.35 "Честный детектив" (16+).
00.35 "Сети обмана. Фальшивая реальность", "Прототипы. Капитан Врунгель". Док. фильмы (12+).
02.10 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.10 "Под властью мусора" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Книга сказок". Сказка для малышей (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "Кадеты". Сериал (12+).**
**17.45, 01.45 "Интервью" (12+).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.40 "Дневник Спартакиады" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Еще один год". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 И. Абдуллин. "Свояки" (12+).**

## 16 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Семейный альбом". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят!" Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Семейный альбом". 3-я и 4-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 Ежегодная церемония вручения премии "Грэмми".
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Самара". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Культ". 4-6 серии (12+).
23.40 "Вести.doc" (16+).
01.25 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 2-й, "Смертельные опыты. Карта мира". Док. фильмы (16+).
02.55 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00. 07.50 "Сәләм" (12+).**
**07.45 "Дневник Спартакиады" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час". Прямой эфир.**
**13.00 "Бәхетнамә". Прямой эфир.**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.45 "Малый бизнес" (12+).**
**16.00 "Следопыт" (12+).**
**16.45 "Кадеты". Сериал (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (0+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Новокузнецк).**
**22.00 "Уфимское "Времечко". Народные новости.**
**23.00 "Монтана". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Р. Куни. "Любовь на троих" (12+).**

## 17 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Семейный альбом". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.35 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Семейный альбом". 5-я и 6-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика" (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-5". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Культ". 7-я и 8-я серии (12+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Химия. Формула разоружения", "Как оно есть. Дары моря" (16+).
02.40 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.40 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 07.50 "Сәләм!" (12+).**
**07.45 "Дневник Спартакиады" (6+).**
**10.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час". Прямой эфир.**
**13.00 "Бәхетнамә". Прямой эфир.**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Наука 102". Научно-познавательный тележурнал (12+).**
**16.45 "Кадеты". Сериал (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Чтец". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Н. Гаитбаев. "Ой, кто там лежит" (12+).**

## 18 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Семейный альбом". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.35 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Семейный альбом". 7-я и 8-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Самара". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Культ". 9-я и 10-я серии (12+).
22.50 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.30 "От Петра до Николая. Традиции русских полков", "Таврида. Легенда о золотой колыбели". Док. фильмы (12+).
02.30 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.30 "Комната смеха" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00, 07.50 "Сәләм" (12+).**
**07.45 "Дневник Спартакиады" (6+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 02.30 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час". Прямой эфир.**
**13.00 "Бәхетнамә". Прямой эфир.**
**14.00 "Бай баҡса" (6+).**
**14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Кадеты". Сериал (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Падение Олимпа". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 Ф. Бурнаш. "Молодые сердца" (12+).**

## 19 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Семейный альбом". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15, 01.25 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Семейный альбом". 9-я и 10-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
02.15, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Самара". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Культ". 11-я и 12-я, заключительная, серии (12+).
22.50 "Старшая сестра". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
02.50 "Сталин и Третий Рим". Док. фильм (12+).
03.50 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 07.50 "Сәләм!" (12+).**
**07.45 "Дневник Спартакиады" (6+).**
**10.00, 13.30 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Охотники за генами". Док. фильм (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**13.45 "Весело живем!" (0+).**
**14.00 "Уҙаман" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**16.45 "Время башкирское", "Уфимский городовой", "Уфимский тракт", "Как это сделано" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Док фильм "Тауба" (16+).**
**20.45 "Малый бизнес" (0+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Поцелуй сквозь стену". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т. Миннуллин. "Вот так случилось" (12+).**

## 20 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.55 "Модный приговор" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Семейный альбом". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.10 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети".
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.40 "Билет в Томагавк". Комедия (12+).
02.25 "Наедине со всеми" (16+).
04.55 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.35 "Тренды" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Переезд". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.25 "Переезд". Продолжение сериала (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.00 "Васильки". Мелодрама (16+).
03.05 "Окаянные дни. Иван Бунин". Док. фильм (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 Новости (0+).**
**11.45 "Полезные новости".**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 Док. фильм "Жизнь в тайге" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Париж! Париж!"" Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Н. Асанбаев. "Израненная судьба" (12+).**

## 21 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.25 "Дачная поездка сержанта Цыбули". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Леонид Куравлев. Афоня и другие" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.00 "Белые росы". Худ. фильм (12+).
15.50 "Голос. Дети".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?"
19.10 Праздничный концерт.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Подмосковные вечера" (16+).
23.50 "Если я останусь". Драма (16+).
01.55 "Тихий дом". Итоги Берлинского кинофестиваля.
02.25 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Федор Чудинов - Феликс Штурм.
03.25 "Белые люди не умеют прыгать". Худ. фильм (16+).
05.35 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.15 "Следствие ведут знатоки". "Ушел и не вернулся". Сериал.
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 04.05 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается".
12.50 " Гордиев узел". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 " Гордиев узел". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов". Шоу перевоплощений (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
02.20 "Привет с фронта". Худ. фильм.
04.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 12.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 Док. фильм "Рами Гарипов".**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "4-й период" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (0+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Салават Юлаев". Худ. фильм (12+).**
**18.15 "Народы Башкортостана" (6+).**
**18.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.00 "Ловец ветра". Худ. фильм (6+).**
**20.45 "Красная кнопка" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 Мотогонки на льду. Международный турнир памяти Г. Кадырова (12+).**
**00.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.30 "Счастливое число Слевина". Худ. фильм (16+).**
**03.30 А. Бунин. "Морозное дыхание" (12+).**

БАҠСА

# МӘШӘҠӘТЛЕ МИҘГЕЛ ЕТӘ



**Февралдең аҙаҡҡы декадаһы баҡсасылыҡ миҙгеленә старт бирә, тиҙәр. Төрлө үсемлектәрҙең үсентеләрен иртә яҙҙан сәсеп үстереүҙең ыңғай яҡтары күп. Бигерәк тә ҡырау иртә төшкән төбәктәрҙә уңышты иртәрәк алыу өсөн кәрәк был. Ҡайһы бер йәшелсәләрҙе февраль аҙағында ла сәсергә була. Шулай ҙа артыҡ иртә сәсергә лә ярамай, сөнки өйҙә үскән үсенте аҙаҡ насар уңыш биреүе, яҡтылыҡ етерлек төшмәү һөҙөмтәһендә буйға артыҡ үсеп китеүе бар.**

Ай аҙағына тиклем сельдерей, татлы борос ултыртыу мотлаҡ. Сельдерейҙең орлоғон тупраҡ менән күммәйҙәр, бары тик өҫтөн һауа үтһен өсөн урын ҡалдырып, быяла йәки пленка менән ҡаплағыҙ. Ул 22-24 градус йылылыҡта шытып сыға. Ер еләген орлоҡтан үстерәһегеҙ икән, еләкте лә ошо мәлдә сәсергә кәрәк. Әлбиттә, уны яҙ ҙа, йәй ҙә сәсергә була, тик февралдә үк хәстәрләһәгеҙ, быйылғы миҙгелдә тәүге уңышты йыя аласаҡһығыҙ.

Йылытылған теплицалар өсөн томаттарҙы февралдең аҙағында сәсәләр. Шулай уҡ 6-7 көндә шытып сыға. Баклажанды ла сәсә башларға була. Ҡыҫҡаһы, тәжрибәле баҡсасылар билдәләүенсә, был осорҙа нимәне һуңғараҡ сәсергә мөмкин түгел, шуларҙың барыһын да ултырта башлайҙар. Вегетация осоро оҙаҡҡа һуҙылған йәйге сәскәләрҙе лә өйҙә үстерә башлайҙар. Мәҫәлән, Шабо ҡәнәфере сәскәндән һуң 5-6 ай үткәс сәскә ата. Аквилегия, аризема, бабаҫыр уты, алтын шөңгөрҙәр, альп тауҙары өсөн тәғәйенләнгән ҡыңғырауҙар, иристар ошо төркөмгә ҡарай. Петунияны нисек үстерергә өйрәндек инде хәҙер, шулай уҡ орлоҡтарҙы тупраҡ менән ҡапларға ярамай икәнен барыһы ла беләләр.

Февраль - ағастарҙың кәрәк булмаған ботаҡтарын ҡырҡыу мәле лә. Быны мотлаҡ улар уянып өлгөргәнсе эшләргә кәрәк. Бигерәк тә быйыл ҡыш йылы килде, тиҙҙән ағастар олоно буйлап һут йүгерә башлар, моғайын.

Ботаҡтарҙы ҡырҡып ташлағандан һуң, баҡса ыуары (вар садовый - ҡайнатылған ыҫмала) менән ҡапларға, ул ҡырҡылған урынды яҡшылап ҡапларға тейеш, бының өсөн ыуар һалынған банканы йылы һыуҙа тотоп, уны иретеп алығыҙ. Ҡырҡылған ботаҡтарҙы баҡсанан алып сығып ташлағыҙ.

Тиҙҙән ҡояшлы март етә. Шуға ла әле үк емеш ағастарын ҡояштан яныуҙан һаҡларға кәрәк. Бының өсөн олондо һәм ботаҡтарҙы аҡ туҡыма, иҫке лутрасил киҫәктәре, бинт менән уратырға. Олон тирәләй ҡарҙы тапап сығырға, был ағасты сысҡандар зарарламаһын өсөн кәрәк. Көл йәки торфҡа кәрәсин ҡушып, олон тирәләй һибеп сығырға ла була, сысҡандар ҡырҡыу көслө еҫте яратмай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# СӘСТӘРЕҢДЕ МАТУР КИЛЕШ ҺАҠЛА

***Зәйтүн майы һәм йомортҡа.*** Бер йомортҡа ағын туҡырға һәм өс ҡалаҡ зәйтүн майы ҡушып болғарға. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы сәскә һөртөп, 20-30 минут тотҡандан һуң, шампунь ярҙамында йыуып төшөрөргә. Зәйтүн майының составында витаминдар һәм аминокислоталар күп, ә йомортҡа ағы асаланған сәстәрҙең структураһын тергеҙеүсе протеиндарға бай. Был масканы ҡулланғандан һуң сәстәр күпереп, ялтырап китә.



***Банан һәм авокадо.*** Был маска өсөн ныҡ бешкән, хатта ҡарайған банандар һәм бер-нисә авокадо емеше кәрәк. Банандарҙы, авокадо һәм бер ҡалаҡ зәйтүн майын ҡушып болғап, еүеш сәстәргә һөртөргә. Был масканы 20 минуттан һуң йылы һыу менән йыуып төшөрөргә кәрәк. Унан һуң сәстәр йомшарып һәм тигеҙләнеп ҡала.

***Бал.*** Сәстәрегеҙгә балдың үҙен генә һөрткәндә лә ярай, йә булмаһа, зәйтүн майы менән ҡатнаштырып һөртөргә мөмкин. Был маска сәстәрҙе дымландырыу өсөн кәрәк, бигерәк тә эҫе йәй көндәрендә файҙалы буласаҡ.

***Алмалы һеркә.*** Был ысул ярҙамында сәстәрҙе йомшартып, асаланыуын ваҡытлыса бөтөрөргә мөмкин. Стакандың өстән бер өлөшө күләмендә алма һеркәһенә бер стакан һыу ҡушып болғарға. Шампунь менән йыуғандан һуң ошо күперекле ҡатышманы сәстәрегеҙгә һөртөргә, өс минуттан һалҡынса һыу менән сайып төшөрөргә.

***Әсегән һөт.*** Һыйыр һөтөн ҡараңғы урынға ултыртып ҡуйып, әсетергә кәрәк. Бер нисә көндән әсегән һөттө йыуылған сәскә һөртөргә мөмкин. Был масканы 20 минуттан һуң һалҡынса һыу менән сайҡатырға, шампунь ҡулланмаҫҡа.

***Һыра.*** Һыра сәстәргә дымлылыҡ бирә, туҡландыра, нығыта һәм ялтырата. Шуға күрә, сәсте йыуғандан һуң бер литр һыра менән сайҡатып, баш тиреһенә еңел массаж яһарға. Һыра еҫенә түҙеп тора алмаһаң да, аҙнаһына бер тапҡыр был ысул менән сәстәрҙең торошон яҡшыртыу һөҙөмтәле буласаҡ.

***Кокос майы.*** Һуңғы арала кокос майы бик күп крем, маска һәм шампунь составтарына индерелә. Әммә уларҙа кокос майына ҡарағанда хуш еҫ биреүсе химик матдәләр күберәк. Сөнки кокос майы, уның юнысҡыларынан айырмалы, еҫле булмай. Шуға күрә, ябай таҙартылмаған кокос майын ҡулланыу күпкә файҙалыраҡ. Уны ирегәнсе йылытып, сәскә һөртөп, полиэтилен менән ҡапларға һәм таҫтамал менән урап ҡуйырға. Был масканы 30-40 минуттан һуң йыуып төшөрөргә. Кокос майы сәстәрҙе күпертеп ебәрә.

***Ҡыяр, йомортҡа һәм зәйтүн майы.*** Бер йомортҡаға ҡыяр йомшағын һәм бер ҡалаҡ зәйтүн майын ҡушып, яҡшылап болғатырға һәм сәстәргә һөртөргә. Масканы 10 минуттан сайып төшөрөргә. Был ысулдарҙы ҡулланғанда сәстәр етен кеүек йомшаҡ булыр.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 февраль "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия
**14 февраль "Һаран"** (Ж.Б. Мольер), комедия
**16 февраль "Джут"** (О. Жанайдаров), драма
**17 февраль "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл
**18 февраль "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим)
**19 февраль "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13-14 февраль "Приключения обезьянки Бьянки"**, әкиәт. Башлана 12.00
**14 февраль "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия. Башлана 18.00
**16 февраль "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма
**18 февраль "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 10.00, 12.00
**19 февраль "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы




**20 февраль "Ҡурай байрамы"** тип аталған ҙур тамаша үтә. Был сарала билдәле ҡурайсылар - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡолов, Башҡортостандың халыҡ артисы Ишморат Илбәков, Башҡортостандың атҡаҙаған артистары Азат Биксурин, Рушан Биктимеров, Илшат Ишморатов, республика конкурстары лауреаттары Илнур Хәйруллин, Илнур Һибәтуллин һәм ҡурай сәнғәтен үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән башҡа оҫталар ҡатнаша.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 февраль "Аладдин: тающий песок или жгучий снег..."**, әкиәт. Башлана 12.00
**17 февраль "Бермуд өсмөйөшө"** (Р. Ҡолдәүләт), драма
**19 февраль "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (6) дүшәмбе | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 16:49 | 18:19 | 19:49 |
| 16 (7) шишәмбе | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 17 (8) шаршамбы | 7:07 | 8:37 | 13:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |
| 18 (9) кесе йома | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |
| 19 (10) йома | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 16:58 | 18:28 | 19:58 |
| 20 (11) шәмбе | 7:00 | 8:30 | 13:30 | 17:00 | 18:30 | 20:00 |
| 21 (12) йәкшәмбе | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 17:02 | 18:32 | 20:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҒҮМЕРҘӘР ИКЕ КИЛМӘЙ

Кеше тәбиғәте үҙгәрмәй, - тип өйрәтә ғалимдар, - заман ғына үҙгәреп тора. Бәндә һәр ваҡыт заманға яраҡлашырға тырышып йөрөй. "Заман - башҡа, заң - башҡа" тигәндәре ана шул. Шуға ла: "Элеккеләр ҡара халыҡ, наҙан һарыҡ булған, аҡыллы кешеләр беҙ генәбеҙ", - тигәндәр яңылыша. Элеккеләр тел хикмәтен белгән, быуындан-быуынға тапшырылып килгән тормош тәжрибәһен хикмәткә әйләндерә һәм аҡыл менән донъя көтә белгән. Көн итеүҙәр, донъя көтөүҙәр, бәлки, уларға еңел булмағандыр, әммә ауырлыҡ уларҙы сабыр булырға өйрәткән. Шул сабырлығы һәм тырышлығы менән улар бөгөнгө тормоштоң нигеҙен ҡороп ҡалдырған. Ғүмерҙең ҡәҙерен белгән.

"Ғүмерҙең ҡәҙерен белегеҙ, - тип өйрәткән Бәйғәмбәребеҙ. - Эй, Аллаһ, тормошомдоң иң бәхетле мәле - уның һуңы, ҡылған ғәмәлдәремдең иң файҙалыһы - ул биргән һөҙөмтәләр, иң күркәм минуттары - һинең менән осрашҡан сағымда булһа ине".Сөнки: "Фани донъя, үтеп кенә торған төндәр һәм көндәр, мөьминдәр өсөн - хазина, игелектәр - һин мохтажлыҡ кисергән тауар, табыштар - йәннәткә, отолоуҙар йәһәннәмгә сәбәп булған сауҙа урыны". Мосолман тормоштоң тәмен татып йәшәй белә; булһа - шөкөр итә, фәҡирлеккә төшһә - сабырлығын юғалтмай, өмөтөн өҙмәй, ауырлыҡтар килгәндә - сер бирмәй. Ғүмере оҙон булған һайын мосолман өсөн яҡшыраҡ, сөнки ул күберәк белә, игелектәрҙе күберәк эшләй, тормош тәжрибәһен йәштәргә күберәк бирә. Хәҙерге замандағы ҡайһы берәүҙәр кеүек, күберәк эсеп ҡалырға тырышмай.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИЖАДИ КИСӘМ ДӘ...

## "Мираç" менән бергә



**Өфөбөҙҙөң йөҙөк ҡашы - "Мираç" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле әле генә тамашасыларын ҙур концерт менән ҡыуандырғайны. 18 февраль көнөндә был үҙенсәлекле коллектив хор солисы Венера Юлгилдинаның беренсе ижад кисәһенә саҡырмаҡсы. Тыңлаусыларына халҡыбыҙҙың оҙон көйҙәрен оçта башҡарыусы булараҡ таныш йырсы эстрадала ла ышаныслы аҙымдар яһай. Концертта һәр кем күңеленә хуш килгән йырҙар тыңлап кинәнәсәк, ти ул. Хәйер, был сара тураһында Венера Самат ҡыҙының үҙенән һөйләтәйек:**

- Ғәҙәттә, артистар концертын йә үҙенең, йә ижадының юбилейына арнарға тырыша. Был концерт менән мин ижадыма күҙәтеү яһарға ла теләмәйем, бары тик тыңлаусыларымдың һорауын, хатта талабын тормошҡа ашырам. Тамашасы, нишләптер, йырсының айырым концерттары ла булырға тейеш, тип иçәпләй бит, гел һорайҙар, шуға сәмләнеп тотондом. Төп хеҙмәт урыным "Мираç" йыр һәм фольклор ансамбле, мин унда хәҙер һигеҙ йыл эшләйем. Шуға ла концертты "Мираç"һыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Тәүге бүлектә ансамбль менән бергә сығыш яһаясаҡбыҙ, икенсе өлөштә эстрада йырҙары буласаҡ. Дуçтарым Иҙел Нурғәлин, Сәйет Билалов, Салауат Мөхәмәтйәров та шатлығымды уртаҡлашмаҡсы. Концерт "Сәстәр сәскә бәйләнә..." тип атала.

Ансамбль етәкселегенең дә ниәтемде хуплауы минең өсөн яңылыҡ булманы, сөнки улар беҙҙең һәр беребеҙҙе ансамблдең бер өлөшө итеп түгел, ә шәхес итеп ҡарай. Шуға ла, мәçәлән, хорҙа йырлап йөрөгән һәр солистың иçеме тамашасыға яҡшы таныш. Яңғыҙ йырсыны халыҡ яратаһа ла, "Мираç" ансамбленең бер юлы йыры ла, бейеүе лә, оркестры ла бар, шуға уны тамашасы үҙ итә. Һәр сығыш - үҙе бер театр тамашаһы. Хорҙың да профессиональ кимәле ныҡ юғары тип иçәпләйем һәм унда эшләүемә һөйөнөп бөтә алмайым. Беҙҙең концерттарҙа гел генә зал шығырым тулы була. Ансамбль иçеменә тап төшөрмәй, халҡыбыҙҙың рухи мираçын түкмәй-сәсмәй тамашасыға еткерә. Шуға ла бындай мөмкинлек биргәндәре өсөн Өфө ҡала округы хакимиәте, мәҙәниәт идаралығына рәхмәтлебеҙ, улар ҡурсаламаһа, "Мираç" бөгөнгө юғарылыҡта була ла алмаç ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халҡының, шулай уҡ республикала йәшәгән башҡа милләттәрҙең дә рухи, ижади мираçын, ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалыуҙа ҙур эштәр башҡарған "Мираç" ансамбленең солисы, Бөрйән ҡыҙы Венера Юлгилдина һеҙҙең барығыҙҙы ла ижад байрамына саҡыра. Моң, матурлыҡ байрамына рәхим итегеҙ, хөрмәтле уҡыусылар.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ҺҮҘЛЕК

# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?



**Ваҡ алабута** - лебеда мелкоцветковая
**Ваҡ ҡымыҙлыҡ, ҡуян үләне** - кислица обыкновенная
**Ваҡ сәскәле ҡына** - недотрога мелкоцветная
**Грек сәтләүеге** - грецкий орех
**Гөлнәфис, тырнаҡ үләне, мальва** - мальва
**Дала бажаты** - мятлик узколистный
**Дала селеге** - дереза
**Дала юл япрағы, бысынҡы үлән** - подорожник степной
**Дауылут, ҡамғаҡ** - качим метельчатый
**Диуала** - дивала однолетняя
**Дөйә ҡалғаны** - ковыль перистый
**Дөйә үләне** - верблюдка
**Дүмгәләк** - качим постенный
**Дәфнә** - лавровишня
**Ебәк ағасы** - дерево тутовое
**Еҙүлән, келерия** - келерия тонкая, тонконог
**Екән, екәнле ҡамыш** - рогоз, куга
**Елбәгәй сәскә** - ветреница лесная
**Еңсәле күрән** - осока буровлагалищная
**Ерек** - ольха
**Ер еләге** - клубника
**Еркәүек, ерек ҡураһы, ерегүлән** - лабахник вязолистный
**Еçле гөл, шоколад сәскәһе** - козелец пурпуровый
**Еçле тиле торма** - желтушник левкойный
**Еçле ромашка** - ромашка ароматная

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# КҮҘЕ ГЕНӘ...

## упайып ҡалған

**Атлыҡса** - малға бесән һалыр урын
**Ажырая** - асыулана
**Аңшайып ҡарай** - мәғәнәһеҙ ҡарай
**Әлмәçләнеү** - сабырһыҙлыҡ
**Эсмәйел** - күп ашай
**Әүәçлек, бүртлек** - лапаç
**Кәләп һала** - унда-бында йөрөй
**Күмһей** - ҡайнап ултырған һөттөң көйөүе
**Күлбеп тора** - күпереп тора. "Күлбетеп тороп шәл бәйләгән, күлбетеп юрған һырыған", - ти торғайны әсәйем.
**Күпсеп сыға** - әсеп сыға
**Күҙе генә упайып ҡалған** - ябыҡҡан
**Көпөлдәп тора** - эсе буш һауытҡа һуҡҡанда сыҡҡан тауыш
**Көлдөксә** - мейес, усаҡ алды
**Ҡатыуы ҡалҡҡан** - остеохондроз
**Ҡойроғон һыртҡа һалған** - яуаплылыҡтан ҡасҡан
**Ҡутара** (аҡтарыу мәғ. түгел) - күп итеп
**Ҡымырйый** - тамаҡ ҡысытып тора, йәки күл төбөндә балыҡ ҡымырйый
**Лаҡап** - кәлепләнгән булған хәл
**Лүтер** - төпһөҙ һаҙлыҡ
**Мөҙөрәгән** - йонсоған
**Мөлкөлдәп тора** - һелкенеп тора
**Тимтыбыҡлау** - ҡыçтау. "Ҡунаҡ табынында күршенде тимтыбыҡлап ултыр", - тиерҙәр ине.
**Тамылйып тора** - өлгөрөп еткән, матур
**Тош итмәһен** - яҙмаһын, тап итмәһен. "Балаларға насар холоҡло кеше тош итмәһен", - тиер ине әсәйем, йәки насар кеше яҙмаһын.
**Тыңшайған** - үсеккән
**Буҙарған** - уңған, төçө киткән
**Һерәпселәй, оҙон ҡата** - хәйерселәй, өйҙән-өйгә күп йөрөй
**Тыңҡыш** - төптән йыуан
**Һапата** - һәпрә, ялҡау
**Һиңмай** - аңра
**Һанда-һаяҡ** - һирәк
**Һелдерләк** - ҡойҡанан әҙерләнгән ризыҡ, холодец
**Уçлаптай** - ҙур
**Уғата тигәс тә** - маҡтағас та
**Умыра тешләй** - ҡайыра тешләй

**Гөлдәр КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Баймаҡ районы**
**Шүлкә ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОНЪЯЛА НИ ӘСЕ?

## Етемлек әсеһе әсе

Ҡыҙ ҡыҙлы булмаç, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаç, атай ҡәҙерен белмәһә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир өсөн ҡайһы саҡта ҡатынының теле дошманыныҡынан да хәтәрерәк була.

**(Себастьян Брант).**

Турғай ҡанаты менән бөркөт һымаҡ оса алмаçһың...

**(В. Генри Хадсон).**

Тормош байлығы беҙ онотҡан хәтирәләрҙә.

**(Чезаре Павезе).**

Тейешенсә йәшәү өсөн йә аҡыллы, йә сынйырлы булыу кәрәк.

**(Диоген).**

Күрәҙәлектәр тарихҡа күскәс кенә өйрәнелә башлай.

**(Томас Браун).**

Үҙ-үҙенде яратыу еңел йәшәүҙе аңлатмай әле.

**(Марлен Дитрих).**

Күңелең бошонғанда башҡалар бәхетенә ҡарау ҡыйын шул...

**(Альфонс Доде).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ир ҡатынына бик ҡаты үпкәләгән. Ир үҙе дини кеше, ә ҡатыны бер нәмәгә лә ышанмай, ти. Ир көн дә ҡатынын дингә ылыҡтырыу өсөн нимәләр эшләй, әммә тегеһе уның өгөтләүҙәренә күнмәй, ти. Аптырағас, ир мулланы өйөнә саҡыра һәм ҡатынын дингә килергә өгөтләүҙе үтенә. Быna иртән иртүк быларҙың йортона мулла килеп инә. Был саҡта өй хужаһы намаҙ ҡылып ултырған була. Мулла иҙән һепереп йөрөгән ҡатынға мөрәжәғәт итеп, былай ти:**

**- Ирең һине дингә килеүҙән баш тарта, бер ваҡытта ла Аллаға арнап доғалар уҡымай, ирең менән бергә намаҙ уҡырға теләмәйһең, тип зарланды. Ана, ҡара ireңә, иртәнге намаҙ тамамланһа ла, ул һаман доғалар уҡып ултыра...**

**- Ниндәй доға уҡып ултырһын ул, - тип ҡул ғына һелтәй ҡатыны. Быны ишетеп ултырған ир, ярһыуынан доғаларын ҡысҡырып ҡабатлай башлай.**

**- Ана, ишетәһеңме, - тип өндәшә тағы мулла,- ул бит доғаларынан айырыла алмай, мәсеткә даими йөрөй...**

**- Һин дә ышанғанһың икән иремә, - ти ҡатыны. - Ул бит әлеге мәлдә уйҙары менән Алла эргәһендә түгел, ә кибеттә, һатыусы менән тауарҙың хаҡын нисек төшөрөү тураһында бәхәсләшә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираçты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баçылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаçары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 243/02